ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2-8 ғинуар (һыуығай) 2021

№1 (939)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Яңы 2021 йылды яҡтылыҡҡа, яҡшылыҡҡа, изгелеккә, уңыштарға, именлеккә өмөттәр менән ҡаршы алайыҡ. Беҙҙең ихлас ҡотлауҙарыбыҙҙы ҡабул итегеҙ! Яңы йылда ла бер-беребеҙгә тоғролоҡ һаҡларға, һеҙгә - уҡыусыларыбыҙ, беҙгә - һеҙҙе ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр, рухлы сығыштар, оптимистик һәм позитив хәбәрҙәр менән ҡыуандырыусы ижадсылар булырға яҙһын. Рәхмәт бар булғанығыҙға!**

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Беҙ сауҙагәр, кәсепсе түгел, беҙ яугир халыҡ вәкиле 7



Туй мәжлестәре... йола үтәүгә әйләнһен ул 8-9



Сибайҙа... премьера артынан премьера! 11



Телен ҡәҙерләгән халыҡ... үҙе лә ҡәҙерле булыр 13



ТВ-программа 14

### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Яңы йыл башланып торғанда былтырғы йылдың яҡшы ваҡиғаларын да телгә алып, киләсәккә өмөттәр, уй-ниәттәребеҙ менән уртаҡлашып алайыҡ әле...***

***Гөлназ АЗАТОВА, эшҡыуар, "2020 йыл ҡатын-ҡыҙ директоры", Сибай ҡалаһы:*** Мин Сибай ҡалаһында буҙа етештереү эше менән шөғөлләнәм. Был хаҡта республика гәзиттәрендә, радио һәм телевидениенан да мәғлүмәттәр, тапшырыуҙар күп булды, шуға күрә "Киске Өфө" уҡыусылары ла был хаҡта беләләр тигән өмөттән, эште ойоштороу этаптары, ваҡытында булған ҡыйынлыҡтар һәм проблемалар хаҡында тәфсирләп һөйләп тормайым. Эш башлаған һәр кемде лә бындай ауырлыҡтар урап үтмәйҙер, иң мөһиме - үҙ хыялына хыянат итмәйенсә, һайлаған юлында ныҡышмалылыҡ менән алға барыу кәрәк. Шөкөр, күп көс һәм нервылар талап иткән ул ваҡыттар барыбер артта ҡала. Әлеге көндә беҙ буҙа цехы ойоштороуға өлгәштек, уның ҡеүәте - аҙнаһына 700 литр шифалы эсемлек. Беҙҙең буҙа хәҙер үҙебеҙҙең Сибай ҡалаһы һәм Баймаҡ районында ғына түгел, баш ҡалабыҙ Өфөнөң 70-ләп магазинында ла һатыла. Башҡортостан Башлығы Радий Фәрит улы Хәбировҡа рәхмәтлебеҙ, ул беҙҙең эш менән ҡыҙыҡһыныуын белдереп, хуплап ебәреүе, бәләкәй һәм урта эшҡыуарҙарға ярҙамға килергә әҙер тороуы менән яңы уңыштарға рухландыра.

2020 йыл минең өсөн шуныһы менән иҫтәлекле булды: "Беҙҙең бренд" V аҙыҡ-түлек йәрминкәһендә "Иң яҡшы ризыҡ" конкурсында буҙабыҙҙы II дәрәжә диплом менән бүләкләнеләр, ә бына яңыраҡ ҡына "2020 йыл ҡатын-ҡыҙ директоры" республика конкурсында "Милли традицияларҙы һаҡлау һәм үҫтереү" номинацияһында еңеүсе булдым. Әлбиттә, эш башлаған саҡта мин бындай наградалар хаҡында уйламайҙа инем, тик үҙемдең күңелем ятҡан эш менән шөғөлләнергә теләнем генә. Хәҙер аңлайым: ошо маҡсатыңа тоғролоҡ барыбер ниндәйҙер һөҙөмтәләр бирмәй ҡалмай һәм уның киң йәмәғәтселек тарафынан танылыу алыуы, хупланыуы киләһе уңыштарына нигеҙ һала.

Шуға ла мин һәр кемгә киләсәктә күңеленә ятҡан эш менән шөғөлләнергә яҙһын ине, тип теләйем, сөнки был кешене еңеүгә илтеүсе бик көслө мотивация. Үҙ эшенде асырға тигән теләк бар икән, уға ҡурҡмайынса ҡыйыу торорға кәрәк. Минең девиз - "Теләгең бар икән - тот та эшлә!", ҡалғаны яйлап үҙе һиңә килер.

Был донъяла бер тапҡыр ғына йәшәйбеҙ, шуға ла үҙеңдең нимәгә торошло икәнеңде һынап ҡарау, ғаиләңде, яҡындарыңды лайыҡлы тормош шарттары менән тәьмин итеү, кешеләргә, йәмғиәткә үҙеңде кәрәкле итеп тойоуҙан да изгерәк маҡсат юҡтыр. Киләсәккә ниәттәр шул уҡ: файҙалы, шифалы эсемлек - буҙа етештереүҙе яңы, заманса технологик шарттарҙа дауам итеү һәм етештереү күләмен арттырыу. Әйткәндәй, бөгөнгө пандемия осоронда буҙаның сиргә ҡаршы шифаһы ла баһалап бөткөһөҙ: айырыуса дарыуҙар ҡулланырға тура килһә, эсәк-ашҡаҙан һәм бауыр эшмәкәрлеген көйләү, организмды таҙартыу өсөн буҙанан да шәп дауа юҡ. Яңы йылда байрам өҫтәлебеҙҙә лә спиртлы эсемлектәр урынына үҙебеҙҙең буҙа, ҡымыҙ кеүек милли ризыҡтарыбыҙға өҫтөнлөк бирәйек.

### ФАРАЗДАР

# ХӘЙЕРЛЕГӘ ЮРАЙЫҠ

**Йыл ахырында бөтәбеҙҙе лә бер үк һорау борсой: киләһе йыл нисек булыр? Әҙәм балаһы, ғәҙәттә, тыуасаҡ йылға ҙур өмөттәр бағлап, йәше-ҡартына тиклем ниндәйҙер мөғжизә көтөп ҡаршылай. Ә был юлы айырыуса уйланырға, фараздар ҡорорға урын бар, шулай уҡ төрлө күрәҙәләрҙе лә аңлап ҡабул итергә була, сөнки бөтә ғаләм алдында бер үк һорау: Сысҡан ҡороп киткән тоҙаҡтан тиҙ генә ҡотолормо кешелек?**

Көнсығыш йондоҙнамәһендәге иң бәләкәй бер мәхлүк оло бола һалып, бөтөн донъяны дер һелкетте: ҡеүәтле илдәрҙең иҡтисад тармаҡтарын көрсөккә терәне, кешеләрҙе бер-береһенән айырҙы, араларҙы алыҫлаштырҙы, аң төпкөлөнә даими хәүеф, ҡурҡыу ҡотҡоһо һалды, уның ҡарауы, донъяға ҡарашыбыҙҙы, тәртибебеҙҙе, аңыбыҙҙы үҙгәртте. Кешелек ғибрәт алһын, хаттин ашыуҙарҙан аңына килеп, үҙлегенә ҡайтһын өсөн, бәлки, шулай кәрәк тә булғандыр? Сысҡанды шуға ла, үпкәбеҙ ни тиклем ҙур булһа ла, артыҡ ғәйепләмәйек әле, ипле генә оҙатайыҡ уны, биргән һабаҡтары өсөн рәхмәтебеҙҙе лә йәлләмәйек. Алда беҙҙе Сысҡандан әллә күпмегә ҙурыраҡ, ҡеүәтлерәк билдә - Һыйыр (Үгеҙ) көтә. Күрҙек, эш кәүҙә ҙурлығында түгел икәнлегенә лә инандыҡ, тик шулай ҙа был һыйыр малынан ни көтөргә?

**(Дауамы 12-се биттә).**



✓ *Иң мөһиме, былтырғы йыл беҙҙе булғанын ҡәҙерләргә өйрәтте. Мәңгелек ҡиммәттәргә ҡарата мөнәсәбәтебеҙҙе үҙгәртте. Йәнле аралашыуҙың, ҡосаҡлашып, ҡул биреп күрешеүҙең кеше өсөн ниндәй әһәмиәткә эйә икәнен дә аңланыҡ.*



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# БӘХЕТЛЕ БУЛАЙЫҠ

**Һәр дәүер әҙәм балаһына үҙенсә һынауын ҡуя. Былтырғы йыл ғәли йәнәптәре беҙҙе самаһыҙ эҫе көндәре, урман янғындары менән йонсотто, шулай уҡ тәбиғәт ҡомартҡыларына ҡарата мөнәсәбәттәребеҙҙе лә һынаны. Иҡтисади үҫеш йәһәтенән дә, социаль мөнәсәбәттәрҙә лә тәрән эҙ ҡалдырҙы ул. Халҡыбыҙҙың күпме талантлы шәхестәрен юғалтыу һаман күңелдәрҙе тетрәндерә.**

Пандемияға бәйле, бәлки, күптәребеҙҙең хыялы, планлаштырған эше бойомға ла ашмағандыр. Башҡарған эшебеҙ ҙә үҙебеҙ теләгәнсә килеп сыҡмағандыр. Йәштәр - туйын, ололар юбилейын кисектереп торорға мәжбүр булғандыр. Ял итергә йәки ситкә эшкә китергә теләгәндәрҙең дә ниәте туҡталып тороуы ихтимал. Иҫәнлек булһа, быларҙың барыһын да ҡасан да үткәрергә мөмкин.

Иң мөһиме, былтырғы йыл беҙҙе булғанын ҡәҙерләргә өйрәтте. Мәңгелек ҡиммәттәргә ҡарата мөнәсәбәтебеҙҙе үҙгәртте. Йәнле аралашыуҙың, ҡосаҡлашып, ҡул биреп күрешеүҙең кеше өсөн ниндәй әһәмиәткә эйә икәнен дә аңланыҡ. Яныбыҙҙағы кешеләрҙе һаҡлау, ҡурсыу инстинкты барлыҡҡа килде, бер-беребеҙ өсөн яуаплылыҡ хисе көсәйҙе. Һаулыҡты һаҡларға, шәхси гигиена талаптарын үтәргә, хатта ҡулды йыуырға ла өйрәтте бит ул. Ҡыҫҡаһы, йәшәйештең төрлө өлкәһендә лә ҙур тормош һабағы биргән йыл булды.

Быға тиклем сит ил киноларынан ғына күреп белгән дистанцияла эшләү алымын үҙләштерҙек. Мәктәп уҡыусылары, студенттар онлайн-форматта уҡырға өйрәнде. Ә иң мөһиме, ата-әсәләргә уҡытыусыларҙың ни тиклем кәрәкле һәм ҡәҙерле икәнен аңғартты. Күпме онлайн-конкурстар, фестивалдәр үтте. Бер педагог дистанцияла ойошторолған сараларҙың өҫтөнлөгөн шулай тип билдәләгәйне: "Офлайн конкурстарҙа уҡыусыларҙы уҡытыусыһынан, жюри ағзаларынан башҡа бер кем дә күрмәй ине. Ситтән тороп ойошторолғас, әсәй-атайҙар, өләсәй-олатайҙар ҙа социаль селтәрҙәрҙә әүҙемләште, балаларын, ейән-ейәнсәрҙәрен күреп ҡыуаналар, тауыш бирәләр, фекерҙәрен яҙалар". Шулай, кире күренештең дә ыңғай яғын табып йәшәлде былтыр.

Бына Яңы йыл да буҫағабыҙ аша үтте. Ни көтөргә Һыйыр (Үгеҙ) йылынан? Ниндәй ваҡиғалары менән иҫтә ҡалыр ул? Йондоҙҙар вәғәҙәләүенсә, бар йәһәттән дә ыңғай булмаҡсы. Тормошобоҙға яңы ҡыуаныстар, һөйөнөстәр өҫтәһә өҫтәһен, әммә, иң мөһиме - Яңы йыл иҫке бәхетебеҙҙән айырмаһын. Бөтә Ер шарын шомға һалған, йыл әйләнәһенә беҙҙе хәүеф ҡулсаһында тотҡан пандемия үтеп китһен. Һәр ғаиләгә, һәр йортҡа бәрәкәт һәм ҡот алып килһен! Беҙҙән һеҙгә теләк шул...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Яңы йыл башланып торғанда былтырғы йылдың яҡшы ваҡиғаларын да телгә алып, киләсәккә өмөттәр, уй-ниәттәребеҙ менән уртаҡлашып алайыҡ әле...*

***Азат СУФИЯНОВ, Башҡиравтодор акционерҙар йәмғиәтенең Хәйбулла юл төҙөү-ремонт идаралығы начальнигы:*** 2020 йыл ауыр һәм ҡатмарлы булыуға ҡарамаҫтан, республикабыҙ етәкселеге районадарҙы ярҙамынан ташламай. Мәҫәлән үткән йылдың декабрь уртаһында, Баймаҡҡа эш сәфәрендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм БР Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров урындағы Юл-төҙөү-ремонтлау идаралығында булдылар һәм Урал аръяғы райондарының юл хужалыҡтарына тантаналы рәүештә ҙур бүләктәр - өр-яңы һәм заманса ҡеүәтле юл техникаһы төрҙәре тапшырҙылар. Баймаҡ һәм Хәйбулла юл идаралыҡтары, мәҫәлән, һәр береһе 3-әр берәмек техника: грейдерҙар, КАМАЗ үҙ бушатҡыс автомобилдәре, төрлө механизмдар менән йыһазландырылған махсус тракторҙар алды. Был, әлбиттә, юлсылар өсөн бик ҡыуаныслы ваҡиға булды. Бөтәһенә лә яҡшы билдәле, Урал аръяғы райондарында, айырыуса беҙҙең Хәйбулла яҡтарында, ҡыш, ғәҙәттә, ауыр килә, йыш ҡына ҡар-буран да баҫып китә. Ваҡытында шул арҡала фажиғәле хәлдәр ҙә булғыланы. Юлдарҙы таҙартып, тейешле тәртиптә тотоу һәм юл-хәрәкәт хәүефһеҙлеген тәьмин итеү өсөн тап әлеге кеүек ҡеүәтле техникаға бик мохтаж инек беҙ. Хәҙер бындай машиналар менән бер ниндәй ҡыш та ҡурҡыныс булмаҫ, тип өмөтләнәбеҙ.

2020 йылда, пандемия сиренә ҡарамаҫтан, беҙ төп эш күрһәткестәребеҙ буйынса пландарыбыҙҙы уңышлы ғына бойомға ашырыуға өлгәштек. Сирҙе лә еңеп сығырбыҙ, Алла бирһә, тип өмөтләнәм. 2021 йылға эш күләмен ике тапҡырға арттырырға беҙҙең иҫәп. Юлдарыбыҙҙы ҡараулы, яҡшы тәртиптә тотоу - көндәлек бурысыбыҙ икәнлекте яҡшы аңлайбыҙ. Әйткәндәй, район эсендәге 573 км юлды хеҙмәтләндерә беҙҙең идаралыҡ. Коллектив ҙур һәм татыу, үҙ эшен яҡшы белгән һөнәрмәндәрҙән тупланған. Эш хаҡы тоторо҅ло, эшселәребеҙгә хатта премия бирергә лә форсат тыуып ҡуя. Бөтәһе лә үҙебеҙҙең ҡулдарҙа: нисек эшләйбеҙ - шулай йәшәйбеҙ, тигәнсә. Киләсәктә лә һынатмабыҙ. Район халҡы беҙ һалған һәм хеҙмәтләндергән тигеҙ, таҡыр, заманса юлдарҙан хәүефхәтәрһеҙ йөрөй алһын, юлдары уң булһын!

БЫЛ АЙҘА...

# ЯҢЫ ЙЫЛДЫҢ БИСМИЛЛАҺЫ



**Ҡыштың - икенсе, яңы йылдың беренсе айы - һыуығай ҙа, шөкөр, тупһабыҙға килеп баҫты. Ғинуар планетабыҙҙың Төньяҡ ярымшарында, ысынлап та, иң һыуыҡ ай иҫәпләнһә, Көньяҡ ярымшарҙың күпселек өлөшөндә, киреһенсә, - иң йылы ай. Аҡъюлайҙа 7 сәғәт 14 минутҡа тиклем ҡыҫҡарған көн оҙайлығы һыуығайҙа минутлап оҙая барасаҡ һәм ай ахырына көн яҡтыһы 8 сәғәт 30 минутҡа тиклем дауам итәсәк.**

Яңы ай тыуыр алдынан һәр кем иң тәүҙә һауа торошо менән ҡыҙыҡһына. Ә бына киләһе ай - ғинуар - көн торошо менән генә түгел, төрлө яҡлап ҡыҙыҡһындыра беҙҙе, сөнки ул яңы йылдың "бисмиллаһы". Ниндәй булыр ул? Бөтөн ғаләм зарығып көткән ыңғай үҙгәрештәргә ишара булмаҫмы, исмаһам? Сигенерме сир? Кешеләр ҡабаттан үҙҙәрен бәхетле тойормо, ниһайәт? Эйе, үҙегеҙ ҙә шаһиттыр - күптәр шуны төшөндө: элек беҙ ниндәй бәхетле йәшәгәнбеҙ икән, тигәнде йыш ишетергә тура килә хәҙер. Дөрөҫ, проблемаларыбыҙ ҙа, мәшәҡәт-хәсрәттәребеҙ ҙә күп ине, һүҙ ҙә юҡ, ләкин бөгөн шуларына ла риза булып, тормошобоҙҙо хәстәрләп, кисәгенән яҡшыраҡҡа өмөт итеп, нимәлер эшләргә тырышыр инек, уның ҡарауы, күңелебеҙ тыныс булыр ине: ул саҡ бит беҙгә бер ниндәй ҙә үлемесле хәтәр-хәүеф янаманы, кәрәк ергә барҙыҡ, кәрәк кешеләр менән аралаштыҡ, иркебеҙгә сикләү-тыйыуҙарҙы белмәнек. Әҙәм балаһы төшөнә башлаған иң беренсе һабаҡ ошо булғандыр: ғүмереңдең ҡәҙерен бел, ул бит берҙән-бер һәм күҙ менән ҡаш араһында ғына. Донъя ҡәҙерен, тәмен-йәмен белеп ҡал, атҡан һәр таңыңа шөкөр итеп, рәхмәтле бул, тыныс күңел ме-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика етәксеһе указы буйынса Башҡортостандың дәүләт телдәрен, унда йәшәгән халыҡтарҙың телдәрен һаҡлау һәм үҫтерәү өсөн республика Башлығы гранттарының дөйөм суммаһы 2021 йылда 80 миллион һум була. Хөкүмәт финанслау сығанаҡтарын билдәләргә тейеш. Контролдә тотоу Башҡортостан Республикаһы Башлығы хакимиәтенә йөкмәтелгән. Быға тиклем гранттарҙың суммаһы 50 миллион һум тәшкил итте.

✓Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин интервьюларҙың береһендә коронавирус пандемияһы тамамланыуы тураһында һорауға яуап биреп, ғәҙәти эш ритмына беҙ икенсе ярты йыллыҡта инергә тейешбеҙ, тине. Әйткәндәй, 30 декабргә мәғлүмәттәргә ярашлы һуңғы тәүлектә ауырыусылар һаны 169 кешегә артҡан. Республикала дөйөм Covid-19 йоҡторыусылар һаны - 18 897, яҡты донъя менән хушлашыусылар - 138.

✓Башҡортостанда почта бүлексәләре 1, 2 һәм 7 ғинуарҙа ял итә. Пенсия һәм пособиелар Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе менән килешелгән график буйынса түләнә. "3, 4, 5, 6, 8, 9 һәм 10 ғинуар барлыҡ почта бүлексәләре ғәҙәти график буйынса эшләй. Ҡайһы бер ауылдарҙағы почта бүлексәләре өсөн башҡа эш режимы билдәләнергә мөмкин", - тине Федераль почта элемтәһе Башҡортостан идаралығының матбуғат секретары Борис Слуцкий.

✓2021 йыл Башҡортостанда Сәләмәтлек һәм әүҙем ғүмер оҙайлығы йылы тип иғлан ителде. Был хаҡта оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе. "Иң мөһиме, иң ҡәҙерлеһе - кешеләрҙең һаулығы һәм ғүмере, реабилитация һәм башҡа бик күп мәсьәләләр, мин был турала әйткәйнем. Республикала бының өсөн ресурстар етер тип уйлайым", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓2021 йылдың ғинуарынан Сибай медицина округының тиҙ ярҙам бүлексәләре берләштереләсәк, ә Сибай үҙәк ҡала дауаханаһы нигеҙендә берҙәм диспетчер үҙәге барлыҡҡа килә. Берләшеү Баймаҡ, Аҡъяр, Йылайыр дауаханалары тиҙ ярҙам бүлексәләренең 150-нән артыҡ хеҙмәткәренә ҡағыла. Һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәренең республика профсоюзы рәйесе Рауил Халфин берләшеү барышында береһе лә эш урынын юғалтырға тейеш түгел, льгота һәм гарантиялар кимәле лә һаҡланырға тейеш, ти.

***✓ Тыныс йәшәү, тимәк, кисерә, ғәфү итә-үтенә белеү. Әйткәндәй, яңы йылдың тәүге көнө билдәләнәсәк даталарҙың береһе - Бөтөн донъя тыныслыҡ хаҡына ғибәҙәт көнөнөң девизы ла шундай: "Кисерә бел - йәнең тыныс булыр."***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

### Яңы йыл башланып торғанда былтырғы йылдың яҡшы ваҡиғаларын да телгә алып, киләсәккә өмөттәр, уй-ниәттәребеҙ менән уртаҡлашып алайыҡ әле...

***Зәһит ҒҮМӘРОВ, Баймаҡ район хакимиәтенең Йәштәр эштәре буйынса комитет директоры:*** Пандемия хәүефенә ҡарамаҫтан, Баймаҡ район хакимиәтенең йәштәр эштәре буйынса комитеты 2020 йылда уңышлы ғына эш алып барҙы, тип иҫәпләйем. Йәштәр комитеты 16 йүнәлеш буйынса эшләй. Улар һәр белгескә бүлеп бирелгән. Ошо йүнәлештәр араһында йәштәргә эш урындары табыу мәсьәләләре лә бар. Былтыр беҙ ошо йүнәлешкә ҙур иғтибар бүлдек. Шулай уҡ йәштәрҙе үҙебеҙҙең районға эшкә ҡайтарыу буйынса #Һине өйҙә көтәләр (Тебя ждут дома!) проекты булдырып, унын сиктәрендә төрлө саралар үткәрҙек. Белеүебеҙсә, был бик көнүҙәк тема бөгөн. Йыл башында уҡ #Өйҙә исемле муниципаль форумын үткәрҙек. Унда беҙ Башҡортостандан ситтә уҡыусы яҡташтарыбыҙҙы район хакимиәте етәкселеге менән осраштырҙыҡ. Форумдың төп маҡсаты - райондаштарыбыҙҙы тыуған яҡтарына эшкә ҡайтыуға йәлеп итеү.

Республикабыҙҙа, илебеҙҙә барған пандемия беҙҙе дистанцион форматта эшләргә өйрәтте. Икенсе ҙур форумыбыҙҙы онлайн рәүештә үткәрергә мәжбүр булдыҡ. Ләкин онлайн булыуҙың да үҙенең яҡшы яҡтары бар. Беҙгә сит илдә йәшәүсе яҡташтар ҙа ҡушыла алды.

Былтыр йәштәр комитеты ҡарамағында рәсми рәүештә "Изгеләр утрауы" тигән ирекмәндәр үҙәге булдырҙыҡ. Уҡыусылар, йәштәр, хатта оло йәштәгеләр ҙә беҙгә әүҙем ҡушылды. Төрлө акциялар, экологик субботниктар үткәрелде, оло йәштәгеләргә, мохтаж булыусыларға ярҙам ителде. Ирекмәндәрҙең ниндәй ҡиммәтле көс, кәрәкле, ҡәҙерле кешеләр икәнен үткән йыл ныҡлап иҫбатланы. Пандемия башланғас та ирекмәндәребеҙ мохтаждарға эскерһеҙ ярҙам ҡулы һуҙҙы. Шунда уҡ беҙ "Ковид19" ирекмәндәр штабы ойоштороп ебәрҙек, унда төрлө йәштәге, төрлө һөнәр эйәләре иҫәбенән 148 ирекмән эшләй. Беҙҙең маҡсат бер - еңел булмаған осорҙа район халҡына ярҙам итеү, был ҡурҡыныс ауырыуҙы бергәләп еңеү. Ошо йүнәлештәге эштәребеҙ өсөн беҙҙең йәштәр комитетынан Нурзилә Аҙнағолова менән мин Рәсәй Президенты Владимир Путиндан "Беҙ бергә" миҙалын һәм Маҡтау ҡағыҙы алып ҡыуандыҡ. Был беҙҙең генә түгел, ә бөтә штабтың тырыш хеҙмәт һөҙөмтәһе. Һәм тағы. "Изге эштәр муниципалитеты" республика конкурсында ҡатнаштыҡ, шулай уҡ Рәсәй Президенты гранттарынан да ситтә тороп ҡалманыҡ. Дистанцион форматты дауам итеп, "Талантлы Баймаҡ йәштәре" проектын башлап ебәреү ҙә кәрәкле йүнәлеш булып сыҡты, тип иҫәпләйбеҙ. Социаль селтәрҙә күптәргә өлгө булырлыҡ, билдәле йәш талантарыбыҙҙы тура эфирға саҡырып осрашыу үткәрәбеҙ. Бер осрашыуҙа 350-нән ашыу кеше ҡатнаша. Быйылғы йыл өмәләрен яңыраҡ ҡына ҙур сара менән тамамланыҡ. Баймаҡ ҡалаһы үҙәгендәге Таналыҡ йылғаһын таҙартыу буйынса "Таҙа Таналыҡ" акцияһы иғлан иттек. Экологик өмәлә тыуған яғына битараф булмаған ысын патриоттар ҡатнашты. Халыҡтың берҙәм булыуы ҡыуандырҙы.

2020 йыл еңел булманы, ләкин ул беҙҙе күп нәмәгә өйрәтте. 2021 йылды күп һынауҙар үтеп, сынығып ҡаршылайбыҙ. Проекттарҙы дауам итәсәкбеҙ. Бөтәһен дә 2021 йыл менән ҡотлайым. Үткән йылдың ауырлыҡтарынан һабаҡ алып, яңы йылға яңы маҡсаттар менән баҫайыҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

нән Хоҙай күпме биргән - шунса йәшә лә йәшә. Тыныс йәшәр өсөн үҙ-үҙең менән генә түгел, башҡалар менән дә килешеп, татыулыҡта ғүмер һөрөү фарыз. Тыныс йәшәү, тимәк, күп нәмәне кисерә, ғәфү итә-үтенә белеү. Әйткәндәй, яңы йылдың тәүге көнө билдәләнәсәк даталарҙың береһе - Тыныслыҡ, йәғни тулыраҡ итеп әйткәндә, Бөтөн донъя тыныслыҡ хаҡына ғибәҙәт көнөнөң **(1)** девизы ла шундай: "Кисерә бел - йәнең тыныс булыр."

Яңы йылдың тәүге айында һауа торошона килгәндә иһә, синоптиктарҙың хәлен аңлайһығыҙҙыр: был йәһәттән "кәрттәр" тамам буталды, шуға ла улар хәҙер "нормаға яҡын", "уртаса", "самаһы" тигән төшөнсәләргә йышыраҡ мөрәжәғәт итеүҙе хәйерле күрә. Һыуығайҙа, шулай итеп, Рәсәйҙең Европа өлөшөндә һәм Уралда көндәрҙең сағыштырмаса йылы (яҡынса минус 15 градус) килеүе фаразлана, ҡар бурандары, сатлама һыуыҡтар һәм башҡа шундай ғәҙәттән тыш тәбиғәт күренештәре көтөлмәй, тип вәғәҙәләй метеорологтар. Дөрөҫ, ҡайһы бер сығанаҡтарҙа ай баштарында һауа температураһы нулде лә күрһәтеп ҡуя. Башҡа ваҡыттарҙа йылы килгән ҡышҡа ҡыуанырға мөмкин булһа, быйыл ғинуарҙа ул зыянға ғына булырға оҡшай, сөнки, белгестәр әйтеүенсә, йылы һауа шарттары вирус үрсеү һәм таралыу өсөн бик тә уңайлы мөхит тыуҙыра. Өҫтәүенә, был осорҙа грипп, ОРЗ, ОРВИ кеүек сирҙәр әүҙемләшә. Тимәк, ғинуарҙа ла һаҡланыу сараларын һүлпәнәйтергә ярамай.

Яңы йыл - ғаилә байрамы, тибеҙ, шулай булғас, байрам көндәре күберәк ғаиләң, балаларың янында булыу хәйерле. Ошо йылдың тап тәүге көнө Яңы йыл байрамы менән бер ҡатар юҡҡа ғына Ғаилә көнө **(1)** тип тә билдәләнмәгәндер бит. Дөрөҫ, календарҙың ошо уҡ көнөнә аҡҡа ҡара менән... Халыҡ-ара "бахмур" көнө **(1)** тигән рәсми дата ла яҙып ҡуйылған. Ләкин, минеңсә, бының бер "әтнәкәһе" бар: аҡыллыға ишара, тигәнде аңлатыу, иҫкәртеү булалыр ул. Башында аҡылы булғандар былай ҙа бөгөнгө хәүеф өҫтөнә бәйнәт булып, бахмурҙан ауырып, ғаилә тыныслығын боҙоп, байрам йәмен ебәреп, көнө-төнө эшләүсе табиптарға мәшәҡәт, бәлә тыуҙырып, үҙ башына рәнйеш һәм дә гонаһ алырға теләмәҫ, моғайын. Башында аҡылы булғандар ошондай статистикаға күҙ һалһын да ғибрәт алһын: "АиФ" ҡушымтаһы булған "Айыҡ тормош" порталында яҙылыуынса, һәр яңы йыл Рәсәй өсөн 9-12 меңләп ғүмергә торошло һәм үлем осраҡтарының иң күбе - 67 проценты 1 ғинуарға һәм унан һуңғы ике көнгә тура килә икән. Был һандарҙы былтыр "АиФ" баҫмаһына биргән интервьюһында медицина фәндәре докторы, РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығының Психиатрия буйынса Мәскәү ғилми-тикшеренеү институты эксперты Александр Немцов әйтте. "Был мәғлүмәттәр - күп йыллыҡ тикшеренеү һөҙөмтәһе, - тине ул. - Улай ғына ла түгел, был айҙа ир-ат араһында үлем кимәле **24 ғинуарға** тиклем дауам итһә, ҡатын-ҡыҙ үлеме айҙың **14-енә** тиклем бара". Был бәләнән ҡотолоу юлын ғалим нисә күрә һуң? Йылдар буйына килгән былай үлемесле "традиция"ны һындырыуы еңел булмаясаҡ, ти ул. Ләкин сик ҡуйыу мотлаҡ, сөнки ил буйынса халыҡ һаны былай ҙа йылдам рәүештә кәмей бара, йәғни беҙҙә бөгөн, фәнни термин менән әйткәндә, "депопуляция" күренеше бара. Эскелекте кәметеүҙә алкоголь һатыуҙы сикләү, был йәһәттән махсус тәртип режимына күсеү, араҡы һәм башҡа спиртлы эсемлектәргә хаҡ арттырыу кеүек бигүк популяр булмаған саралар ҙа үҙ эшен дауам итергә тейеш, тик шул уҡ ваҡытта кешенең аң кимәленә йоғонто яһау, йәки батып барыусыны ҡотҡарыу унын үҙ ҡулында икәнен төшөндөрөү фарыз, тигән фекерҙә А.Немцов.

Ғаилә көнө тигәндән, ата-әсәләргә шул да мәғлүм булһын: байрам мәжлесе менән мауығып, балалар мәнфәғәтен онотоп китмәйек. Уларҙың Ҡышҡы каникул көндәре **(1-10)** бушҡа үтмәһен: һыуығайҙа тәүге ике ун көнлөктөң календарь биттәре фәҡәт балалар һәм үсмерҙәр өсөн төҙөлгән. Фәнни фантастика көнө **(2)**, Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн фән һәм техника, Музей һәм балалар аҙналыҡтары **(4-10)**, Балалар киноһы көнө **(8)**, Балалар уйлап табыуҙары **(17)**, Халыҡ-ара ҡышҡы спорт төрҙәре **(19)** көндәре балалар менән бергә уларҙың күңелендә матур иҫтәлектәр һәм ата-әсәгә рәхмәт тойғоһо ҡалдырырлыҡ итеп үткәрелергә тейештер, бының өсөн мәктәптәрҙә, балалар үҙәктәрендә бөтөн шарттар тыуҙырыла - уларҙың эш сәғәттәрен белешергә генә кәрәк буласаҡ.

Һыуығайҙың тағы ла башҡа матур, ҡыҙыҡлы көндәре лә күп: Раштыуа көнө **(7)**, Заповедниктар һәм милли парктар, Халыҡ-ара "рәхмәт" көндәре **(11)**, РФ Прокуратура хеҙмәткәрҙәре **(12)**, Рәсәй матбуғаты көнө **(13)**, Иҫке Яңы йыл **(14)**, Википедияның тыуған көнө **(15)**, Бөтөн донъя дин көнө **(17)**, Хеҙмәт ветерандары **(18)**, Инженер ғәскәрҙәре **(21)**, Ҡырым Республикаһы **(20)** көндәре, Халыҡ-ара мәғариф **(24)**, Рәсәй студенттары (Татьяна) көнө **(25)**, Халыҡ-ара таможня **(26)**, Ленинград блокадаһын өҙгән көн **(27)**, Шәхси мәғлүмәттәрҙе һаҡлау **(28)**, Автомобиль уйлап сығарылған көн **(29)**, Халыҡ-ара интернетһыҙ көн **(31)**.

**Һыуығайҙа тыуғандар:**

**3 -** Башҡортостан радиоһы һәм телевидениеһы дикторы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Наилә Ғәләүетдиноваға - 75 йәш** (1946).

**7 -** тарих фәндәре докторы, БДУ профессоры, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Марат Ҡолшәриповҡа - 80 йәш** (1941).

**17 -** шағир, прозаик, Рәсәй һәм Башҡортостан яҙыусылар берлеге ағзаһы **Урал Мостафинға - 70 йәш** (1951).

**25 -** Башҡортостандың халыҡ шағиры, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Тамара Ғәниеваға - 70 йәш** (1951).

**27 -** ҡурайсы, Рәсәйҙең - атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Азат Айытҡоловҡа - 65 йәш** (1956).

**-** инженер-төҙөүсе, хужалыҡ һәм дәүләт эшмәкәре, 2012-2018 йылдарҙа Өфө ҡала хакимиәте башлығы, РФ Федераль Йыйылышының Федерация Советы ағзаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған төҙөүсеһе, Дуҫлыҡ ордены кавалеры **Ирек Ялаловҡа - 60 йәш** (1961).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Яҡташыбыҙ Семен Елистратов сираттағы тапҡыр Рәсәй чемпионы исемен яуланы. Спортсы Коломнала уҙған шорт-трек буйынса Рәсәй ярыштарында шәхси зачетта иң яҡшы һөҙөмтә күрһәтте. Елистратов менән тағы 35 ир-егет ярышты. Рәсәйҙең конькиҙа уҙышыу буйынса йыйылма командаһының баш тренеры Владимир Григорьев һүҙҙәренсә, Семен Елистратов илебеҙ намыҫын яҡлау өсөн Европа чемпионатына бара. Ул 2021 йылдың 22-24 ғинуарында Польшала була.

✓17 йәшлек Нефтекама ҡыҙы Яна Ғәббәсова Беренсе каналдың "Голос-9" проектының финалына сыҡты. Ярымфиналда ҡыҙ Ирина Дубцованың "О нем" йырын башҡарҙы. Һүҙҙәрен һәм көйөн Дубцова үҙе яҙған. Остазы, Рәсәй йырсыһы Полина Гагарина үҙенең 60 процентын Янаға тапшырҙы. Яҡташыбыҙ тамашасыларҙың да 60 процент тауышын йыйҙы. Телетамашасылар һайлағансы, Яна Ғәббәсова һәм Кирилл Суслов Рәсәй йырсыһы, музыкант, композитор Григорий Лепс менән "Вьюга" йырын башҡарҙы.

✓Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Ирина Кононова һүҙҙәренсә, көн һайын көндөҙгө сәғәт 3-тән 5-кә тиклем госпиталдәрҙең белешмә хеҙмәте телефоны буйынса туғанындың һаулығы тураһында мәғлүмәт алырға мөмкин. Коронавирус инфекцияһы һорауҙары буйынса тәүлек әйләнәһенә эшләгән "Башҡортостан Республикаһы Һаулыҡ һаҡлау министрлығының ҡыҙыу бәйләнеш"енә мөрәжәғәт итергә була: 8 (347) 286-58-27, 8 (347) 279-91-20. Шулай уҡ 13-01 телефоны эшләй. Ашығыс медицина ярҙамы саҡыртыу өсөн номерҙар: 103, 113.

✓Банк кассаһынан 25 миллиондан артыҡ аҡса урлаусы Луиза һәм Марат Хәйруллиндарҙың енәйәт эше буйынса суд ҡарары үҙ көсөнә инде. Уға ярашлы Луиза Хәйруллина 5 йылға, ә ире Марат 6 йылға иркенән мәхрүм ителде һәм "Россельхозбанк" акционерҙар йәмғиәтенә килтергән матди зыянды ҡапларға тейеш булдылар. 2020 йылдың 22 декабрендә БР Юғары суды улар биргән апелляцияны ҡарағандан һуң, Салауат ҡалаһы судының ҡарарына тик бер урында - урланған аҡсаны ҡайтарыу буйынса төҙәтмә индерҙе һәм Луиза менән Маратҡа күрһәтелгән сумманы уртаға бүлеп түләргә ҡушты.

***✓ Әгәр водитель йыл эсендә эскән килеш руль артында ике тапҡыр эләкһә йәки ауыр эҙемтәләргә килтергән юл-транспорт ваҡиғаһына сәбәпсе булһа, уның автомобилен тартып алырға тәҡдим ителә.***

*ҠЫҪҠАСА*

# АЙЫҒАЙЫҠ!

**"Айыҡ ауыл - 2020" республика конкурсы буйынса әүҙем эш дауам итә. Быйыл республика Башлығы Радий Хәбиров ҡарары буйынса конкурстың приз фонды 10 тапҡырға артты.** Билдәле булыуынса, конкурсҡа старт былтыр 1 августа бирелгәйне. 30 ноябргә тиклем уның муниципаль этабы үтте, унда бөтә 54 район да ҡатнашты. 1-нән 7 декабргә тиклем еңеүселәрҙән бөтәһе 2114 ғариза ҡабул ителде. Конкурстың ойоштороу комитеты рәйесе, БР Хөкүмәте вице-премьеры, Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова билдәләүенсә, ҡатнашыусы бөтә муниципалитеттарҙа ла айыҡ һәм сәләмәт тормошто популярлаштырыуға йүнәлтелгән төрлө саралар үтте. Мәҫәлән, Мәсетле районы Әзекәй ауылында спорттың әүҙем төрөн ятраҡандарҙың барыһы ла велоуҙышта ҡатнашҡан. Сөләймән ауылында урам байрамдары үткән, һәр урам ижади эстафета тапшырған, йәрминкә ойоштороғандар. Баймаҡ районының Ишәй ауылында ирегеттәр советы спиртлы эсемлек һатҡан нөктәләр буйынса рейд үткәргән.

✓ **2020 йылда Башҡортостанда мал ҡотороуының өс осрағы асыҡланған.** Шишмә районында - эт, Белорет районында бер эт һәм бер бүренең ҡотороу сиренә юлығыу осрағы билдәле. Роспотребнадзорҙың Башҡортостан төбәк идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, 2019 йылда ошондай 15 осраҡ теркәлгәйне. Ҡоторған йәнлектәрҙән зыян күреүгә бәйле медицина учреждениеһына мөрәжәғәт иткәндәр һаны тотороҡло. 2020 йылдың 10 айында 8626 кеше ярҙам һораған, 100 мең кешегә 213,6 осраҡ тура килә. 17 йәшкә тиклем балалар өлөшө элеккесә юғары, дөйөм һандың 31,4 процентын тәшкил итә. Иҫегеҙгә төшөрөп үтәбеҙ, ҡотороу сиренән кеше үлеү осрағы Башҡортостанда 2013 йылда Әлшәй районында һуңғы тапҡыр теркәлде.

✓ **Башҡортостанда былтыр ноябрҙә сауҙа өлкәһе белгестәре, эшселәр һәм төҙөүселәр етмәүе билдәләнгән. Портал hh.ru шундай мәғлүмәт бирә.** Сауҙа өлкәһе белгестәрен эҙләү - беренсе урында: ул эш тураһында тәҡдимдәрҙең 28 процентын тәшкил итә. Эшсе персоналға һорау икенсе урында, йәғни бөтә вакансияларҙың 21 проценты. Төҙөүселәр - 16 процент. Бынан тыш, эш биреүселәр "Етештереү", "Транспорт", "Карьера башы, студенттар", "Медицина, фармацевтика", "ИТ, телеком", "Административ персонал", "Банктар, инвестициялар" өлкәһендә белгестәргә ҡытлыҡ булыуын күрһәтте. Башҡортостанда резюмелар һаны буйынса "Карьера башы, студенттар" өлкәһе беренсе урында, ул республикала эш эҙләүселәрҙең 16 процентын тәшкил итә. Икенсе урында "Һатыу" - 11 процент, өсөнсөлә - "Етештереү" - 9 процент. Эш эҙләүселәр шулай уҡ үҙенең резюмеһын "Сеймал сығарыу", "Административ персонал", "Эшсе персонал", "Төҙөлөш, күсемһеҙ милек", "Бухгалтерия", "ИТ, телеком" өлкәләренә әүҙем урынлаштырған.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# СИЛӘБЕ БАШҠОРТТАРЫНА...

**Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы Силәбе өлкәһенең дүрт мәктәбенә башҡорт кластарын йыһазландырыу өсөн комплекттар бүләк итте. Уға күренекле яҙыусыларҙың портреттары, гәзит-журналдар, башҡорт алфавиты һәм башҡа күргәҙмә материалдар инә.**

Бүләктәр тантаналы шарттарҙа Арғаяш районы Күҙәш уҡыусыларына тапшырылды. Унда Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге вәкиле Руслан Абдуллин, Силәбе өлкәһенең Башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге хеҙмәткәре Нурия Иҡсанова, Сируси мәктәбе директоры, Силәбе өлкәһенең Башҡорт теле уҡытыусылары ассоциацияһы ағзаһы Әлфиә Ҡотлоғужина ҡатнашты. "Туған телде өйрәнеү, мәктәп программаһының мотлаҡ фәндәрен өйрәнеү кеүек үк, төплө ҡараш талап итә. Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы бүләк иткән материалдар башҡорт теле дәрестәрендә уҡытыусылар һәм балалар өсөн яҡшы ярҙам булырға тейеш. Беҙ иһә Силәбе өлкәһендә башҡорт телен, мәҙәниәтен һаҡлауға һәм популярлаштырыуға ярҙам күрһәтеүҙе дауам итербеҙ", - тип билдәләне Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге вәкиле Руслан Абдуллин. Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығынан күргәҙмә материалдар Силәбе ҡалаһының 6-сы, 8-се, 24-се мәктәптәренә лә тапшырылды. Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге даими вәкиллеге Көньяҡ Уралда башҡорт кластарына ярҙам күрһәткәне өсөн ведомствоға рәхмәт белдерҙе.

# БЕР ҠУЛ ЯҠШЫРТА...

**Башҡортостанда 2020 йылда подъездарҙы комплекслы ремонтлау буйынса төбәк программаһына ярашлы, 697 күп фатирлы йортта 2180 подъезд ремонтланған, һөҙөмтәлә 215 мең кеше йәшәү шарттарын яҡшыртҡан. Һуңғы ике йыл эсендә район-ҡалаларҙа барлығы 6 меңдән ашыу подъезд ремонтланған.**

Мәғлүм булыуынса, "Подъездарҙы комплекслы ремонтлау" республика программаһында ҡатнашыу - ул милекселәрҙең ҡаҙанышы. Шуға ла вандализм осраҡтары күҙәтелеүе, дөйөм йорт мөлкәтен маҡсатлы рәүештә боҙоу осраҡтары милекселәрҙе ныҡ борсой. Хатта эште башҡарыусылар объекттан күсенеп тә өлгөрмәй, ә подъездарҙағы стеналарҙа яҙыуҙар һ.б. барлыҡҡа килә. "Быйыл беҙ башҡарған эштәрҙең сифат талаптарын күтәрҙек. Шулай уҡ махсус рәүештә вандаллыҡ ҡылыу күренештәренән тыш, 5 йылға гарантия бирәбеҙ. Әгәр вандаллыҡ ҡылына икән, ремонт идара итеү ойошмалары иҫәбенә башҡарыла", - ти "БР Төбәк операторы" фондының мәғлүмәт бүлеге начальнигы Олег Койда. Шул уҡ ваҡытта дөйөм йорт мөлкәтенә зыян килтергән өсөн административ, граждандлыҡ-хоҡуҡи, хатта енәйәт яуаплылығы ҡаралған. Мәҫәлән, зыян күләме 2500 һумдан кәмерәк икән, зыян килтереүсе 2500 һумға тиклем штраф түләргә тейеш йәки 15 тәүлеккә тиклем ҡулға алынырға мөмкин. Әгәр зыян килтереүсенең ғәмәле енәйәт тип баһалана, йәғни ҙур күләмдә зыян килтерелә икән, был осраҡта уны хатта биш йылға төрмәгә ултыртып ҡуйыуҙары ла ихтимал.

# МАШИНАҺЫ ТАРТЫП АЛЫНА

**Башҡортостан парламентарийҙары Дәүләт Думаһына "Рәсәй Федерацияһы Енәйәт кодексының 104.1 статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проектын ҡарауға индерәсәк. Унда иҫерек водителдәрҙең транспорт сараларын конфискациялау тураһында һүҙ бара.**

Был ҡарар республика парламентының былтыр 17 декабрҙәге ултырышында ҡабул ителде. "Закон проекты эскән килеш транспорт сараһы йөрөткән өсөн яуаплылыҡты ҡәтғиләштерәсәк, - тип аңлатма бирә БР Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Әгәр водитель йыл эсендә эскән килеш руль артында ике тапҡыр эләкһә йәки ауыр эҙемтәләргә килтергән юл-транспорт ваҡиғаһына сәбәпсе булһа, уның автомобилен тартып алырға тәҡдим ителә. Ләкин законлы милексенән уның ихтыярынан тыш ситләтелгән, мәҫәлән, урланған, ҡыуып алып кителгән автомобилдәргә был ҡағылмай". Парламентарийҙар фекеренсә, был сара иҫерек водителдәр арҡаһында юлдарҙа кешеләрҙең күпләп һәләк булыуын кәметәсәк һәм яҡшы иҫкәртеү сараһы буласаҡ. Статистиканан күренеүенсә, Рәсәйҙәге һәр һигеҙенсе-унынсы юл-транспорт ваҡиғаһы иҫерек водителдәр тарафынан яһала. 2018 йылда, мәҫәлән, иҫерек водителдәр ғәйебе менән 4,5 меңдән ашыу кеше һәләк булды. Былтыр иһә бындай аварийлар бер аҙға кәмерәк булһа ла ул пандемия арҡаһында индерелгән тиҙлекте кәметеү тәртибе менән бәйле. "Автомобиленән ҡолаҡ ҡағыу ихтималлығы күп водителдәрҙе туҡтатасаҡ һәм уларға иҫерек килеш руль артына ултырырға бирмәйәсәк. Белоруссияла, мәҫәлән, автомобилдәрҙе тартып алыу ихтималлығы тураһындағы ошондай закон проекты хаҡында фекер алышыуҙар осоронда ғына ла иҫерек водителдәр ғәйебе менән юл-транспорт ваҡиғалары - 42, ә һәләк булыусылар һаны 60 процентҡа кәмегән. Иҫерек водителдәр менән көрәш сараһы булараҡ, уларҙың машиналарын тартып алыу Францияла, Швейцарияла, Литвала ҡулланыла",- тип миҫалдар килтерҙе БР Дәүләт Йыйылышы рәйесе.

# ЫРЫУ ГЕРБТАРЫ БУЛДЫРЫЛА



**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының махсус комиссияһы башҡорт ырыуҙарының геральдик символдарын булдырыу йәһәтендәге эшен дауам итә. Был эшкә Рәсәйҙең геральдистар союзы ағзаһы Кирилл Переходенко ҡушылды.**

"Башҡорт ырыуҙары гербтары - Рәсәйҙә тиңе булмаған проект. Рәсәйҙә әле ҡануниәт даирәһендә булған геральдика: дәүләт, идаралыҡтар һәм муниципалитеттар гербтары һәм традицион юҫыҡта йәшәгән геральдика: ғаилә гербтары һәм шәхси символика бар. Ырыу һәм ҡәбилә гербтарына килгәндә, был беренсе проект. Рәсәйҙә уға тиңдәр юҡ, беҙ эште үҙебеҙ башлап ебәрәбеҙ. Шуға күрә беҙгә хилафһыҙ эшләргә кәрәк, беҙгә ҡарап, башҡалар эшләйәсәк", - тип белдерҙе Кирилл Переходенко.

Был юлы комиссия ултырышында юрматы ырыуының билдәле вәкилдәренә ырыуҙың гербы проекты күрһәтелде, комиссияның эше хаҡында хәбәр ителде. Һәр башҡорт ырыуының гербы өс төп билдәгә таянып эшләнә: тамға, ағас һәм ҡош. Ҡайһы бер ырыуҙарҙың гербтарында, көнбайыштағы девиздарға оҡшатып, махсус таҫмаға ырыуҙың ораны ла төшөрөләсәк. Ғөмүмән, башҡорт ырыуҙарының гербтары - ул көнбайыш һәм рус геральдикаһының ҡаҡшамаҫ ҡанундары һәм боронғо башҡорт аҫаба символдарының ҡатышмаһы буласаҡ. "Был гербтар айырым әҫәр итеп тә, мәҫәлән, башҡорт ырыуҙары конгрестарында, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында, башҡа йыйындарҙа бер тулайым шәлкем итеп тә ҡулланыласаҡ. Беҙ төҫтәрҙе һайлауға иғтибар менән ҡарайбыҙ. Мәҫәлән, юрматы ырыуының гербы ҡыҙыл төҫтә эшләнгән. Был ырыуҙың башҡалары араһында мөһимлеген, лидерлығын күрһәтер өсөн шулай эшләнде. Бөгөн беҙ юрматы ырыуының ошо гербы проектын раҫланыҡ. Осрашыуҙа ишетелгән талаптарға таянып, бер-ике художестволы төҙәтмә индерәсәкбеҙ. Йәмәғәтселек ҡалған ҡырҡтан ашыу гербты ижад итеп раҫлауҙа әүҙем ҡатнашыр, тип ышанабыҙ. Халыҡтың тарихы менән ҡыҙыҡһыныуы-милләт сәләмәтлегененең күрһәткесе", - тип белдерҙе Кирилл Переходенко.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфөлә Башҡортостандың милли геройы, 112-се Башҡорт (16-сы Гвардия) кавалерия дивизияһы командиры, Рәсәй Геройы генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов һәйкәленең макеттары йәмәғәтселеккә күрһәтелде. Экспозицияны 500-ҙән ашыу кеше: йәмәғәтселек вәкилдәре, ижади берекмә ағзалары һәм республикала йәшәүселәр килеп ҡараны. Тамашасылар һорауҙар яҙылған ҡағыҙҙы тултырҙы һәм 19 эштең һәр береһен ун баллыҡ шкала буйынса баһаланы. Конкурс комиссияһы ағзалары хәбәр итеүенсә, йәмәғәт фекер алышыуы йомғаҡтары буйынса проекттарҙың береһе 2 000-гә яҡын балл йыйған. Еңеүсене һайлағанда хәл иткес һүҙҙе конкурс комиссияһы әйтергә тейеш.

✓ Былтыр Өфөлә Ҡыш бабайҙар параде автоуҙыш формаһында уҙғарылды. 26 декабрҙә баш ҡаланың ете районы "Ҡыш бабайҙар алышы" онлайн-конкурсында еңгән Яңы йылдың төп геройҙары Салауат Юлаев майҙанында урынлашҡан шыршынан автоуҙыш башланы һәм Зәки Вәлиди, Карл Маркс, Пушкин, Ленин, Революция, Октябрҙең 50 йыллығы урамдары, Октябрь проспекты буйлап йөрөнө.

✓ "Тамыр" телеканалы "Нурбостан" беренсе башҡорт телевизион мультипликация сериалын тәҡдим итте. Төп персонаждар - 7 тылсымлы йән эйәһе. Анимация фильмының сценарийын Гөлнара Хәлфетдинова менән Гөлназ Ҡолһарина яҙған. Композиторы - Айҙар Хәмзин, рәссамы Дамир Мөхәмәтйәров. Йәнһүрәттең һәр бер серияһы Башҡортостандың билдәле брендына йәки тарихи ваҡиғаға арналған. Мультсериал яңы йыл каникулдарында тулыһынса күрһәтелә, ул башҡорт телендә рус һәм инглиз субтитрҙары менән барасаҡ.

✓ Башҡортостанда Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, 112-се Башҡорт (16-сы гвардия) кавалерия дивизияһы яугиры, генерал Миңлеғәли Шайморатов орденының беренсе кавалеры Мөғин Нагаевтың хәтере мәңгеләштерелә. Республика Башлығы указына ярашлы, Өфөнөң 160-сы лицейына Мөғин Нагаев исеме бирелә. Баш ҡаланың Гвардия скверы ла хәҙер уның исемен йөрөтә. Өфөлә ветеран йәшәгән йортҡа мемориаль таҡтаташ ҡуйыла. Йәрмәкәй районы Һыуыҡкүл урта мәктәбендә иҫтәлекле таҡтаташ барлыҡҡа килә. Ошо ауылдың дан аллеяһына ла геройҙың исеме бирелә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# АТТАРҘА ЕЛЕП КЕНӘ...

## йыл да үтеп китте

**Яңы йыл бала саҡта күңелле байрам булып хәтерҙә ҡалһа, йылдар үтә бара ул иңгә ҙурыраҡ яуаплылыҡ һала, байрамдан да бигерәк уҙған йылға йомғаҡ яһау, башҡарылған эштәрҙе барлау, етешһеҙлектәрҙән һығымта яһау һәм киләсәккә яңы бурыстар билдәләү, яңы маҡсаттар ҡуйыу осоро булараҡ күҙаллана. Өфө ҡала хакимиәтендә үткән быйылғы йылдың һуңғы оператив кәңәшмәһендә лә яҡынса йомғаҡтар яһалды.**

2020 йылда баш ҡалала милли проекттарҙы тормошҡа ашырыуға барлыҡ кимәлдәге бюджеттарҙан 3,9 миллиард һум аҡса йүнәлтелгән. "Мәғариф" милли проекты уҡыу өсөн өҫтәмә урындар булдырып ҡына ҡалмаған (ҡаланың 25 мәктәбендә капиталь ремонт үткәрелеүе һөҙөмтәһендә 1,5 меңдән ашыу өҫтәмә урын булдырылған), мәктәптәрҙең матди-техник базаһын яңыртырға, кластарҙы предметтар буйынса заманса ҡоралмалдар менән йыһазландырырға ярҙам иткән. "Демография" милли проекты буйынса 34 балалар баҡсаһын капиталь ремонтлау һөҙөмтәһендә өҫтәмә рәүештә 779 урын барлыҡҡа килгән, 695 урынлыҡ 4 балалар баҡсаһы төҙөлөшө тамамлана. "Мәҙәниәт" милли проекты сиктәрендә Әҙеһәм Исҡужин исемендәге 9-сы балалар музыка мәктәбе, шулай уҡ Өфөнөң тағы ла өс сәнғәт белем усағы музыка ҡоралмалдары һәм ҡоралдарына эйә була.

"Спорт - йәшәү рәүеше" төбәк проекты буйынса ҡалала йылдан-йыл физкультура һәм спорт менән шөғөлләнеүселәр һаны арта. Бөгөн ул барлыҡ ҡала халҡының 45 процентын тәшкил итә. Яңы спорт объекттары төҙөлә, быйыр йыл дауамында 500-ҙән ашыу спорт сараһы үткәрелгән. Ҡалала йәмәғәт киңлеген төҙөкләндереү эше әүҙем алып барыла. "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" проекты буйынса Ленин районында "Тулҡын" скверын төҙөкләндереү дауам иткән, амфитеатр төҙөлгән. Ғинуар-ноябрҙә 640,5 мең квадрат метр торлаҡ сафҡа индерелгән, был 2019 йыл менән сағыштырғанда 25,6 процентҡа күберәк.

Шулай уҡ финанстарҙың иң ҙур өлөшө "Хәүефһеҙ һәм сифатлы автомобиль юлдары" милли проекты тормошҡа ашырыуға бүленгән. Һөҙөмтәлә Ағиҙел йылғаһы аша яңы күпер һалына, 8 Март һәм Комсомол урамдары реконструкциялана. Калинин районында Валерий Лесунов һәм Георгий Мушников урамдары төҙөлөшө тамамлана.

Шулай уҡ Башҡортостан Республикаһының туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе Салауат Нафиҡов ғинуарҙа үтәсәк "TERRA ZIMA" фестивале программаһы менән таныштырҙы. Сара 1 ғинуарҙа Ҡунаҡһарай сауҙа-эшлекле комплексы майҙанынан "Вәғәҙәләр йүгереүе"нән башланды. Унда йүгерергә лә, скандинав атлауы менән үтергә лә була ине. Шулай уҡ "Торатау" Конгресс-холының түбәнге майҙанында яңы йыл карнавал костюмдары конкурсы үтте. 2 ғинуарҙа шул уҡ майҙанда "Ҡышҡы һабантуй" уҙғарылды. Унда башҡа ярыштар менән бер рәттән беренсе тапҡыр самауырҙар конкурсы үтте. Самауыр хужалары уны ҡайнатып, ҡунаҡтарҙы һыйлап, ҡунаҡсыллыҡ күрһәтте. 3 ғинуар Ҡарһылыуҙар парады менән хәтерҙә ҡаласаҡ, уларҙы Рәсәй артисы, эстрада йырсыһы Анна Семенович әйҙәп барҙы.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ПЕНСИЯҒА АЛДАН СЫҒА...

**Башҡортостанда былтыр 286 ҡатын ваҡытынан алда хаҡлы ялға сыҡты. Рәсәй Пенсия фондынан хәбәр итеүҙәренсә, уларҙың бөтәһенә лә закон нигеҙендә пенсия тәғәйенләнде.**

Эш шунда: биш һәм унан күберәк бала табып, уларҙы һигеҙ йәшкә тиклем тәрбиәләгән ҡатындарға йәш буйынса страховка пенсияһы 50 йәштән тәғәйенләнә. 2019 йылдан алып өс һәм дүрт балалы ҡатындар ҙа ваҡытынан алда пенсияға сығырға хоҡуҡлы. Өс балалы ҡатын яңы пенсия йәшенән - өс йыл алдараҡ, дүрт балалылар дүрт йыл алдан сыға ала. Шуныһы мөһим: ваҡытынан алда пенсияға сығыу өсөн әсәләрҙең страховкалы эш стажы 15 йылдан да кәм булырға тейеш түгел. Бала саҡтан инвалид балаһын 8 йәшкә тиклем тәрбиәләгән әсә 50 йәштән пенсияға сыға ала. Был осраҡта ла 15 йыл эш стажы кәрәк. Стаж һәм пенсия коэффициентын әсәләр балаларын ҡараған осорҙа ла туплай ала, һәр баланы 1,5 йәшкә еткәнгә тиклем ҡараған ваҡыт иҫәпкә алына, тик ул 6 йылдан да артыҡ булырға тейеш түгел. Тәүге баланы йәш ярымға тиклем ҡараған осорҙа 1,8 пенсия коэффициенты иҫәпләнһә, икенсе баланы ҡарағанда - 3,6, өсөнсө һәм дүртенсе балалар өсөн - 5,4 коэффициент. Пенсия фондынан иҫкә төшөрөүҙәренсә, үҙ ҡарамағында балиғ булмаған йәки уҡыу йортонең көндөҙгө бүлегендә уҡыусы 23 йәштән дә өлкән булмаған бала тәрбиәләгән пенсионерҙар страховка пенсияларына өҫтәмә түләүгә хоҡуҡлы.

# СИТТӘН ТОРОП...

**Дәүләт Думаһы икенсе уҡыуҙа хеҙмәткәрҙәрҙе өйҙән эшләүгә күсереүҙе ябайлаштырыусы закон проектын хупланы. COVID-19 пандемияһы арҡаһында килеп тыуған был документты парламент рәйесе В. Володин, Федерация Советы спикеры В.Матвиенко һәм башҡа депутат һәм сенатор төркөмө ҡарауға тәҡдим иткәйне.**

"Рәсәйҙең хеҙмәт закондары хеҙмәтсәндәрҙе күпләп өйҙә эшләргә күсереүгә әҙер булмай сыҡты", - тип билдәләнә документҡа аңлатмала. Башҡортостандан РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зөһрә Рәхмәтуллина әйтеүенсә, хеҙмәткәр үҙ эшен өйҙә даими нигеҙҙә йәки ваҡытлыса (6 айҙан да оҙаҡҡа түгел), шулай уҡ өйҙән һәм төп эш урындарын алмаштырып башҡара ала. Документта тағы ла шулар билдәләнә:

- Хеҙмәткәр өйҙә ваҡытлыса эшкә уның ризалығынан тыш та күсерелә ала. Бында һүҙ һәләкәт һәм авариялар, бәхетһеҙлек осраҡтары, һыу баҫыу, ер тетрәү, эпидемия кеүек һәм кеше ғүмере, бөтөн халыҡтың йәки уның бер өлөшөнөң тормош шарттары ҡурҡыныс аҫтына ҡуйылған осраҡтар күҙҙә тотола.
- Өйҙән эшләүгә күскән осраҡта эш биреүсе тарафынан хеҙмәткәр кәрәкле ҡорамал менән тәьмин ителә, ә инде үҙенең техник сараларын эш өсөн файҙаланғанда хеҙмәткәргә уның сығымдары тейешле күләмдә ҡайтарып бирелә.
- Хеҙмәткәрҙе эштән сығарыу өсөн нигеҙләмә билдәләнә. Өйҙән эшләүсе прогул өсөн эштән сығарыла алмай, ләкин хеҙмәкәр ике эш көнө буйына ғәфү итерлек сәбәптәре булмайынса эш биреүсе менән элемтәгә сыкмаһа, уның менән хеҙмәт килешеүе юҡҡа сығарыла ала.

ҠЫҪҠАСА

# МИЛЛИ АШ-ҺЫУ...

**10 ғинуарҙа Башҡортостанда "Милли аш-һыу көнө" флешмобы үтә.** "Киң ҡоласлы сара туҡланыу индустрияһы өлкәһе белгестәренең һөнәри абруйын күтәреү, уларҙың ҡаҙаныштарын һәм алдынғы тәжрибәһен пропагандалау маҡсатында ойошторола. Уға теләгән кеше ҡушыла ала. Бының өсөн социаль селтәрҙәрҙә Яңы йыл табынында урын алған үҙегеҙ яратҡан ризыҡ рецебын #БлюдоНовогоднегоСтола хештегы менән урынлаштырырға кәрәк", - ти БР сауҙа һәм хеҙмәтләндереү министры Алексей Гусев. Яңы йыл флешмобында Өфөнөң билдәле ресторандарының шеф-ашнаҡсылары ҡатнашасаҡ. Көн дауамында ҡатнашыусылар социаль селтәрҙәрҙәге үҙ сәхифәләрендә яратҡан ризыҡтарының рецебы менән бүлешәсәк. Флешмобты Минторгтың "Бәйләнештә", "Синыфташтар", Instagram һәм Facebookтағы аккаунттарында күҙәтергә мөмкин.

✓**Йыл башынан республикала спиртлы эсемлек менән 27 бала ағыуланған.** Роспотребнадзорҙың төбәк идаралығы токсикология мониторингы буйынса Стәрлетамаҡта 11, 12, 13 (2 бала), 14 (2 бала) йәштәге алты кеше спиртлы эсемлек менән ағыуланған. Бөрөлә - 4 , Салауат районында - 3, Дүртөйлөлә 13 йәшлек бала зыян күргән. 14 йәшлек үсмерҙәрҙең берәр осрағы Ишембайҙа, Салауатта, Әбйәлил, Өфө районында теркәлгән. Өфөлә иң күп осраҡ теркәлгән. 11 айҙа 14 бала ағыуланған. Улар араһында 9 айлыҡ, 1 йәшлек сабыйҙар, шулай уҡ 8, 12, 13 (4 бала), 14 йәшлектәр (6 бала) бар. Ведомствола билдәләнеүенсә, күбеһенсә этил спирты менән ағыуланыуҙар (86,0 процент) асыҡланған

✓**Рәсәй уҡытыусыларын ҡайһы бер отчеттарҙан азат итәсәктәр.** Был хаҡта документ әҙерләнә, уның исемлеге төбәктәргә ебәрелгән дә инде. Унда дүрт мөһим документ тултырыу ҡалаған: дөйөм белем биреүҙең һәр кимәле өсөн төп мәғариф программаһы, өлгәш журналы, педагогтар етәкселегендә дәрестән тыш ойошторолған төркөм журналы һәм уҡыусыларҙың шәхси эше материалдары. Документта исемлеккә инмәгән отчет биреү уҡытыусы йәки класс етәксеһенең бурысы түгеллеге хаҡында асыҡ әйтелә. Бындай эштәр хеҙмәт килешеүендә түләү күләмен, үтәү ваҡытын күрһәтеп, хеҙмәткәрҙең яҙма ризалығы менән генә башҡарыла. Артыҡ отчеттарҙан азат итеү уҡытыусыларға һөнәри үҫеш, ижад өсөн мөмкинлек бирәсәк.

✓**Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы менән берлектә киң мәғлүмәт сараларында, социаль селтәрҙәрҙә башҡорт халҡының телен, мәҙәниәтен, тарихын һәм хәҙергеһен популярлаштырыуға йүнәлтелгән проекттарға грант ярҙамы күрһәтеү өсөн конкурс иглан итте.** Конкурста 18 йәше тулған һәм Рәсәй Федерацияһы гражданы булған киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре, онлайн-проект авторҙары һәм блогерҙар ҡатнаша ала. Биш еңеүсегә грант тапшырыла. Гранттың күләме - ай һайын 11 500 һум, НДФЛ менән бергә. Ғаризалар 2020 йылдың 15 декабренән 2021 йылдың 21 майына тиклем ҡабул ителә.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Бил биртенеүҙән

❖ 1-әр ҡалаҡ мәтрүшкә үләне, шифалы ромашка сәскәһе, һары мәтрүшкә үләне, ҡара мәрүәр (черная бузина) сәскәләрен бергә ҡушырға. Ваҡланған ҡатышманың 4 ҡалағын (20 грамм) эмалле һауытҡа һалып, 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға. Ҡапҡасын ябып, 15 минут парҙа йылытырға, һирәк кенә болғатып торорға. Бүлмә температураһында 45 минут һыуытып, үләндәрҙе һөҙөп алырға һәм 200 мл булғансы эҫе һыу өҫтәп ҡойорға. Тығыҙ тығынлы быяла шешәгә ҡойоп алырға. Ике тәүлектән артыҡ һаҡламаҫҡа. Төнгөләккә ошо төнәтмәнән компрестар яһарға.

## Йоҡоһоҙлоҡ

❖ Термоса 2 ҡалаҡ боланутты 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнгөләккә ҡалдырырға, иртәнсәк һөҙергә. Көн дауамында тигеҙ өлөшкә бүлеп эсеп бөтөргә.

❖ 2 ҡалаҡ киптерелгән балан емешен термосҡа һалып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, төн сыҡҡас һөҙөп алырға. Көн дауамында 3-4 тапҡыр ашағандан һуң йылы көйөнсә сирек стаканлап эсергә.

❖ Мүк еләген ит турағыс йә блендер ярҙамында ваҡлап, 2 өлөш емешкә 1 өлөш нисбәтендә бал ҡушып, болғарға. Ҡатышманы көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ашарға, аҙағынан сәй йә һыу эсергә.

## Йөрәк сирҙәре

❖ Бер ҡалаҡ киптерелгән энәлек емешенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт йылыла тоторға һәм һөҙергә. Көнөнә өс тапҡыр ашарҙан алда яртышар стакан эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ күк сәскәгә (василек синий) 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтеп, һөҙергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда 1/3 стакан эсергә. Йөрәк тибеше өйәнәгә тотҡанда файҙалы.

❖ Бөтнөктөң ваҡланған япраҡтарына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтеп, һөҙергә. Төнәтмәне көн дауамында аҙ-аҙ уртлап эсергә.

❖ Йөрәк ритмы боҙолғанда календула япрағынан төнәтмә файҙалы. 2 балғалаҡ ваҡланған япраҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтеп, һөҙергә. Көнөнә 3 тапҡыр 1/3 стаканлап эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ Фән докторы, профессор булыуына ҡарамаҫтан, Мөнирә киленебеҙ әсәйемде хәстәрләүгә бар көсөн һалды, үҙ әсәһе һымаҡ яҡын күрҙе. Киленебеҙҙән бер ваҡытта ла зарланыу һүҙен ишетмәнек.



ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!



# БАШҠОРТ ҠОРАМАҺЫ

XIX быуат аҙағы һәм XX быуат башында ҡораманан түшәк һәм башҡа көнкүреш әйберҙәрен башлыса Ырымбур губернаһының малсылыҡ менән шөғөлләнгән башҡорттары эшләгән. Элекке Өфө губернаһы территорияһында үҫешкән биҙәкле туҡыусылыҡ һәм шаҡмаҡлы туҡыма етештереү ҡорама әйберҙәрҙең көнкүрештә һәм йолаларҙа ҡулланыу даирәһен тарайтҡан. Ҡорама бында тик урындыҡ һәм ултырғыс юрғандарын эшләгәндә генә ҡулланылған.

Киндерҙә биҙәкле туҡыусылыҡ булмағанлыҡтан һәм ҡайыу күп тырышлыҡ талап иткәнлектән, көнкүреш әйберҙәрен биҙәүҙә был иң анһат һәм нәтижәле ысул булғанға көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында мозаика декоры баштан уҡ ныҒыраҡ үҫешкән булғандыр, тип фаразларға була. Аңлашылыуынса, ҡорама әйберҙәр һәм мозаика биҙәктәре менән айырым төшөнсәләр бәйле булған, улар йолалар системаһына тәбиғи рәүештә ингән. Ҡайһы бер йола ғәҙәттәре тураһында очерктың тәүге юлдарында әйтелде. Бында иғтибарҙы башҡорттарҙа, шулай уҡ Көнбайыш Себер, Ҡаҙан татарҙарында һәм башҡа туғандаш халыҡтарҙа киң таралған, туй тантанаһы, бала табыу һәм ерләү йолаларының билдәле бер мәлдәрендә ҡатнашыусыларға бүләккә киҫәктәргә йыртылған туҡыма - йыртыш, бүләк - биреү ғәҙәтенә йүнәлтеү урынлы булыр, йыртышты һуңынан кейем, өйҙәге әйберҙәрҙе биҙәүҙә ҡулланғандар. Бынан да элегерәк заманда таҫмалар менән һәм ҡайып нағышланған киндер - һарауыс бүләк иткәндәр. Шундай уҡ тамғалар рәтенә буй-буй итеп тегелгән, туй, бала табыу, ерләү һәм үлгән кешене иҫкә алыу мәжлестәрендә таратылған түшелдеректәр ҙә ингән. Ҡайһы бер төбәктәрҙә был йолаларға бәйле ышаныуҙар онотолһа ла, үҙҙәре һаҡланып ҡалған. Төрлө мәғлүмәттәрҙе анализлап, был күренештең тамырҙары тәрәнлеген аңларға һәм йыртыш таратыу, ҡорама ҡорау ғәҙәттәре билдәле бер дини ҡараштарға бәйле булыуын күрергә була. Быға Л.А. Чвырь һәм Урта Азия халыҡтарын өйрәнеүсе башҡалар ҙа иғтибар итә.

Археология табылдығы булған орнаментлы келәмдәр һәм этнография материалдары аппликация менән туҡыма мозаикаһы ярайһы уҡ боронғо ижад төрҙәре булыуы хаҡында һөйләй. Ул туҡыма материалдар етешкән осорҙа барлыҡҡа килеүе ихтимал. Сөнки ҡорама әйберҙәр Урта быуаттар башында уҡ туҡыусылыҡ яҡшы үҫешкән төбәктә - Урта Азияла юҡҡа ғына киң таралмаған. Был территорияла ҡорамаларҙың көнкүрештә һәм йолаларҙа тотҡан урыны көньяҡҡа табан арта барған һәм ябай, ҡатмарлы биҙәктәрҙе эшләүҙә мозаика алымын камил белгән тажиктар, ягнобиҙәр, бәлүждәр, фарсыларҙа һәм башҡа Иран телле халыҡтарҙа айырыуса юғары әһәмиәткә эйә булған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ҒАИЛӘ МӘКТӘБЕ

# НИ СӘСҺӘҢ - ШУНЫ УРЫРҺЫҢ

## йәки "Кеше балалары"на нисек ярарға?



**Башҡа ерҙәрҙә нисектер, белмәйем, әммә беҙҙең яҡтарҙа үҙенең балаһынан башҡаны "кеше балаһы" тип кенә әйтәләр. Бөгзе ваҡыт, ярым шаяртып, кейәү, килендәрҙе лә шулай тип атап ебәрәләр. Бөгөнгө һүҙем тап шул "кеше балалары" хаҡында.**

Кейәү менән ҡайны араһындағы мөнәсәбәттәр тураһында һүҙ алып барғандарын әллә ни ишеткәнем юҡ. Ғәҙәттә, был ике ир-ат үҙ-ара уртаҡ тел табыусан һәм күпселек осраҡта бер-береһенә "һыйып", яраҡлашып йәшәүсән. Ә бына ҡәйнә-кейәү, айырыуса, ҡәйнә-килен араһында ҡытыршылыҡтар, аңлашылмаусанлыҡтар йыш ҡына сығып торғанын барыбыҙ ҙа яҡшы беләбеҙ. Ул хаҡта һәр төрлө мәҙәктәр ҙә күп. Бер әбей, көтмәгәндә, ҡалала йәшәгән ҡыҙы менән кейәүенә килеп төшкән, имеш. Кейәүенең "Оҙаҡҡа килдеңме, ҡәйнәм?" тигән һорауына ҡәйнә кеше: "Һеҙҙе ялҡытҡанса булам әле", - тип яуаплаған. "Нишләп улай тиҙ, ҡәйнәм? Сәй эсеп тә тормайһыңмы ни?.." - ти икән "хәстәрлекле" кейәү ишек төбөндә өҫ кейемен һалып торған әбейгә...

"Яҡшы ҡәйнә" тигәндәй, бынан бер нисә йыл элек гәзиттәребеҙҙең береһендә "Ҡәйнәләр өлгөһө" тип аталған бер мәҡәләм донъя күргәйне. Үҙемдең ҡәйнәм - Рәҡиә Арыҫланова хаҡында ине ул. Ул инде тукһандың берен ҡыуып барған тыл ветераны, әле булһа Баймаҡ районы Байым ауылында йәшәп ята. Йәш саҡтан уҡ барлыҡ кейәүҙәрен һәм килендәрен, әлеге әйтмешләй, "кеше балаларын" үҙенең ҡыҙҙары һәм улдарынан кәм күрмәгән, уларҙы һәр саҡ хөрмәт иткән был ҡәйнә хәҙерге ныҡ ҡына олоғайған көнөндә бәхетле ҡартлыҡ кисерә. Сығышы менән Күгиҙел ауылынан булған Вәсилә исемле уңған килене менән Миһран улы ҙур ихтирам менән ҡәҙерләп ҡарай уны. Башҡа балалары ла уның янынан өҙөлмәй (8 бала ҡарап үҫтергән ҡәйнәмдең 21 ейәнейәнсәре, 35 бүлә-бүләсәре бар). Әбейебеҙ яңғыҙлыҡтан ыҙа сикмәй инде. Йәй етһә, ихатаһы тулы бала-сағалары ҡарап һөйөнөп туя алмай ул...

Бөгөнгө һүҙем дә фәҡәт тормошобоҙҙағы ыңғай күренештәр, донъябыҙҙы йәмләүсе гүзәл кешеләр хаҡында. Тағы бер изге күңелле ҡәйнә һәм шундай уҡ яҡшы әлеге "кеше балалары" - килендәр тураһында бәйән итергә ниәтем. Атайым вафат булғанда әсәйемә алтмыш туғыҙ йәш ине. Бәгзе күрше-тирәнең: "Яңғыҙың ауылда йәшәй бир әле. Килен ҡулына китергә ашыҡма, әле әллә ни ҡарт та түгелһең бит", - тип өгөтләүенә лә ҡарамаҫтан, шул йылдь уҡ, бөтә булған мал-тыуарын, йорт-ҡураһын һатып, әсәйем Сибайҙа йәшәгән Юлай ағайым менән Йондоҙ еңгәмә күсеп сыкты ла китте. Әлбиттә, иң беренсе нәүбәттә еңгәмден: "Ҡәйнәм, ауылда яңғыҙыңа ауыр булыр, фатирыбыҙ иркен, дүрт бүлмәле бит. Беҙ һине үҙебеҙгә күсереп алабыҙ", - тип ихлас күңелдән өгөтләүе тәьҫир иткәндер. "Өйөм, малым", тип тә йәбешеп ятманы әсәйем, иң мөһиме - ҡалаға күскәне өсөн бер ҡасан да үкенмәне. "Аллаға шөкөр", тип һәр саҡ шатланып ҡына ултырыр ине. Үҙенә бүлеп бирелгән кескәй бүлмәһендә намаҙ ғына уҡып, балаҫағаларына изге теләктәр теләп, Аллаға зекерҙәр әйтеп ултырғаны күҙ алдымда ҡалған. Һәр саҡ алсаҡ йөҙлө ағайым менән еңгәмә тулыһынса үҙен ышанып тапшырған әсәйем бер ҡасан да үҙенең иҫкәрмәләре, кәңәштәре менән балаларының эшенә ҡыҫылманы. Йәшәү шарттары менән дә һәр саҡ ҡәнәғәт булыр ине. Берәй кейем-маҙар һатып алып бирһәләр, улым тип түгел, ә "киленем әпирҙе", тип балаларса шатлана торғайны ул.

Тиҫтә йылдан ашыу ағайымдарҙа йәшәгәндән һуң, ғаиләбеҙҙә иң кесе булған Йәлил ҡустымдың хәләл ефете - Мөнирә киленебеҙ: "Ҡәйнәмде беҙҙең дә ҡарағыбыҙ килә, беҙгә лә килеп торһон", - тип, уны үҙҙәренә күсереп алып ҡайтыу теләген белдерҙе. Юлай ағайым менән еңгәм ризалашҡас, әсәйем ҡустыбыҙ йортона күсеп барҙы. Үҙенең эштәге дәрәжәһе - фән докторы, профессор булыуына ҡарамаҫтан, Мөнирә киленебеҙ әсәйемде хәстәрләүгә бар көсөн һалды, үҙ әсәһе һымаҡ яҡын күрҙе. Киленебеҙҙән бер ваҡытта ла зарланыу һүҙен ишетмәнек. Әсәйемдән күп кенә Ҡөрьән аяттарын да өйрәнеп алды ул. Аллаһ Тәғәлә ихтыяры менән киленебеҙҙең намаҙға баҫыуына ла, бәлки, намаҙкәр әсәйем сәбәпсе булғандыр. Әсәйебеҙ ҡартлыҡ менән сирләп киткәс тә, һуңғы көндәренә тиклем Мөнирә килен уны, ысын мәғәнәһендә, сабый бала һымаҡ итеп, күтәреп алып килеп өҫтәл артына ултыртып, ҡалаҡ тотоп ашатҡанын үҙ күҙҙәрем менән күрә торғайным. Бына шундай, беҙгә башҡа ғаиләләрҙән килгән изге күңелле "кеше балалары" - килендәр хаҡында нисек һөйләмәй ҡалдырыу мөмкин? Ғәзиз әсәһенә ҡәҙер-хөрмәт күрһәткән өсөн был ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата уларҙың хәләл ефеттәренең ихтирамы һәм һөйөүе нисек тәрән булыуын, әлбиттә, күҙаллауы ҡыйын түгел...

Ғаиләбеҙҙә Ғәлиә исемле берҙән-бер апайыбыҙ ҙа бар. Әсәйебеҙ һәр йәй уның янына ауылға барып, айҙар буйы ҡунаҡта булып ҡайта ине. Апайым менән Рәүил еҙнәмдән дә тик яҡшылыҡтар ғына күрҙе ул. Юлай ағайым йә ҡустым уны Сибайға алып ҡайтырға тип килһә: "Ҡәйнәм, ҡайҙа ҡабаланаң? Беҙҙә тағы бер аҙ тора биреп ҡайтһаң ни була?"- тип еҙнәм дә йылы һүҙҙәрен еткерә торғайны. Әсәйемдең бына шундай бәхетле ҡартлыҡ кисереүендә үҙенең балаларының - шәхсән апайымдың, ағайым менән ҡустымдың роле хаҡында, әлбиттә, әйтеп торһаң ла юҡ, әммә был турала ("үҙебеҙҙекеләр" хаҡында) яҙып торманым. Бөгөнгө көндә Йондоҙ еңгәм менән Мөнирә киленебеҙ ҡәйнәләрен - беҙҙең әсәйебеҙҙе иң яҡшы һүҙҙәр менән генә иҫкә ала. Шундай ҡәйнәләр һәм килендәр күберәк булһа, һәр ерҙә тормош та еңелерәк булыр ине, моғайын. Әсәйемде ҡәҙерләп ҡараған бына ошо "кеше балалары"ның ҡартайған көнөндә үҙҙәренең дә изгелекле бағыусылары булыуын Аллаһ Тәғәлә насип итһен, тип һорайым.

Халҡыбыҙҙа "Ни сәсһәң - шуны урырһың" тигән әйтем йөрөй. Әҙәпле булыу йәштәрҙән генә түгел, ә оло кешеләрҙән дә талап ителә. Үҙҙәре шәберәк саҡтарында кәрәккәнгә-кәрәкмәгәнгә үҙенең улын (ҡыҙын) "ҡыҙғанып", йәштәрҙең араһына "һикереп төшөп", беҙҙең яҡта әйтмешләй, "тертәнләп", килендәре йә кейәүҙәренә ҡырын-мырын һүҙҙәр әйткеләп йөрөгән ҡәйнәләр ҙә күп. Ә инде ҡасандыр ауыр һүҙҙән "күңеле ҡалған" килендәр, үҙҙәре бер аҙ "йыуанайып" алғас, ғәҙәттә, ҡәйнәләренең әлеге "шәп, иғтибарлы" ваҡыттарын иҫләүсән. Килен кеше күҙлегенән ҡарағанда биғүк ғәҙел булмаған, йәш саҡтарында ишеткән ана шул насар һүҙҙәр тиҙ генә онотола һалмайҙыр шул. Шағирыбыҙ Аҡмулла олатай әйтмешләй, "Яман һүҙҙең күңелдән даты (туты) китмәҫ..." Күп кенә килендәрҙең ҡартайған ҡәйнәһен үҙ йортона яҡынлаҡтыһы килмәүенең төп сәбәптәренең береһе тап бына ошондалыр. Ә ҡайһы бер ҡәйнәләр, хатта ныҡ ҡына ҡартайғас та, үҙҙәре балаларының ҡарамағында йәшәүенә ҡарамаҫтан, инде һәүетемсә олоғайып барған улыкилене араһына ҡыҫылып йә уларҙан үҙенең пенсия аҡсаһын ҡыҙғанып ултырыусан. Ындай ҡарт кешеләрҙең килен-кейәүҙәренә генә түгел, үҙ балаларына һыйып тороуы ла - икеле...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*БЕҘ - БАШҠОРТТАР!*

**Күп кенә ғалимдар Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында башҡорттар йәшәй тип раҫлай. Был ысынлап та шулаймы, улар үҙҙәренең сығышын беләме, ниндәй уйҙар менән йәшәйҙәр, ниндәй телдә һөйләшәләр, үҙҙәрен кем тип танайҙар. "Без - башҡортлар" хәрәкәте етәксеһе Радик Бәхтиевтың Нефтекама ҡалаһынан Адис МӨХӘМӘТГӘРӘЕВ менән монологында ошо һорауҙарға һеҙ ҙә яуап табырһығыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар.**



# БЕҘ САУҘАГӘР, КӘСЕПСЕ ТҮГЕЛ,

## беҙ яугир халыҡ вәкиле

- Мин төньяҡ-көнбайыш, Гәрәй ырыуы башҡорто булам. Беҙ, Яңы Нуғай ауылы халҡы, хәҙерге Бысҡытау территорияһынан, унда элек Иҫке Нуғай ауылы булған - ошо ауылдан сыҡҡанбыҙ. Бөгөнгә 11-се быуынға тиклем тамырҙарымды беләм. Тыуған ауылыбыҙҙа халыҡтың күпселеге ғәмәлдә башҡорт булһалар ҙа, бөгөн үҙҙәрен татар тип иҫәпләй. Үҙен 90 процентҡа тиклем татар тип иҫәпләгән кешеләр, тамырҙарын тикшерә башлаһа, шәжәрәләре башҡортлоҡҡа бара ла тоташа. Мин ундайҙар иҫәбенә инмәйем, сөнки тыуыу тураһында танытмала ла, иҫке паспортта ла, хәрби билетымда ла башҡорт тип яҙылды. Өләсәйем гелән, беҙ - башҡорттар, ти торғайны. Тик ни өсөн был турала ул шыбырҙап ҡына әйтте икән - аңламайым...

Мин үҙемдең башҡорт икәнемде белдем дә, шунын менән эш бөттө түгел, башҡаларға ла үҙ асылына ҡайтырға ярҙам итәм. Мин Хоҙай Тәғәлә ата-бабаларыбыҙҙы ниндәй милләт итеп яралтҡан, шул милләт вәкиле булып ҡалырға тейешбеҙ, тип уйлайым. Милләтте алыштырырға кәрәкмәй. Мосолман исемшәрифле күптәр үҙҙәренең тамырын белмәй, ә тикшерә башлаһаң, сығыштары менән билдәле, абруйлы шәхестәргә барып тоташалар.

Үҙ телемде беләм, унын көньяҡ башҡорттары теленән дә, татар теленән дә айырылып торғанын күрәм. Татарстанға барһаҡ, беҙҙе башҡорт, тиҙәр. Беҙҙең төньяҡ-көнбайыш теле - башҡорт теленең бер диалекты һәм ул һаҡланырға тейеш. Минән ололар ҙа, минең быуын да, йәштәр ҙә ошо диалектта һөйләшә, тел йәшәй. Ул башҡа телдәр араһында юғалып ҡалырға тейеш түгел.

Башҡорттар сауҙагәр, кәсепсе, алыпһатар түгел, улар - яугир. Шуға күрә улар иҡтисади мәсьәләләрҙе икенсе планға ҡуйғандыр. Беҙҙең быуын да яугирлыҡты беренсе урынға ҡуйырға тейеш, йәғни атай-олатайҙар Аҡ батша заманынан уҡ хәрби хеҙмәттә булған, беҙ ҙә ошо юлды һайларға тейешбеҙ, тип иҫәпләйем. Юҡһа, бөгөн аҡсаға табыныу, байырға тырышыу өҫтөнлөк итә. Башҡорттарҙа борон-борондан байырға тырышыу, аҡса культы нық үҫешмәгән, был хаҡта яҙыусылар ҙа яҙып ҡалдырған. Йәғни башҡорттар байлыҡ артынан ҡыумай, байлыҡ уларҙың күҙен томаламай. Минең дә ата-бабаларым хәрби ҡатламдан булған. 6-9 тапҡыр һуғыштарҙа ҡатнашҡандар йәки ил сиген һаҡларға барғандар. Нигеҙҙә, ил сиген һаҡлағандар, был уларҙың төп һөнәре булған. Моғайын, был нәҫелдән киләләр, мин дә аттарҙы бик яратам. Тәбиғәткә бәйле тормош оҡшай. Аттарҙың һыртына иғтибар итһәгеҙ, уларҙа ҡайыш кеүек һыҙат ята. Был уларҙың башҡорт тоҡомо икәнен күрһәтеп тора. Әлбиттә, улар башҡа тоҡомдар менән дә ҡушылғандыр, әммә башҡорт тоҡомо күрһәткесен юғалтмағандар. Нигеҙҙә, ауыр йөк ташыуға ҡулайлашҡандар, тибендә йөрөйҙәр.

Башҡорт ырыуҙары хәрәкәтенә ыңғай ҡарайым, сөнки ул беҙҙе хәҡиҡәткә алып бара, беҙ кем, ҡайҙа, нисек йәшәгәнбеҙ, нимә менән туҡланғанбыҙ - ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап бирә. Берҙәмлеккә килгәндә, тәү сиратта үҙең булып ҡалырға кәрәк. Хәҙер интернет заманы, юҡ-юҡ та, ике ырыу, мәҫәлән, уран башҡорттары менән бөрйән башҡорттарының диалогына шаһит булаһың. Уларҙың һәр ҡайһыһы үҙен башҡорт ти, һәм кеменең башҡортораҡ булғыһы килә, йәки ысын башҡорт икәнен асыҡлай башлай. Бындай бүлгеләү бөтөнләй булмаҫҡа тейеш. Әгәр документтарҙы ҡараһаҡ, бигерәк тә хәрбиҙәрҙең, унда уларҙың икенсе ырыу ҡыҙҙарына, мишәрҙәргә өйләнеүе асыҡ һәм йыш күренә. Йәғни элек шундай төшөнсә булған: башҡорттар икенсе ырыуҙарҙан ҡыҙ алып, ҡан алмаштырған, ҡан яңыртҡан. Был бер ырыуҙың ҡаны ҡатышмаһын, милләт сәләмәт булһын өсөн эшләнгән. Шул яҡтан ҡараһаҡ, беҙ бөгөн барыбыҙ ҙа туғандар, бүлешер нәмәбеҙ юҡ. Шуға күрә, берҙәм булырға, бер-беребеҙҙе хөрмәт итергә тейешбеҙ.

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ **1833-1842 һәм 1851-1857 йылдар** - Ырымбур һәм Һамар генерал-губернаторы Василий Алексеевич Перовский идара иткән осорҙар. Хәҙерге Ырымбур өлкәһе Һарыҡташ районы территорияһында махсус хутор төҙөп, хәрби бурыслы башҡорттарҙы Хива походына әҙерләгән. Ырымбурҙа башҡорттар өсөн Каруанһарай төҙөү мәсьәләһен күтәрә.

➔ **1833-1841 йылдар** - Күренекле ғалим һәм яҙыусы В.И.Даль Ырымбурҙа йәшәгән һәм рус теленең аңлатмалы һүҙлеген төҙөү эше менән бергә башҡорт легендалары, риүәйәттәрен дә йыйған.

➔ **1834-1835 йылдар** - Ырымбур, Пермь губерналарында крәҫтиән восстаниелары була.

➔ **1834-1835 йылдар** - Башҡорт-мишәр ғәскәре ойошторола.

➔ **1835-1840 йылдар** - Төрлө һөнәрҙәргә уҡытыу өсөн 300 башҡорт малайы Мәскәүгә, Ырымбурға, Ҡаҙанға ебәрелә.

➔ **1836 йылдың 18 феврале** - Министрҙар Комитетының "Ырымбурҙа игенселек һәм урмансылыҡ училищеһын булдырыуҙы раҫлау тураһында" положениеһы юғарынан раҫлама ала.

➔ **1836** - Салихйән Күкләшев Ҡаҙанда тел буйынса фән кандидаты дәрәжәһе алып, Неплюев хәрби училищеһына уҡытырға ҡайта.

➔ **1837** - Ғәли йәнәптәре тәхет вариҫы император Александр Николаевич шағир В.А. Жуковский оҙатыуында Ырымбур крайында булып китә.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Бөтмәҫ дандары ҡалды

1942 йылдың июль баштарында Воронеж ҡалаһы йүнәлешендә аяуһыҙ һөжүм итеп килеүсе, һан һәм ҡорал яғынан күп өҫтөнлөктәргә эйә булған фашист дивизиялары менән ҡан ҡойошло бәрелештәрҙә 112-се Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙарының ҡаһарманлығы хаҡындағы хәбәрҙәр бар илгә мәғлүм була. Билдәле шағир, "Красная Звезда" гәзитенең хәрби хәбәрсеһе Константин Симонов башҡорт батырҙарына дан йырлай. Әммә шундай дәһшәтле һуғыш ҡорбанһыҙ булмай: яуға ингәндең тәүге ун көнөндә үк дивизияның 600-ҙән ашыу һалдаты һәм офицеры яралана, һәләк була, хәбәрһеҙ юғала. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: һуғышҡа ингән мәлдә дивизияла барлығы 3823 яугир булып, уларҙан 304 кеше команда-идара итеүсе (офицерҙар һәм комиссарҙар), 431 кеше - кесе идара итеүсе (кесе командирҙар һәм политруктар) составты, 3088 яугир - рядовойҙарҙы тәшкил итә. Уларҙы милләттәре буйынса иҫәпләгәндә, 81,4 проценты - башҡорттарҙан, 14,5 проценты - татарҙарҙан, 3,3 проценты - рустарҙан, 0,8 проценты башҡа милләт вәкилдәренән була.

Минең алдымда "Китап" нәшриәтендә 2005 йылда Фәрит Вахитов һәм Наркиза Камалова тарафынан әҙерләнеп нәшер ителгән "Слава башкирских конников" исемле китап ята. Ошо китаптың 188 - 273 биттәрендә беҙҙең данлы дивизиябыҙҙың яуҙарҙа һәләк булып ҡалған, хәбәрһеҙ юғалған офицер, сержант һәм рядовой атлыларының исемлеге бирелгән. Әлбиттә, был исемлек тулы түгел, дивизия составында һуғыштарҙа ҡатнашып, башын һалғандарҙың да, ҡаты яралар алғандарҙың да, иҫән-һау ҡайтыу шатлығын кисергәндәрҙең дә тулы исемлеге әлеге көнгәсә төҙөлөп бөтмәгән. Һис шикһеҙ, бындай мартиролог булырға тейеш - был беҙҙең Бөйөк Ватан һуғышы тарихын яҙыусыларҙың мөҡәддәс бурысылыр, тим.

Ватан өсөн йәндәрен биреп, Башҡорт иленән, тыуған Уралдарынан алыҫта, Рәсәй, Украина, Беларусь, Польша һәм Германияның ялан-урмандарында, йөҙәрләгән туғандар ҡәберлектәрендә ер ҡуйынына ингән ҡәрҙәштәребеҙ, яҡташтарыбыҙ исемдәрен күҙаллайым да, ирекһеҙҙән йөрәк һыҙлауына дусар булып, күҙҙәрем дымлана. Ошондай уҡ, хатта унан да ауырыраҡ, уғата хисләндерерлек, хатта ир-уҙаман күҙҙәрен дә йәшләндерерлек тойғоларҙы беҙ, данлы дивизиябыҙҙын яу юлдары буйлап ойошторолған "Өфө - Берлин - Өфө" халыҡ-ара автосәйәхәтендә ҡатнашыусылар, тиҫтәләрсә туғандар ҡәберлектәренә веноктар һәм тере сәскәләр һалған мәлдә кисергән инек.

Беҙ белмәгән-күрмәгән һалдаттар... Уларҙы ла ғәзиз ата-әсәләре бәпләп-ҡарап үҫтергәндер ҙә, киләсәккә яҡты өмөттәр бағлағандыр. Ә улар Ватандары хаҡына йәндәрен дә аяманы. Һәләк булғандар исемлегендә аталған төрлө йәштәге ул заман башҡорттарын күҙ алдына килтергәндәй булам:

Абдуллин Әхәт Абдулла улы, 1919 йылғы, тыуған урыны - Туймазы районы Яңы Бишенде ауыл советы, лейтенант, ПТР взводы командиры, 275-се атлы полк. Курск өлкәһенең Тербуны районында 1942 йылдың 10 июлендә хәбәрһеҙ юғалған.

Бәҙретдинов Ҡыям Бәҙретдин улы, 1903 йылғы, Мәсетле районының Теләш ауылынан, 294-се атлы полк, 2-се эскадрон, сабельник. 1942 йылдың 23 июлендә һәләк булған, Курск өлкәһенең Озерки ауылында ерләнгән.

Вәлиев Сөләймән Хәлим улы, 1909 йылғы, Учалы районы Яңы Байрамғол ауылынан, 294-се атлы полк, рядовой. Курск өлкәһенең Тербуны-2 районында 1942 йылдың 10 июлендә хәбәрһеҙ юғалған.

Ғәлиев Хәниф Зариф улы, 1906 йылғы, Дәүләкән районының Дәүләкән совхозынан, сержант, 275-се атлы полк, отделение командиры. 1942 йылдың 6 июлендә һәләк булған, Курск өлкәһенең Тербуны районы Апухтино ауылында ерләнгән.

Дәүләтбаев Тимербай Дәүләтбай улы, 1903 йылғы, Илеш районының Төпәй ауылынан, 275-се атлы полк, 2-се эскадрон, сабельник. 1942 йылдың 4 августында һәләк булған, Курск өлкәһенең Тербуны-2 ауылында ерләнгән.

Еремеев Мөхәмәт Байморат улы, 1918 йылғы, Оло Теләк районының Ҡаҙаяҡ ауылынан, пулемет эскадронының телефонсы-элемтәсеһе. 1942 йылдың 6 июлендә һәләк булған, Курск өлкәһенең Тербуны районы Казино ауылы янындағы яланда ерләнгән.

Заһиҙуллин Сәйфетдин Шәйхетдин улы, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан, 294 атлы полк, ҡыҙыл армеец. 1942 йылдың 7 июлендә һәләк булған, Курск өлкәһенең Алёшки ауылында ерләнгән...

Тағы ла йөҙәрләгән кеше исемдәре. Был бөтмәҫтәй тойолған хәсрәтле исемлекте дауам итһәң, 112-се Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙарының һуғышҡа ингән тәүге көндәрҙән үк һис ҡурҡыу белмәй, йән аямай дошман менән алышҡа сығыуҙарын үҙең күреп, үҙең кисергәндәй булаһың. Юғалтыуҙар, яугир үлемдәре аяуһыҙ. Яңынан йән һыҙлай, бар күңелең һыҡрана башлағандай тойола... Һалдат үлеме хаҡындағы ҡара ҡағыҙҙар башҡорт ауылдарына ҡара ҡайғы булып ябырыла. Әммә ул заманда башҡорт йөрәгендә дошманға ҡарата үс-нәфрәт тойғоһо арта ғына бара.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Беҙҙә тамада йәки байрам алып барыусының статусы барлыҡҡа килмәгән әле. Был да үҙенә күрә бер мәҙәниәт. Кавказ халҡында, мәҫәлән, тамада байрамдарҙағы иң хөрмәтле роль.*



# ТУЙ йола үтәүгә

**Бөгөн артистарҙың, журналистарҙың, йырсыларҙың һәм башҡаларҙың тамада булып китеүенә төрлө ҡараштар бар. Әммә байрам-туйҙар үтеп тора һәм уларҙы ойоштороусылар ҙа кәрәк икән - был заман талабы. Шулай ҙа "тамада тамаданан айырыла" ла тиҙәр. Нисек итеп айырыла улар һәм тағы ла ниндәй үҙенсәлектәре, серҙәре, уй-тойғолары бар икәнде белеү өсөн журналист Светлана СӨЛӘЙМӘНОВА менән артист Шәһит ХАММАТОВтың, башҡортсалап әйткәндә, "аяҡсы" вазифаһы тураһында әңгәмәләшеп алырға булдыҡ.**

**Светлана, Шәһит, бына һеҙ берегеҙ шәп журналист, икенсегеҙ билдәле актер. Икегеҙ ҙә һөнәрле, үҙ профессияғыҙҙа ярайһы уҡ билдәлелек яулаған, тормошта үҙ урынығыҙҙы тапҡан кешеләр. Һәм һеҙ бөгөн күҙ өҫтөндәге ҡаш булып йөрөгән тамадалар ҙа. Был һеҙҙең өсөн өҫтәмә килем алыу ысулымы, ҡыҙыҡһыныуымы, һөнәр алмаштырыуымы - нимә ул? Үҙегеҙ нисек аңлатырһығыҙ?**

**Светлана Сөләймәнова:** Мин һеҙҙең тел төбөн яҡшы төшөндөм, күптәр был эште ниндәйҙер түбәнселек кеүек итеп ҡарай, шулай бит? Тик байрам-туй ойоштороу, аяҡсы булыу күптәрҙең ҡулынан килмәгән ауыр хеҙмәт икәнен һыҙыҡ өҫтөнә алып киткем килә. Туйға бит тамада күңел асыр йә уйнап-көлөр өсөн бармай, ул унда эшләй, бөтөн энергияһын, аҡыл һәм физик көсөн, харизмаһын, ихласлығын, сабырлығын сығарып һала. Шул дүрт-биш сәғәт эсендә һуты һығып алынған лимон хәленә инеп, аяҡ-ҡулы талып, башы шаулап, теле көрмәлеп ҡайтып китә ул, дөрөҫөндә.

2003 йылда, Юлдаш радиоһында Филүс менән иртәнге программаны алып барғанда, беҙҙең ҡушарлап эшләүебеҙҙе оҡшатып, бер шылтыратыу булды. Билдәле кешеләр үҙҙәренең мәжлесен ойошторорға саҡырҙы. Ул саҡта тамада тигән хеҙмәт тураһында белмәй ҙә инек әле. Коллегам баш тартты, ә мин үҙемде һынап ҡарарға булдым. Етмәһә, түңәрәк кенә хаҡ та тәҡдим итәләр. Башҡорт байрамдары буйынса интернетта бер мәғлүмәт юҡ, телефон юҡ, белгән-уҡығанымдан бер кисәлек сценарий йыйып-ҡоршап, теге кисәне үткәрҙем. Ошо беренсе эшемдән һуң мин үҙең өсөн хеҙмәт итеүҙең нимә икәнен аңлап ҡалдым. Радионан киткәс тә шул тамадалыҡ менән шөғөлләндем. Әммә ул мәлдә: "Һин ни өсөн тамадаға әүерелдең?"- тип шелтәләп һорағандар күп булды. Минең "Юлдаш" радиоһында алып барыусы эшенән китеп, ҡапыл ғына туйҙар алып барыусы булыу йәмғиәт өсөн ниндәйҙер түбәнгә тәгәрәү һымаҡ тойолдо, шикелле. Шунлыҡтан, был хеҙмәтемде хатта йәшереп йөрөргә тура килде. Нисек булғанда ла мин был эште ташламаным, быны ғаилә аҫырау, аҡса эшләүҙең бер юлы итеп ҡараным. Сөнки бюджет хеҙмәткәренең бер ай бил бөккән эш хаҡын бер кистә яһап алып ҡайтырға була. Быныһын да йәшермәйем.

**Шәһит Хамматов:** Мине 1996 йылда күрше ауылдағы берәүҙәрҙең туйында баян уйнарға тип саҡырғайнылар. Баян ҙур, артынан түбәм генә күренә, һәм мин уйнап тик ултырам. "Шуны уйна, быны уйна" тип заказ биреп кенә торалар. Алһыҙ-ялһыҙ уйнап, күңелдәрен күрҙем ҡунаҡтарҙың. Элек ауылдарҙа бит гармунсыны йәки йырсыны (ауыл һәләттәрен) ялламанылар, ҡунаҡ итеп саҡырҙылар ҙа, йырлатты ла-уйнаттылар. Мин дә үҙемде ошо хәлдәлер тип уйлағайным. Баҡтиһәң, былар миңә 80 тәңкә тоттороп, машина менән генә алып барып ҡуялар икән. Светлана ханым кеүек, мин дә шул ваҡыт был хеҙмәттең файҙаһын тойоп ҡалдым. Бының бер ояты ла, хилафы ла юҡ. Кемдәргәлер мәжлестәрен алып барыусы, биҙәүсе, ойоштороусы кәрәк, ә һин быларҙы булдыра алаһың.

Туй-байрамдар алып барһам да, төп эшемде онотмайым. Аҡсаны, дөрөҫөн әйткәндә, ашарлыҡ-йәшәрлекте театрҙағы эшмәкәрлегем дә бирә ала. Ә быныһы - хобби. Барып, ашыҡ-бошоҡ туй үткәреп ҡайтыуға ҡормайым хеҙмәтемде, ә Шәһит Хамматов булараҡ, үҙ стилем, үҙ ысулдарым, һөйләү телмәрем менән айырмалы һәм иҫтәлекле байрам яһашырға тырышам.



**Кем ул тамада? Ул ниндәй функция үтәй? Ниндәй маҡсат менән тамада яллана?**

**Шәһит Хамматов:** Беҙҙә тамада йәки байрам алып барыусының статусы барлыҡҡа килмәгән әле. Был да үҙенә күрә бер мәҙәниәт һәм, үкенескә ҡаршы, ул беҙҙә мәҙәни кимәлгә күтәрелеп етмәгән. Кавказ халҡында, мәҫәлән, тамада байрамдарҙағы иң хөрмәтле роль. Был уларҙың боронғо йола үтәүҙәре лә. Бының өсөн заттағы телсән, осҡор, абруйлы, мәҙәниле һәм башҡа матур сифаттары юғары баһаланған ир кеше һайлана. Мәжлестәрҙә ул зат-ырыуҙың бөтөн ҡыҙыҡһыныуҙарын, көнкүрештәрен, холоҡтарын белеп, кемде кем янына ултыртырға йәки кемгә нисегерәк мөрәжәғәт итергә икәнде яҡшы белә. Туғандарҙың үҙ-ара низағтарын да, етешһеҙлектәрен дә шымартып, үпкәләштәрҙе тиҙ генә баҫып, шау-шыуға юл ҡуймай, йыйынды шыма һәм матур итеп үткәреп ебәреү уның бурысы була. Тимәк, был кеше дипломат та.

Ә бит башҡорттарҙа ла борон-борондан байрамдарҙың аяҡсыһы, йәғни алып барыусыһы булған. Оло мәжлестәрҙә был ғаиләнең абруйлы кешеләренең береһе, торараҡ йәштәр туйҙары үткәрелә башлағас, был ролде кейәү менән кәләштең шаһиттары башҡарған, әммә аяҡсы тигән һыйлаусылар ҡала килгән әле. Аяҡсы, көрәгәсе, кейәү үңгәре һәм башҡалар - улар барыһы ла ана шул мәжлестең кәйефен тотоусылар, көйөн көйләүселәр. Бөгөн беҙ тамаданы мәрәкәсе, шут сүрәтендә генә күрәбеҙ. Йәнәһе, беҙ уны яллайбыҙ, ул хеҙмәтләндереүсе. Мин, мәҫәлән, бына ошо фекерҙе үҙгәртеү өсөн тырышам.

**Светлана Сөләймәнова:** Мин дә Шәһиттең әйткәндәре менән килешәм. Тамаданың хеҙмәтләндереүсе генә булып ҡалыуы, бер яҡтан, ана шул ролде үтәүселәрҙең сит ил шоу алып барыусыларына эйәреп китеүенән дә киләлер. Байрамдағыларҙы туҡтауһыҙ йырлатыу, бейетеү һәм уйнатыуға ҡайтып ҡалды уларҙың шөғөлө. Был дөрөҫ түгел, минеңсә. Алып барыусының вазифаһы ул мәжлесте бер тандырҙа тотоу. Таныштырыу, һәр бер ҡунаҡҡа иғтибар биреү, йыйылғандарҙың аралашып, һөйләшеп ултырыуына булышлыҡ итеү. Һәр ғаиләгә, һәр табынға индивидуаль рәүештә кәйеф-сафа төрҙәрен ҡулланыу, көйҙәрҙе лә, әйтер хәбәрҙе лә урынлы һәм мәғәнәле бирә белеү һәм башҡалар. Тамаданың программаһы буйынса ырғып-һикереп йөрөү, ул нимә ҡуша - шуны эшләү, уның ҡарамағындағы уйынсыҡтар хәленә ҡалыу уңышлы байрам түгел ул. Шулай уҡ тамада кемгә ҡасан һөйләргә икәнде хәл итергә, хатта һөйләргә теләмәгән кешене лә ирекһеҙләргә, көсләп бейетергә, уйнатырға тейеш түгел. Алып барыусының бурысы, асылда, ҡунаҡтарҙы нимәлер эшләтеүҙән алда, ниндәйҙер кимәлдә уларҙың күңелен арбау, сихырлау, әсир итеү. Былар барыһы ла телмәр формаһында, интеллект кимәлендә башҡарыла.

**Мәҫәлән, туйға заказ алдығыҙ, ти. Әҙерлек нисек башлана? Һеҙҙең ниндәйҙер шарттарығыҙ, теләктәрегеҙ буламы?**

**Шәһит Хамматов:** Мин янып барған заказдарға тотонмайым. Ашыҡ-бошоҡ, халыҡты белер-белмәҫ көйө барып нимәлер һөйләп тороу бәҫемде төшөрә тип уйлайым. Кәмендә ай, ай ярым алдан алынған заказға әҙерлек эшен хужалар һәм уларҙың ҡунаҡтары менән танышыуҙан башлайым. Фотоларына ҡарап, "Был кем, ҡайҙа эшләй, ниндәй шөғөлдәре бар, холҡо нисек, ғаилә хәле?" тигән һорауҙарҙы бирәм. Былар барыһы ла әлеге кешегә шул мәжлестә комфортлы һәм күңелле булһын, уның кәйефен ҡырыр, хәтерен ҡалдырыр нескәлектәр килеп сыҡмаһын өсөн эшләнә.

**Светлана Сөләймәнова:** Ғәҙәттә, заказ менән килеүселәрҙең үҙ сценарийҙары булмай. Улар сараларына ҡағылышлы йолаларҙы ла артыҡ белмәй. Тимәк, был эштәрҙең барыһын да һин тәҡдим итәһең. Туйҙарға, мәҫәлән, мин милли йолаларҙы индереү яҡлы һәм шул тәҡдимемде хужалар ҡабул итерлек итеп кенә бирергә тырышам. Йәштәр менән айырым, ата-әсәләре менән айырым һөйләшәм, һәр береһенең уй-теләген ишетергә, ике быуын вәкилдәренә лә ярарға кәрәк.

**Бөгөн тамада булып йөрөүсе артистар, алып барыусылар, нәфис һүҙ оҫталары етерлек, һәр икенсе йырсы был ролде башҡара, тигәндәй. Ҡарап торһаң, теле лә шыма, йырлай ҙа, уйната ла, көлдөрә лә кеүек, әммә ҡунаҡтар аҙаҡтан йыш ҡына ҡәнәғәтһеҙлеген ишеттерә. Нимәнән ризаһыҙлыҡ белдерергә мөмкиндәр, нисек уйлайһығыҙ?**

**Шәһит Хамматов:** Әгәр ҡунаҡтар байрамдан ҡәнәғәт ҡалманы икән, бында ике яҡтың да хатаһы бар: хужаларҙыҡы ла, тамаданыҡы ла. Эйе, бөгөн тамадаларҙың программалары ла төрлө, стилдәре һәм башҡалары һәр береһенеке үҙенсә. Шул уҡ ваҡытта уларҙың уртаҡ яҡтары ла күп. Күптәр байрамды шоу формаһында үткәрергә, ҡунаҡтарҙы ниндәйҙер көсөргәнештә, кәйефтә тоторға тырыша. Мәҫәлән, йәштәр туйҙы ят көйҙәр, ят бейеүҙәр, ят йолалар менән Европаса ойошторған, ти. Ә унда, әйтәйек, Әбйәлил районынан ололар килгән. Әлбиттә, улар был сарала тол ҡа тапмаясаҡ, әлбиттә, күңелдәре булмаясаҡ. Йә булмаһа тамада туйҙа ҡунаҡтарға ашарға ла бирмәйенсә һөйләй ҙә һөйләй. Ә ҡунаҡтар кемдер һөйләп торғанда ашап ултырырға ҡыймай. Шулайтып, аш һыуынып бөтә, артыҡ көслө музыканан, ҡысҡырған алып барыусынан һәм байрамдың үтә ҡыҙыу темпынан ҡунаҡтар арып бөтә, улар бер-береһе менән аралаша-таныша ла алмай ҡәнәғәтһеҙ ҡайтып китә.

**Светлана Сөләймәнова:** Ҡунаҡтарҙың ризаһыҙлығы алып барыусыларҙың һыйлаусы, тост күтәртеүсе роленә инеп китеүенән дә булырға мөмкин. Был осраҡта тамада хатта ҡотлауҙы, телмәр тотоуҙы ла минутлап бүлеп ҡуя. Бөтөн мәжлес тамада өйөрөлмәгендә өйөрөлөп, уныңса ғына булып, тын алғыһыҙ шәплектә һәм шау-шыуҙа үтә лә китә. Былай ҙа эшләп ҡайтырға була. Хужалар улар байрам барышында быны төшөнөп етә алмай, ә аҙаҡтан яйлап уйлап, баштарынан үткәреп, ризаһыҙлыҡтарын әйтә лә - һуң инде, туй үткән, аҡсаһы түләнгән. Шунлыҡтан, бөтөн ойоштороу мәсьәләләрен алдан ныҡлап уйлап, ҡат-ҡат тикшереп һәм кәңәшләшеп, һәр ваҡ мәсьәләне тәфсирләп, ваҡыт менән бүлеп ҡарап, килешергә кәрәк. Тамадаларҙың яуапһыҙлығы ул хужаларҙың моңһоҙлоғонан, иғтибарһыҙлығынан килә. Талаптың юғары булыуы йәки заказсыларҙың кимәле беренсе һөйләшеүҙә үк беленә.

**Мәжлес мәжлес бит инде, табын артында күңел асҡан халыҡ менән төрлө хәлдәр ҙә сығып ҡуя. Шундай "сете-**

*Ә бит башҡорттарҙа ла борон-борондан байрамдарҙың аяҡсыһы, йәғни алып барыусыһы булған. Оло мәжлестәрҙә был ғаиләнең абруйлы кешеләренең береһе, торараҡ йәштәр туйҙары үткәрелә башлағас, был ролде кейәү менән кәләштең шаһиттары башҡарған, әммә аяҡсы тигән һыйлаусылар ҡала килгән әле. Аяҡсы, көрәгәсе, кейәү үңгәре һәм башҡалар - улар барыһы ла ана шул мәжлестең кәйефен тотоусылар, көйөн көйләүселәр. Бөгөн беҙ тамаданы мәрәкәсе, шут сүрәтендә генә күрәбеҙ. Йәнәһе, беҙ уны яллайбыҙ, ул хеҙмәтләндереүсе. Мин, мәҫәлән, бына ошо фекерҙе үҙгәртеү өсөн тырышам.*

***✓ Мәжлес, туй алып барыусы ул байрам яһаусы ғына түгел, ә тәрбиәүи мәғлүмәт алып килеүсе лә. Ул матурлыҡҡа, берҙәмлеккә, мәҙәнилеккә өндәүсе лә. Бына ошоларҙы нигеҙҙә тоторға тырышам.***

# МӘЖЛЕСТӘРЕ...

## әйләнһен ул

**рекле" ситуацияларҙа ни эшләй алып барыусы?**

**Светлана Сөләймәнова:** Минең мәжлес-туйҙарҙан илап ҡайтҡан саҡтарым да аҙ түгел. Бая үрҙә әйткәнсә, беҙҙә алып барыусыны хеҙмәтләндереүсе итеп кенә күрәләр, тигәндән, эсеп иҫереп алғандарҙың әҙәпһеҙ ҡылыҡтары ла булып ҡуя. Ғәҙәттә, эш шарттарын һөйләшкәндә-килешкәндә үк мин "миңә берәү ҙә килеп ҡағылмай, мин бергә бейемәйем, һыйланмайым, минең менән шәхси һөйләшеүҙәр юҡ, мине тартҡылау, ирекһеҙләү тыйыла" тигән талаптарымды ҡуям. Әммә, үкенескә ҡаршы, эскеһеҙ байрамдарға ҡарағанда эске менән булғандары күберәк һәм алып барыусыны ҡосаҡлап үбергә теләгәндәр ҙә аҙ түгел. Шулай ҙа, ошо тәңгәлдә билдәләп үтәйем, һуңғы йылдарҙа эскеле байрамдарҙа ла халыҡтың спиртлы эсемлектәргә артыҡ һалышмауы, күптәрҙең исем өсөн генә тотоуы ла күҙгә ташлана. Йәғни, эскелек мәжлестең үҙәге түгел, тип әйтергә теләйем.

Сетерекле хәлдәр сыҡҡанда, бында хужалар барлығын да онотмайыҡ. Мин бит бары байрамды алып барыусы ғына, ә уның тәртибе, хәүефһеҙлеге һәм ҡунаҡтарҙың мәҙәни кимәле өсөн улар яуаплы.

**Шәһит Хамматов:** Мәҫәлән, нисәлер рүмкәнән һуң бер апай үҙен бик тә бәхетле итеп тоя ла, был халәте тағы ла илһамлыраҡ булһын өсөн тамада менән вальс бейергә теләй. Йәки бер ҡоҙаға икенсеһе оҡшамай. Бер сәбәпһеҙ, оҡшамай һәм - вәссәләм! Һәм ул йоҙроҡтарын төйнәй... Ошоларға оҡшаш хәлдәрҙә алып барыусы бөтөн тел һәм актерлыҡ һәләтен ҡуллана инде, көсөргәнеш тыуҙырмаҫҡа, башҡалар иғтибарын йәлеп итмәҫкә, иткәндә лә быны юморға борорға һәм шул уҡ ваҡытта берәүҙе лә кәмһетмәй, үпкәләтмәй генә үткәреп ебәрергә. Төрлө хәлдәр тыуғаны бар, эйе, әммә әлегәсә барыһы ла яйлы ғына шымартыла торҙо. Йәғни, мин үҙ ролемде үтәй беләм.

**Туйҙар йоламы ул беҙҙә, әллә байраммы?**

**Светлана Сөләймәнова:** "Башҡорт халыҡ ижады"нда туй ул үҙе йола итеп бирелә, йәғни, айырым йоланың атамаһы "туй". Уның эсенә шул мәжлес тә, байрам да, туғанлашыу ҙа, килешеү ҙә инә. Борон туйға бер нисә көнгә һуҙылған һәм эҙмә-эҙлекле барған саралар теҙмәһе инһә, заманалар ағымында был йолалар иләнеп-таралып төшөп ҡалып бөткән. Бигерәк тә совет власы осоро беҙҙең яусылы, саҡырыусылы, ҡалымлы, мәһәрле, һандыҡлы, сымылдыҡлы туйҙарҙы башта "ҡыҙыл туй"ға, унан бөтөнләй атызаты булмаған аҡ фаталы мәжлестәргә генә ҡалдырҙы. Һәм бына һуңғы йылдарҙа, халыҡтың үҙ асылына ҡайтыу дәүерендә, зыялылар туйҙарында милли йолаларҙы тергеҙә башланы. Быға туйҙарҙы алып барыусылар ҙа булышлыҡ итергә тейеш тип уйлайым. Миңә күберәк ауыл сығышлы булғандар йәки ауыл халҡы мөрәжәғәт итә һәм мин башлыса башҡорт туйҙарын ғына үткәрәм. Бөгөн күптәр йолалы туйҙы алға ҡуя һәм улар менән үҙ ерлегендә үтәлгән йолаларҙы барлап сығабыҙ. Дөйөм башҡорт йолаһы тип алынғандың һәр районда үҙ үтәлештәре булырға мөмкин бит. Быларҙы ла күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Йомғаҡлап әйткәндә, туйҙың йоламы, әллә байраммы икәнен һәр заказ биреүсе үҙе хәл итә. Кемдәрҙер шунда уҡ йолаларға баҫым яһайыҡ, ти. Кемдәрҙер йола хаҡында бөтөнләй белмәй. Был тәңгәлдә мин үҙемдең тәҡдимдәремде индерәм һәм әлегә тиклем берәүҙең дә йолаларҙан баш тартҡаны булманы. Беҙҙең халыҡтың күңеленә һалынған бит инде ул йолалы, ғәҙәтле булыу. Хыялым, киләсәктә туйҙарҙы уйлап сығарылған йәки ябайлаштырылған, ҡулайлаштырылған йолаларҙан арындырып, тап тәғәйенләнеше буйынса, тулы, дөрөҫ йолалар менән үткәреү.

**Шәһит Хамматов:** Халҡыбыҙҙың туйҙы кеше ғүмерендәге бер мөһим ваҡиға итеп ҡуйыуы үҙе үк уның йола икәнен асыҡлай. Бында хатта бәхәсләшеп тә булмай. Кешеләр бит үлеп-батып булһа ла балаларына туй үткәрергә тырыша. Туйһыҙ өйләнешеүҙе өнәмәй. Тимәк, был йәмғиәттең йола булып формалашҡан ҡануны. Байрам тигән төшөнсә һуңғы быуатта барлыҡҡа килгән нәмә. Мәҫәлән, Май байрамы, Октябрь байрамы кеүек. Ә туй, никах кеүектәр улар йәшәйеш, көнкүреш йолалары. Тәртип буйынса был йолалар (һәм башлыса барыһы ла) ашһыу мәжлесенән башҡа үтмәй. Күмәкләп күңел асыу, йырмоң, уйын-көлкө ана шул байрам тантанаһын бирә лә инде. Бында эш нисек аталыуҙа түгел, ә шул бүленештәрҙе аңлап белеүҙә.

**Туйҙарҙа, юбилейҙарҙа йыш ҡына тел мәсьәләһе проблема булып ҡалҡып сыға. Мәҫәлән, йәштәр башҡортса, ололар русса аралаша алмай. Бигерәк тә ҡала ерендәге мәжлестәрҙә. Шул саҡ тамада руссаға күсә лә китә...**

**Светлана Сөләймәнова:** Мин башҡорт сараларын алып барам тип әйтеп үткәйнем. Тимәк, мине тик башҡортса һөйләшеүселәр генә саҡыра. Сценарий, программа һәм башҡалар барыһы ла башҡортса төҙөлә. Шулай булғас, кемдәрҙер аңламай тип телде боҙоп руссалап тормайым. Киреһенсә, шул башҡортса һөйләшә алмағандар ҙа тырышып-тырышып туған телдә һупалап маташа әле. Мин был мәсьәләне лә барыһы ла килешерлек итеп "Беҙ байрамды рәхәтләнеп аралашып, теләктәребеҙҙе әйтеп, йырлап, бейеп ҡайтыу өсөн туған телебеҙҙә үткәрәбеҙ", тип һаплап та ҡуям.

**Шәһит Хамматов:** Бындай байрамдарҙа тел ул төп бәйләнеш сараһы. Башҡортса булғанда ла, хатта ҡайһы урындарҙа руссаға күсеп китергә тура килгәндә лә, халыҡ үҙ туған телендә һөйләшергә, уның диалекттарын, ерлеккә хас тел үҙенсәлектәрен, тел айырмалығына бәйле ҡыҙыҡтарын һөйләргә лә ярата. Йыйылыштарҙағы һымаҡ, бер рус кешеһе булды икән, бер коллектив башҡортто ыҙалатып, русса һөйләткән кеүек хәл тыуҙырмаҫҡа, ә бына ошо тел ҡытыршылыҡтарын бөтөнләй тойҙормаҫҡа кәрәк мәжлестәрҙә. Быны ла алып барыусы оҫта итеп ойоштора ала.



***Бөгөнгө башҡорт туйҙарында сит ил йолаларынан урыҡ-һурыҡ урланған ғәҙәттәр артыҡ. Мәҫәлән, әллә ҡайҙан уйлап таптылар: ҡыҙҙы атаһы етәкләп алтарь янына алып сыға һәм кейәү ҡулына тапшыра. Кино ҡарап мауыҡҡан беҙҙең ҡыҙҙар, шундағы һымаҡ ҡыланғылары килә. Ярымасыҡ күлдәктәр! Кәләштең яурынбаштары, ярты күкрәге асыҡ булып ҡуя. Унан ул атаһы менән вальс әйләнә. Был да артыҡ ҡыланыу, минеңсә. Күренеп тора, атай кеше ҡыҙы менән тәүгә бейей, ул уңайһыҙлана, юҡ, уға шундай бурыс һалғандар. Ҡыҙыңдың биленән ҡосаҡлап бейеп йөрөү матур күренеш тә һәм беҙҙеңсә лә түгел.***

**Башҡорт тайҙарында нимәләр артыҡ?**

**Светлана Сөләймәнова:** Был минең иң ауыртҡан еремә тейгән һорау. Иң йәнемде әрнеткән мәсьәлә. Бөгөнгө башҡорт туйҙарында сит ил йолаларынан урыҡ-һурыҡ урланған ғәҙәттәр артыҡ. Мәҫәлән, әллә ҡайҙан уйлап таптылар: ҡыҙҙы атаһы етәкләп алтарь янына алып сыға һәм кейәү ҡулына тапшыра. Кино ҡарап мауыҡҡан беҙҙең ҡыҙҙар, шундағы һымаҡ ҡыланғылары килә. Ярымасыҡ күлдәктәр! Кәләштең яурынбаштары, ярты күкрәге асыҡ булып ҡуя. Унан ул атаһы менән вальс әйләнә. Был да артыҡ ҡыланыу, минеңсә. Күренеп тора, атай кеше ҡыҙы менән тәүгә бейей, ул уңайһыҙлана, юҡ, уға шундай бурыс һалғандар. Ҡыҙыңдың биленән ҡосаҡлап бейеп йөрөү матур күренеш тә һәм беҙҙеңсә лә түгел. Һәр хәлдә, былар минең фекер. Унан, ҡыҙҙың туфлийынан эсемлек эсеү, сәскә ташлау, ҡыҙҙың ойоҡ бауына талашыу кеүек артыҡ ҡыланыштар ҙа осрай. Тағы ла үбешеү. Хужалар үҙҙәре үк алдан әйтеп ҡуя хатта "үбештермә инде" тип, йәштәр ҙә шулай ти. Бөтөн туған-тыумаса, ата-әсә балаларының ирен һурып үбешкәнен ҡарап ултырырға тейешме? Был "йола"нан туйсылар үҙҙәре үк биҙрәп тора. Ә уйһыҙ тамадалар уларҙы ирекһеҙләп, көсләп үбештерә лә үбештерә. Былар барыһы ла сит халыҡҡа эйәреү, үҙ ҡағиҙәләренде белмәү, өйрәнмәүҙән киләлер.

**Шәһит Хамматов:** Христиан туйҙарының йолалары килеп инде беҙҙең туйҙарға. Һыу юлына барғанда бигерәк сама юғалтып ебәрәләр. Мәжүсиҙәрҙә борон туйҙы егет менән ҡыҙҙың түшәк бүлешеүенә алып килә торған йола итеп күрһәткәндәр һәм шул бәйләнешкә этәргес булған күренештәрҙе сағылдырғандар. Шуларға эйәреп, бөгөн беҙҙә кишер тағып йөрөһөндәрме, ҡатын-ҡыҙҙың эске кейемен кейеп алһындармы һәм башҡалар. Матур түгел генә түгел, ҡырағайлыҡ тип иҫәпләйем мин быларҙы.

Тағы ла мин туйҙарҙағы эскелеккә, бөтә нәмәне аҡсаға ҡороуға һәм уйындар уйнатыуға ҡаршымын. Эскелек темаһы былай ҙа аңлашылалыр, эскән мәжлестә йылы аралашыу, күңел менән ял итеү булмай, ә ҡотороуға тартым бер кисә килеп сыға. Программа нисек кенә бай, нисек кенә ҡиммәтле булмаһын, эскелек үҙекен итә һәм ҡунаҡтар шул тәмле һыйҙы ла, артистарҙы ла баһаламай.

Икенсеһе - бөтә нәмәнең аҡсаға һатылыуы. Килен бейеүенә генә аҡса һалыуға ризамын. Ә башҡаларына аҡса түләү менән килешмәйем. Был, әйтерһең, туй түгел, ә аҡса эшләү сараһы. Өсөнсөһө иһә - уйындар. Ҡунаҡтарҙы көсләп сығарып, буяп-кейендереп, әллә ниндәй ҡыланыштар ҡыландырып, әҙәпһеҙ трюктар яһатып бөтәләр. Ошоларҙы ла оҡшатмайым, ҡунаҡтарҙың уңайһыҙланып ултырғанын да күрәм. Был да тамаданың грамотаһыҙ шоу яһарға тырышыу күренештәре. Туйҙа, юбилейҙарҙа кешеләр күберәк һүҙ менән аралашырға тейеш. Был бит бәйге йәки һабантуй түгел. Бында өҫтәл артындағы бәйләнеш-аралашыу мөһимерәк.

**Тамаданан тамада айырыламы, асылда?**

**Светлана Сөләймәнова:** Мәжлес алып барыусы, туй алып барыусы ул байрам яһаусы ғына түгел, ә тәрбиәүи мәғлүмәт алып килеүсе лә, фәһемле төшөнсәләр биреүсе лә. Ул матурлыҡҡа, берҙәмлеккә, мәҙәнилеккә өндәүсе лә. Бына ошоларҙы нигеҙҙә тоторға тырышам. Кешеләр иң ҡәҙерле, хатта ғүмерҙәрендә бер генә була торған байрамдарына һине саҡырғандар икән - был яуаплылыҡты дәрәжәле күтәрә бел. Шулай тип уйлап, клиенттарымдың ышанысын аҡларға, уларға онотолмаҫ кисәләр яһарға тырышам. Һәм ниндәйҙер мәжлескә алып барыусы булып килеп баҫҡанда ла үҙемдең ир ҡатыны, өс бала әсәһе, журналист, ижад кешеһе булараҡ күренеп өлгөргәнлегемде лә онотмайым. Мин ошо статусыма торошло баһамды төшөрмәҫкә, намыҫымды тапамаҫҡа тейешмен дә.

**Шәһит Хамматов:** Бөтә эштә лә индивид булыуға ынтылыу зарур. Үҙ фекерең, үҙ талаптарың, үҙ ҡарашың һәм мөнәсәбәтең менән. Бының өсөн башты эшләтергә, ҡыйыулыҡҡа һәм фантазияға эйә булырға кәрәк. Алып барыусы булараҡ һин клиенттарға ниндәй яңы форма, башҡаларҙа ҡабатланмаған үҙенсәлектәр тәҡдим итә алаһың? Алып барыусы - ул шоу яһаусы түгел. Ул кешеләрҙе, хатта тәүгә күрешеп тороусы ете яттарҙы ла, аралаштыра ала торған сәнғәт һәләтенә эйә булыусы. Бына ошоларҙы төшөнгәндә һәм ҡуллана белгәндә, әлбиттә, тамада тамаданан айырыла.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

***✓ Бер урында өйөлөшөп ятҡан коньяк этикеткаларын күреп, Сараның иҫе китте. "Легаль булмаған шарап һатыу менән шөғөлләнәләр! Быларҙың эштәре хәтәр!" Ошондағы ниндәйҙер аферист әсәһенең башын әйләндергән!***



Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА

# НИШЛӘҮЕҢ БЫЛ, САРАМ, ЙӘНКИҪӘК!

Повесть

Өстәлдә ятҡан һүрәткә бер генә ҡарап алды ла, ҡарт үҙенең һүҙен дауам итте.

- Был фатир миңә мираҫ буйынса бирелде. Әсәйем Өфөнөкө. Ә атайымдарҙың ғаиләһен Ватан һуғышы башланғас, СССР-ҙың көнбайышынан күсергәндәр. Дөрөҫөрәге, хәрби завод эшселәре менән ҡуша эвакуациялана. Минең атай, ул саҡта үҫмер бала, шунда атаәсәһе менән шул заводта эшләгән. Һуғыш бөткәс, әсәйем менән таныша, шуның һөҙөмтәһе булып мин, Аркадий атлы вирус, донъяға тыуам да инде, - ҡарт кет-кет көлдө. Яңы тәмәке алып тоҡандырҙы. - Мин үҫкән йылдар ҙа еңел түгел ине. Ниндәй генә бандиттарҙы, кеше талаусыларҙы күрергә тура килмәне. Урам мине күп нәмәгә өйрәтте. Эйе... - Ҡарт, бирелеп, тамаҡ өсөн көрәш, урам өсөн көрәш тураһында һөйләй.

- Атайҙар фронттан әйләнеп ҡайтманы, етем ир балалар күп. Әсәләре көнө буйы эштә, балалар уларға буйһонмай, урам балалары булып үҫә. Шундай хәтәр заман ине. Үҫтек! Әсәйем: "Аркаша, башың төрмәлә серейәсәк бит!"- тип әрләй торғайны, - Трофимыч һерелдәп тауыш-тынһыҙ көлдө. Шунан ҡапыл етди төҫ алды. - Бындай кеше Черниковкала юҡ, - тине фотоға ымлап.

- Юҡ? - ышанмаған төҫлө Сара ҡабатлап һораны. - Ганс тураһында, ысынлап та, ишеткәнегеҙ юҡмы?

- Га-а-анс, - тип һуҙҙы ҡарт. - Заманында был тирәлә Ганс та, Франц та йәшәнеләр. Ниндәй генә халыҡ күсеп килмәне беҙҙең Өфөгә. Үҙ иркенән бигерәк, мәжбүри рәүештә! Немецтары ла булды, поляктары ла. Аҙаҡ үҙҙәренә ҡайтып киттеләр. Хәйер, мин белгәндәре өлкән йәштә ине. Хәҙер яҡты донъяла юҡтарҙыр.

- Бөгөн дә бер Ганс бар. Ганс Гасанович.

- Гасанович? - тип ҡабатланы Трофимыч. - Баштуҡ шулай тип әйтергә ине. Нимә, бурысың бармы әллә уға?

Сараның ауыҙы асылып китте. Нишләп Аркадий Трофимыч ҡапыл ғына улай тип һорай ҡуйҙы? Ҡатын өндәшмәй генә баш сайҡаны.

- Был фотола ул түгел, - тине хәҙер ҡарт ҡоро тауыш менән. - Бүтән һорауың юҡмы? Хушлашабыҙмы?

- Зинһар өсөн... - Сараның тауышы ҡалтырап сыҡты. - Һөйләгеҙ, ниндәй кеше ул? Мин эҙләгән кешеме, юҡмы, асыҡларға ярҙам итегеҙ.

- Гасанович яҡын дуҫтарымдың береһен төрмәгә ултыртты. Аҡса махинацияһы. Архзащита, имеш! Кем һин?

- Мин дә шул аҡса менән бәйле... Бер танышым уға ныҡ ышана. Интернет аша танышҡандар. Миңә Гасанович тураһында ныҡыраҡ белергә ине. Ул ҡайҙа йәшәй?

- Ҡайҙа? Уныһын белмәйем. Кешеләрҙең ҡайҙа йәшәгәндәре менән ҡыҙыҡһынмайым. Бына хәҙер һинең менән таныштым. Тик ҡайҙа йәшәүең миңә кәрәкмәй. Әйттем бит фото уныҡы түгел, - тине ҡарт һәм ҡапыл тумбочка өҫтөндә ултырған араҡыға эйелде. - Архяҡлаусы, минең тәҡдимгә нисек ҡарайһың? Әйҙә, һуғайыҡ! Аркаша йырлар, теләһәң, һин дә ҡушылырһың.

Ҡарт нимәләр белә, тик әйтеп бөтөрмәй. Ә Сара үҙһүҙлеләрҙең береһе, алдына алғанын эшләмәйенсә ҡуймаясаҡ. Нисек тә Трофимычтың телен асырға кәрәк. Ул баш ҡаҡты.

- Мин ҡаршы түгел, Аркадий Трофимыч.

Аш бүлмәһенә инеп ултырғас, ҡарт йөнләнде. Ғолт-ғолт тейешләһен йотҡас, йәнә үҙе тураһында һөйләргә тотондо.

- Мин үҙем урлашҡан өсөн ике тапҡыр ғына ултырып сыҡтым. Йылғыр инем мин! Ә иптәштәрем бер нисә тапҡыр ҡаптылар. Шул... Бик һирәктәре генә әйләнеп ҡайта алды. Улар ҙа хәҙер теге донъяла. Төрмәнән ҡайтҡас, әле бер талай бандиттарҙан ҡасып йөрөргә лә тура килде, һаман исәнмен, - ҡарт тешһеҙ ауыҙын асып көлдө. - Тәк, һине Ганс ҡыҙыҡһындыра, ә? Этем белә, һин эҙләгән Гансмы икән ул? Үҙеңде архяҡлаусы тип таныштырыуың оҡшаны, he-he-he... Һин араҡы менән сауҙа итмәйһеңме? Улай булғас, ни ысағыма һиңә Гасанович, йәғни Ганс?

Ҡарт иҫерҙе шикелле. Булманы былай булғас, тип, Сара урынынан торҙо.

- Тукта, мин бит джентельмен, ихатаға тиклем оҙатып ҡуйыйым.

- Юҡ-юҡ, аяғығыҙҙа саҡ баҫып тораһығыҙ.

-Улай булғас, миңә мотлаҡ саф һауаға сығып әйләнеү кәрәк, - тип Трофимыч ҡулына таяғын алды. Эйәртенешеп урамға сыҡтылар.

- Мин Гасановичтың ҡайҙа торғанын белмәйем, ә ҡатындары күп икәнен беләм. Бисә-сәсә менән шаярырға ярата, - ҡарт кет-кет көлдө. - Аҡсаларын бигерәк тә. Тағы ла эшләгән урынын беләм, - Трофимыч ҡаршылағы иҫке йортҡа ымланы. - Бына ошонда. Ярым емерек йортта нимә бар икән тип аптырайһыңдыр. Аҫта - подвалда ҙур цех эшләй.

Сараның ҡолағы ҡарп итеп ҡалды.

- Ниндәй цех?

- Иҫерткес етештерәләр. Араҡы. Легаль түгел, әлбиттә, - ҡарт көлөмһөрәне. - Ләкин өҙләкмәй эшләп ултыралар, уны ҡайҙалыр ҡыйыҡлаусылар ҙа бар, he-he-he... Ҡысылып йөрөмә, архяҡлаусы, аңланыңмы? Ганс Гасанович - цех хужаһының уң ҡулы. Ҡарауылсы. Хужаһы кем, белмәйем. Хәйер, белһәм дә, әйтмәйем. Әгәр ҙә һине цех ҡыҙыҡһындыра икән, өмөтөңдө өҙ. Унда анһат ҡына инеп булмай. Пароль кәрәк.

Сараның цехта эше юҡ. Уға Ганс тураһындағы дөрөҫлөктө белергә кәрәк.

- Элек мин дә иркен инеп йөрөй торғайным. Хәҙер урап үтәм. Күптән булғаным юҡ. Хатта ул саҡтағы паролен дә хәтерләйем. Балыҡсы өйҙәме?

"Тағы мәғәнәһеҙ хәбәр һөйләй башланы..." Сараның ҡыҙыҡһыныуы һүрелде. Ул хушлашты ла машинаһына ынғайланы.

- Архяҡлаусы, тукта! - Сара боролоп ҡараны. Трофимыч уға кире кил, тип ҡул болғаны. Теләмәһә лә, Сара ҡарт яғына атланы. Трофимыч хәйләкәр йылмайҙы. - Мин һине тегеләй ҙә, былай ҙа һынап ҡараным. Кем икәнеңде барыбер төшөнә алманым. Йә, ярай. Миңә ул мөһим дә түгел. Киттек!

- Ҡайҙа?

- Цехты күрһәтәм. Ганс менән тикторғандан барып таныша алмаҫһың. Ә мин һиңә ярҙам итәм.

Сара йәнә ҡарттың һүҙен йыҡманы, артынан эйәрҙе.

"Мең ыуаҡ-төйәк" тип аталған магазин тапҡырына килеп еттеләр. Эстә уң яҡҡа бәләкәй генә коридор. Шул яҡҡа боролдолар ҙа, аҫҡа подвалға төштөләр һәм тимер ишек ҡаршыһында туҡтанылар. Трофимыч төймәгә баҫты. Ишек башындағы быяла уйым яҡтырҙы, тауыш ишетелде.

- Кем унда?

- Электрик бармы?

"Пароль", тип уйланы Сара. Ишек үҙенән-үҙе асылып китте. Саҡырылмаған ҡунаҡтар эскә үтте. Унда Трофимычты ерән мыйыҡлы бер ир ҡаршы алды.

- Трофимыч, күптән булғаның юҡ ине. Ниндәй елдәр ташланы?

- Шулай, Артур. Килеп сыҡтым. Бына өс туғаным ҡаҙаға юлыҡты. Бизнесы янды. Уның клиентураһы бар. Шуға ике яҡҡа файҙалы алыш-биреш булыр, тигән уй ошонда килтерҙе.

Бер урында өйөлөшөп ятҡан коньяк этикеткаларын күреп, Сараның иҫе китте. "Легаль булмаған шарап һатыу менән шөғөлләнәләр! Импорт итеп әҙерләйҙәр! Быларҙың эштәре хәтәр!" Ошондағы ниндәйҙер аферист әсәһенең башын әйләндергән!

- Ганс Гасанович ҡайҙа? - тип һораны Аркадий Трофимыч.

- Бөгөн булмаҫ. Хужаның заданиеһын һәйбәт үтәне, ял алды.

"Юҡ икән юҡ, был икенсе Ганстыр, - тип уйланы Сара. - Өфөләме икән мин ҡыҙыҡһынған Ганс?" Ары үткәрмәнеләр, саҡырылмаған ҡунаҡтар сығырға боролдо.

Тышҡа сыҡҡас, Трофимыч менән бик йылы хушлаштылар.

- Һин бында тағы ла килә алаһың, әлбиттә. Тик яңғыҙ йөрөмә, - тине ҡарт.

Сара өйөнә бер аҙ тынысланып ҡайтып инде. Ганс Гасанович тигәндәренең әсәһе менән хатлашҡан Ганс түгеллегенә ышанысы артты. Ни генә тиһәң дә, аферистар үҙҙәренең ҡорбандарын алыҫ тарафтарҙан эҙләй, статистика шул турала һөйләй. Ләкин иртә тынысланған булып сыҡты, бер нисә көндән борсолоуы тауышына сыҡҡан әсәһе шылтыратты.

- Ҡыҙым, карточкалағы аҡсам юҡ булды бит!..

- Нисек юҡ булды?

Бәҡтиһәң, Ганс тағы ла уның карточкаһы аша икенсе кешегә аҡса күсерткән. Шул арала Линиза ханымдың бөтөн аҡсаһы һыпырып алынған. Ганс шылтыратҡан: "Ашыҡма, бында ниндәйҙер яңылышлыҡ, үҙем хәл итәм",- тигән, тик өс көн инде телефонын алмай. Полицияға хәбәр итергәме, көтөргәме?

- Һин уға һаман ышанаһыңмы, әсәй?

- Нисек тип әйтергә. Ул бит йәш-елкенсәк түгел...

- Осона сығырҙар, полицияға яҙып бир.

- Уй, ағайың белһә, ояты ни тора!..

- Ярай, көймә. Үҙем асыҡлап ҡарайым башта.

Сара иртән тороу менән араҡы етештереү цехына китте. Хәҙер ул юлды яҡшы белә, тиҙ генә барып етте. Шартлы паролде әйтеүгә, ишек асылып китте. Трофимыч менән барғанда күрешкән ерән мыйыҡлы ҡарауылсы ҡаршы алды. Ул Сараны шундуҡ таныны:

- Был һеҙме?

- Миңә Ганс Гасанович кәрәк! - тине Сара ҡиҫкен генә.

- Сабыр итегеҙ, килеп етер, - шулай тине лә ерән мыйыҡ кемгәлер шылтыратып һөйләште һәм трубканы Сараға һуҙҙы.

- Һеҙгә Ганс Гасанович ни өсөн кәрәк? - тине теге яҡтан тауыш.

- Мин Урал аръяғында магазин асырға йыйынам.

- Ганс магазин асышмай, - тине тауыш.

- Беләм, мин ышаныслы партнерҙар эҙләйем. Аҡсаны ҡайҙа һалғанды белергә тейешмен, аңлатыусыһы кәрәк.

Һөйләшеү өҙөлдө. Теге әҙәм ерән мыйыҡҡа ҡабат шылтыратты һәм ҡарауылсы баш ҡағып тыңлағас, Сараға ымланы ла, ары алып китте. Эргәлә генә бер нисә ир баш баҫып эш менән мәшғүл - бер ерҙә шыйыҡса ҡоялар, икенсе урында этикетка йәбештерәләр. Ҡарауылсы уны бәләкәй генә бүлмәгә индерҙе, шунда көтөргә ҡушып, үҙе юҡ булды. Сара өҫтәл өҫтөндәге ҡағыҙҙар араһында соҡона башланы, тартманы асты һәм бер блокнотты килтереп сығарҙы. Һандар, исемдәр, паролдәр, логиндар. Ҡатын һикереп тороп баҫты, арыу ғына документ ҡулына килеп эләкте түгелме? Блокноттан мәғлүмәттәр соҡоп сығарырға була, уға артығы кәрәкмәй ҙә. Тимәк, был тирәнән йәһәтерәк тайырға! Бер-ике аҙым яһауға, кемдер ҡаршыһына килеп баҫты.

- Мине һоранығыҙмы?

Ҡаҡса ғына кәүҙәле ир баҫып тора ине, бер күҙе ҡыҫығыраҡ, бит тиреһе тартышҡандай, күҙен селт-селт йомоп ала. Сара терт итеп ҡалды. Әсәһенең: "Ганс үҙе килә алманы, ярҙамсыһын ғына ебәрҙе", - тип әйткәне иҫенә килеп төштө.

- Бик ныҡ текләйһегеҙ, - тине ир.

"Был кәрләне мин үҙем йыға һуға алам, түгелме?" тигән уй үтте ҡатындың башынан. Сара турайыбыраҡ баҫты, сайттан алған фотоны тегегә табан һуҙҙы.

- Был кешене таныйһығыҙмы?

- Тәк... Һин бында эш буйынса түгел, - тине Ганс ҡаты тауыш менән. - Эҙең булмаһын, юғал!

- Мин эш буйынса, - тине Сара. - Һеҙҙең нисә сайтта ошо фото ҡуйғанығыҙҙы, нисә псевдоним менән йөрөгәнегеҙҙе, күпме ҡатын-ҡыҙҙы талағанығыҙҙы белһәләр, ҡайһы бер органдар бик ҡыҙыҡһынасаҡ.

- Нимә? - Ганстың ауыҙы мыҫҡыллы ҡыйшайҙы. - Бер күҙәнәкле хайуан, миңә янап маташаһыңмы?

- Ганс! Мин асыҡ әйтәм, Линиза ханымға аҡсаһын кире һалмаһағыҙ, аҙағы бик үкенесле бөтәсәк. Уның аша аҡса ебәрмәнем, иптәше булып, уның үҙе менән күрешмәнем, тимәксеһегеҙме?

Ганстың йөҙө ҡарайҙы, күҙҙәре аларҙы.

- Иҫкәртәм, имен саҡта...

- Мин ID адресты асыҡланым. Тап ошо компьютер аша бер нисә ҡатын-ҡыҙҙан аҡсаһын урлағанығыҙҙы ла беләм.

- Мин бер тапҡыр киҫәттем, аңламаның. Булды. Бөтәһен дә ошонда теүәлләйбеҙ. Ас сумканды! - Ганс шап итеп ишекте япты. - Документтарыңды, тием!

- Инде мине ҡурҡытмаҡсыһығыҙмы?

- Хәҙер миңә бик кәрәк бер документ тултыраһың, бүтәнсә ҡотолоу юҡ, - ир уның беләгенән матҡып тотоп алды. - Миңә янағандар күп булды. Беләһеңме әле улар ҡайҙа? Беләһеңме ҡайҙа? Бынан тере сығырға өмөтләнәһеңме, анра бисә!

Сара бер мөйөшкә осоп барып төшкәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Ганс ҡабат эргәһенә килеп еткәнсе, ул кеҫәһенән газ баллонын сығарып өлгөргәйне инде,

бар көсөнә тегенең битенә газ һиптерҙе.

- Ох-х-х!.. - Битен ҡаплап, йыртҡыстай үкереп, Ганс иҙәнгә ултыра төштө. Сара йән-фарман тышҡы ишеккә ташланды. Гасановичтың яман итеп аҡырғаны ишетелде.

- Тотоғоҙ! Ысҡындырмағыҙ!

Урамға сығып өлгөргән Сара машинаһына табан йүгерҙе, тоҡандырып ҡуҙғалып та китте. Ул подвалдағы хәлдәрҙе полицияға хәбәр итергә тейеш! Шул саҡ үҙе артынан бер түгел, ике машинаның ҡыуа төшкәнен аңғарҙы. Сара тимер атын бар хәленсә ҡыуҙы. Тегеләр шәп машинала, һаман яҡынлашалар. Бына береһе арттан килеп төрттөрҙө, "туҡта", тип ишаралай. Сара бирешмәне, тағы алға сыҡты. Йәнә китте уҙыш. Тегеләр Сараны ситкә ҡыҫырыҡлапмы ҡыҫырыҡлайҙар, бер заман ул ҡаланан сыға башлауын аңғарҙы. Тегеләр үҙ эшенең оҫталары шул, хәҙер бер ҡараңғыраҡ, ышығыраҡ урында ҡамаясаҡтар. Сара ҡурҡыуҙы ла онотто, тырыша торғас, телефонын ҡулына эләктерҙе, тейешле номерҙы тапты: "Ағайым алһа ғына ярар ине!" Алды.

Бышлыҡҡан Сара үҙен бандиттар баҫтырыуын саҡ-саҡ әйтә алды. Ағаһы унын ҡай тирәлә икәнен һорашты, тынын булырға ҡушты. "Ярҙам килеп етер! Туҡтама, пипелдәт! Берәйһе иғтибар итер!" Тағы килеп бәрҙереүҙәренә ҡулдан телефон төшөп китте. Сара алыҫтараҡ  патруль машинаһын шәйләне. Иғтибар итерҙәрме, юҡмы, һәр хәлдә, пипелдәтеп үтеп китте. Ганстың әшнәләре уны йәнә бер боролошҡа этеп индерҙеләр. Бер ни тиклем ваҡыттан уҙышҡан өс машинаға ике экипаж эйәрҙе. Уларҙың сиренаһы бандиттарҙы албырғатты шикелле, саҡ ҡына арттараҡ ҡалдылар. Юҡ, киләләр. Әһә, юл сатына килеп еткәс, бер машина һулға ҡайырылды. Бер патруль машинаһы унын артынан елдерҙе. Ҡыуғынсыларҙың икенсе машинаһы иһә Сараны жыйтлатып уҙып китте. "Ә-ә-ә-ә, ҡурҡаҡтар! Шулаймы ни? Ҡасып ҡотолмаҡсыһығыҙмы? Инде ҡотолоу юҡ һеҙгә!" Полиция машинаһын күреү Сараға ҡыйыулыҡ өҫтәне. Хәҙер йөрөтмән ханым бандиттарҙың машинаһынан тороп ҡалмаҫҡа тырышты. Эйе, ҡаҫҡын сифатынан хәҙер ул үҙе эҙәрлекләүсегә әйләнде! Арттағы патруль машинаһы Сараны ҡыуып етте. Туҡтарға ҡушалар? Эх, бандит машинаһы эҙ яҙлыҡтыра бит былай булғас! Ләкин буйһонмай сара юҡ. Сара юл ситенә барып туҡтаны. Ҡатын ауыҙ асып һүҙ әйтергә лә өлгөрмәне, эргәһенә полиция хеҙмәткәре килеп баҫты.

- Гражданка, ниңә фарманды тыңламайһығыҙ! Ни өсөн туҡтаманығыҙ?

- Мине... Мине баҫтыралар! Бандиттар!

- Сара апай! Тағы ла һеҙме? - Эргәһенә килеп баҫҡан икенсе инспектор әлеге лә баяғы Шамил танышы ине. Улар үҙ күҙҙәренә үҙҙәре ышанмағандай, текләштеләр.

- Сара апай, тағы ла һеҙ! Шайтан! Нимә булды һеҙгә? - Шамил бер яңағын усланы.

- Зинһар, тиҙерәк тотоғоҙ! Ҡасып ҡотолалар!

- Мотлаҡ тоторҙар. Рация аша хәбәр ителде. Хәҙер һөйләгеҙ, был юлы ниндәй мажараға тарынығыҙ?

**(Дауамы бар).**

АФАРИН!

# СИБАЙҘА...

## премьера артынан премьера!



**Былтырғы йылда республика театрҙары "Берҙәм Рәсәй" сәйәси партияһының "Бәләкәй Ватан мәҙәниәте" проекты буйынса тамашалар ҡуйҙы. Шулар араһында Сибай концерт-театр берекмәһе бер-бер артлы ике премьера менән сығыш яһаны. Шуларҙың һуңғыһы хаҡында һүҙем.**

Һәр ваҡыт яңылыҡ эҙләгән, актуаль темаларҙы ғына һайларға тырышҡан һәм милли фольклор нигеҙендә эшләүҙе үҙ йүнәлеше итеп алған берекмә был юлы ла асылына хыянат итмәне. Мюзикл жанрын һынап ҡараны ул концерт-театр артистарында. Һәм "Серле мираҫ" тип исемләнгән әҫәр сюжетына рухи мираҫ булыр йыр-моңдарҙы, йолаларҙы, матди мираҫ булыр ер-һыуҙарҙы, ҡаҙылма байлыҡтарҙы, аҫабалыҡты киләһе быуындарға тапшырыу мәғәнәһен һалды. Бында туған тел, быуындар бәйләнеше, экологик афәттәр һәм йәштәрҙе дөрөҫ тәрбиәләү кеүек донъяуи мәсьәләләр ҙә яҡтыртылды. Йәғни, мюзикл төрлө быуаттарҙа йәшәгән милләттәштәребеҙҙең портал аша йәки ҡан хәтере аша йәки эске аң аша бәйләнештә булып аралашыуын, хатта мөхәббәт хистәрен татый алыуын күрһәтте.

Премьера хаҡында Сибай концерт-театры берекмәһе директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Айбулат Миңлеғәле улы Ҡотошов бына нимә тине: "Беҙҙең коллектив өсөн мюзикл яңы жанр, әммә ошондайыраҡ стилдә эшләгәнебеҙ булды. Музыка ла, драма ла, хореография ла, опера сәнғәте лә ҡушылған әҫәрҙе ҡурҡмайынса сәхнәгә сығара алдыҡ, сөнки бөтөн был өлкәләрҙе лә башҡара алыусы һәләтле артистарыбыҙ бар. Төп ролдәрҙәге - "Сулпан" балалар театры актеры Илнур Сәлимгәрәев менән филармония вокалисы Әлфир Замановты ғына алайыҡ. Егеттәр ошо жанр өсөн тыуған һымаҡ уйнанылар! Актер оҫталығы ла, вокал һәләте лә, милли колоритлы характерҙар ҙа... тамашасыны әсир итте, тип, ғорурлыҡ менән әйтә алам.

Мюзиклдың ижади төркөмө баш ҡалабыҙҙан саҡырылды. Сценарийҙы Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты Миләүшә Ҡаһарманова яҙҙы. Сәхнәгә иһә Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Сулпан Аҫҡарова ҡуйҙы. Сәхнә биҙәлеше рәссамы Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры, "Алтын битлек" Бөтә Рәсәй милли театр премияһы лауреаты Альберт Нестеров, композиторы Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Илшат Яхин, костюмдар буйынса рәссам Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Наталья Степанова, кейемдәрҙе тегеүсе Ольга Михайлова, балетмейстер Александр Родионов булды, видеоконтентты Айҙар Йосопов эшләне. Яңы команда, әлбиттә, яңылыҡ алып килде, Сибай сәхнәһенә өр-яңы һулыш бирҙе. Сәхнә биҙәлеше, 3D проекция, уңышлы хореография, костюмдар төрлөлөгө һәм артистарыбыҙҙың ошо яңылыҡтан илһамланып, ҡанатланып эшләүе мюзиклды тамашасыға юғары кимәлдәге әҫәр булараҡ тәҡдим итеү мөмкинлеген бирҙе".

Тамашаның режиссеры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Сулпан Рәил ҡыҙы Аҫҡарова ла премьера буйынса үҙ фекерен белдерҙе: "Мюзиклда яҡтыртылған темаларҙан башлағанда, быуындар бәйләнеше һәм быуындарҙың берберенә рухи мираҫ ҡалдырырға тейеш булыуы тураһында һөйләйбеҙ әҫәрҙә. Мәҫәлән, бөгөн беҙ балалар туған телендә һөйләшмәй, тип зарланабыҙ. Ни өсөн һөйләшмәйҙәр һуң? Сөнки беҙҙең быуын уларға туған телдә һөйләшеү ҡөҙрәтен тапшырмаған. Беҙгә оло быуын тапшырған бит, ә беҙ шуны үтәмәгәнбеҙ. Сиселеш ошолай килеп сыға, шулай бит? Бына шул хаталарҙы күрһәтәбеҙ мюзикл темаһында. Унан экологик проблемаларҙы ла күтәрәбеҙ. Мәҫәлән, Хан улы мәңгелек байлыҡты тауҙарҙа, урман-ҡырҙарҙа, һыуҙарҙа эҙләй. Ер-һыуҙарҙың алтын-көмөшө, ер аҫты яҡтылыҡтары, ағастары, кейек-ҡоштары һәм башҡалары бөтмәй торған мөлкәт икән тип уйлай. Әммә тәбиғәт уға был байлыҡтарҙың әҙәмдәр тарафынан таланыуын, тәләфләнеүен һөйләй. "Ҡәҙерләй белмәгәндә, беҙ мәңгелек түгел", - тиҙәр улар... Бына ошо хәүефле сигналды ла халыҡҡа еткереү, етәкселәргә ишеттереү - мюзикл маҡсаты. Һәм, әлбиттә, иң үҙәктә мөхәббәт. Яратыу хисе йәш йөрәктәрҙе төрлө быуаттар, ваҡыт һәм заманалар аша ла табыштыра ала. Уларҙы бер-береһенә ата-бабаларҙан ҡалған милли мираҫ булыр ҡан хәтере тарта. Бына шундай фәлсәфәүи, мөғжизәүи һәм моңло премьера булды Сибайҙа".

Мюзиклдың тәүге тамашасылары Сибай һаулыҡ һаҡлау өлкәһенән "ҡыҙыл зона"ла эшләүсе медицина хеҙмәткәрҙәре булды. Артистар табиптарҙы, шәфҡәт туташтарын сәскәләр менән ҡаршы алды һәм был еңел булмаған көндәрҙәге фиҙаҡәр хеҙмәттәре өсөн оло рәхмәт белдерҙе. Был тамаша медицина хеҙмәткәрҙәренә Сибай концерт-театр берекмәһенең һәм ҡалабыҙҙың һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәре профсоюзының бүләге булды. Коллегаларын Рәсәй һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәре профсоюзының Башҡортостан ойошмаһы рәйесе Рауил Мағрүф улы Халфин ҡотланы.

Тамашаға коллегаларын ойоштороп алып килеүсе Сибай ҡала һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәре профсоюзы рәйесе Басир Марат улы Шәрипов та, мюзиклды тыңлап сыҡҡандан һуң, тәьҫораттары менән бүлеште: "Иҫ киткес күренеш булды! Ҡайһы урында ҡул сабырға икәнде лә белмәне тамашасы. Сөнки сәхнә беҙҙе йотто, ундағы ваҡиғалар әйләнеше аҙағынаса арбап, ихтыярһыҙ итеп тотто. Былдай сағыу, яңы форматтағы, заманса тамашаның Сибайҙа булғаны юҡ ине әле. Сәхнә биҙәлеше, видеокүренештәр, яңы костюмдар айырыуса иғтибарҙы йәлеп итте, тамашаның жанры ла беҙҙең өсөн ят һәм ҡыҙыҡлы - мюзикл. Шул уҡ ваҡытта заманса алымдарҙы файҙаланып, мәңгелек темаларҙы сағылдырыуҙары ла аңлашылды. Йәғни, яңылыҡ тип артыҡ күсәрҙән ысҡынып китмәгәндәр, мәғәнә лә, фәһемлелек тә, тәрбиәүи йүнәлештәр ҙә нигеҙҙә ҡалған. Йомғаҡлап әйткәндә, Урал аръяғы өсөн был үҫеш, бейеклек, юғары кимәл күрһәткесе булды".

Сибай концерт-театр берекмәһенең "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Бәләкәй Ватан" проекты буйынса финансланған ике премьераһы ла шулай оло ҡаҙаныш булып ҡабул ителде тамашасы тарафынан. Һәм быға аптырарға ла түгел. Республикалағы берҙән-бер башҡорт телле балалар театры "Сулпан" һәм халыҡсанлығы менән айырылып торған филармония һәләтле коллектив берекмәһе булып ойошҡан. Нисә йылдар үҙ мәҙәни усаҡтары һәм сәхнәләре булмағанда ла улар тиҫтәләгән программалар ижад итеп, Урал аръяғын ғына түгел, республика һәм унан ситтәге өлкәләрҙе лә рухи аҙыҡ менән тәьмин итеп йәшәй. Һәм тиҙҙән яңы йорттарының ишеген асыуға ла, унда халыҡты йыйып ҡыуандырыуға ла өмөт итә Сибай артистары. Был хыялдары ла бына-быңа тормошҡа ашмаҡсы.

Быңа шулай Сибайҙа - премьера артынан премьера! Еңел булмаған осорҙа халыҡтың рухын күтәреү, яҡты киләсәккә өмөт уятыу һәм уны матурлыҡтан, илһамдан айырмау өсөн барыһын да эшләй Сибай концерт-театр берекмәһе. Уларҙың ниәте изге һәм саф. Мәҙәниәт ул шулай булырға тейеш тә.

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# АТЛАП ЙӨРӨШӨҢ...

■ Кешенең нисек атлап йөрөүе уның "эске донъяһы" тураһында ла "һөйләй". Портсмут университеты ғалимдары 29 кешенең психоэмоциональ портретын тикшергән һәм һуңынан уларҙың барыһын да атлатып ҡараған. Тәндең өҫкө һәм аҫҡы өлөшөнә махсус датчиктар беркетелгән. Уларҙы тикшереп ҡарағандан һуң, шул асыҡланған: агрессив кешеләр ҡулдарын ныҡ һелтәп, ныҡ хәрәкәтләнеп атлай икән.

■ Иҙәнгә төшөп киткән ризыҡты тиҙ генә алһаң, бер нәмә лә булмай, уны ашарға ла ярай, тип иҫәпләй берәүҙәр. Быны Ратгерс-Нью-Брансуик университеты ғалимдары ла тикшереп ҡараған. Улар ҡарбуз, икмәк, майлы икмәк, йәбешкәк кәнфит алған һәм уларҙы балаҫҡа, керамик плитаға, ағас һәм керамик иҙәнгә төшөрөп ҡараған. Иҙән дә, балаҫ та алдан сальмонеллаға оҡшаш бер бактерия менән "эшкәртелгән". Ризыҡтың быҫраҡта 1 секундтан 5 минутҡа тиклем ятҡан. Лаборатор тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ысынлап та, ризыҡты төшөп киткәс уҡ алһаң, ул бактериялар менән зарарланып өлгөрмәй икән. Шулай уҡ уның ҡайҙа төшөүе лә мөһим икән. Иң хәүефһеҙе балаҫ булған. Ризыҡтың еүешлек кимәлен дә иҫәпкә алырға кәрәк, мәҫәлән, ҡарбуз тиҙ быҫранған, бактериялар унда шунда уҡ "йәбешеп" киткән. Ғалимдар шуға ла "5 секунд ҡағиҙәһе"нең өлөшләтә эшләүен дәлилләгән, ҡайһы бер бактерияларға ризыҡҡа күсеү өсөн секунд та етә.

■ "Совет спорты" баҫмаһы Zee News сайтына һылтанма яһап, һимеҙ кешеләргә фитнесты С витамины ҡушылған аҙыҡ өҫтәмәләре алыштыра ала, тип яҙа. Колорадо университеты ғалимдары ошондай һығымтаға килгән. Был файҙалы витаминды даими ҡулланыу йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына күнегеүҙәр яһаған кеүек тәьҫир итә икән. Тулы кәүҙәле кешеләрҙә эндотелий аҡһымы әүҙемлеге һөҙөмтәһендә ҡан тамырҙары эшмәкәрлеге боҙола, был иһә йөрәк менән бәйле проблемаларға алып килә. Был аҡһымдың әүҙемлеген даими спорт менән шөғөлләнеү генә түбәнәйтә ала. Шуға ла ғалимдарҙың яңы асышы бындай категория кешеләр өсөн еңеллек килтерәсәк. С витамины ҡан тамырҙары эшмәкәрлеген яҡшырта. Һис юғында, С витаминын ҡабул иткәндән һуң организмға дәрт өҫтәлеп, кеше үҙе лә һиҙмәҫтән күнегеүҙәр эшләй башлауы ла бар. Шулай уҡ Швейцария ғалимдары ла был витамин спортсылар өсөн кәрәкле, тип иҫәпләй.

■ Үҙҙәрен агрессив тотҡан ир-егеттәрҙең үҙ-үҙенә ышанысы түбән була. Дөйөм алғанда, бөтөн ир-атҡа ла ирҙәрсә ҡылыҡтар, мәҫәлән, үҙен хәүеф аҫтына ҡуйыу, психоактив матдәләр ҡулланыу, агрессияға бирелеү хас. Атлантаның ауырыуҙарҙы контролдә тотоу һәм профилактикалау үҙәге тикшеренеүселәре үҙен ысын ир-егет итеп тоймаған ир-аттың ҡылыҡтарын тикшереп ҡараған. Һынауҙарҙа 18 йәштән 50 йәшкә тиклемге 600 кеше ҡатнашҡан. Улар үҙҙәренең ҡылыҡтары тураһында һөйләгән, уның фекеренсә, ысын ир-егет ниндәй булырға тейеш тигән һорауға ла яуап биргән. Ғалимдар асыҡлауынса, кем үҙен етерлек кимәлдә ҡыйыу һәм көслө тип иҫәпләмәй, улар күпкә агрессивыраҡ булған. Ундайҙар үҙенә ҡорбан табып, уға зыян килтереүҙән дә тартынмай, алкоголде лә йышыраҡ ҡуллана.

ФАРАЗДАР

# ХӘЙЕРЛЕГӘ ЮРАЙЫҠ



**(Башы 1-се биттә).**

Ә фараздар, күҙаллауҙар һәм юрауҙар төрлө-төрлө һәм ҡапма-ҡаршылыҡлы, сөнки күрәҙәселәр менән астрологтар ғына түгел, сәйәсмәндәр, иҡтисадсылар, ғалимдар һәм медицина белгестәре - бөтәһе лә кемуҙарҙан 2021 йыл "портретын" һүрәтләргә тырыша. Кемгә ышанырға? Шуныһы ҡыҙыҡ, уларҙың береһе лә киләсәктә коронавирус менән ни булырын барыбер әйтә алмай. Айырыуса астрологтар икеләнеү алдында, сөнки, ти улар үҙҙәре был хаҡта, былтырғы йылға йондоҙнамә күҙаллауҙарында пандемия хаҡында бер ни ҙә әйтелмәне, был планеталар, йондоҙҙар тәьҫирендә барлыҡҡа килгән күренеш түгел, шуға ла беҙ уларҙы күрмәнек; тимәк, пандемия йондоҙҙар тәьҫирендә түгел, ә кеше ҡулдары тарафынан тыуҙырылған афәт, тип белдерә астрологтар.

Ә бына исемдәре донъяға билдәле бөйөк күрәҙәселәр фараздарында был афәткә ишара бар. Мәҫәлән, Ванга 2021 йылда Рәсәйҙә халыҡ һанының күпләп кәмеүен, ләкин кешеләрҙең яман, хәүефле сирҙәрҙе еңеп сығыры өйрәнәсәген әйтеп ҡалдырған. Болгария күрәҙәсеһенән бер ҙә ҡалышмаған Мәскәү изге Матронаһы фараздары ла ҡыҙыҡлы: 2021 йылда Рәсәй ауыр осорҙан әкренләп ҡотола барыр, халыҡ-ара аренала илдең абруйы нығыныр, халыҡ күпләп дингә килер, тигән ул.

Ә бына уларҙан күп быуаттар элегерәк йәшәгән Нострадамус нисек күҙаллаған 2021 йылды? Тәү сиратта ул ҡороҡ, янғындар, һыу баҫыуҙар, төрлө ғәрәсәт кеүек тәбиғәт катаклизмдары көсәйеүен бик дөрөҫ фаразлаған. Кешеләр тәбиғәттең һәм ерҙең асыуын ҡабартасаҡ, тигән ул. Нисек кенә булмаһын, 2021 йылға Рәсәйҙең киләсәгенә ҡағылышлы күрәҙәселәрҙең фараздары бер урында тап килә: Рәсәйҙең ҡеүәте нығына барыр, ул көслө дәүләткә әүереләсәк һәм донъя күләмендә башҡа илдәрҙе ҡурсалаусы именлек үҙәге булып торасаҡ.

Ә шулай ҙа киләсәгебеҙ хаҡында бөгөнгө астрологтар ни уйлай? Үҙ фараздарын улар 2020 йылдың 21 декабрендә күҙәтелгән ҡыҙыҡлы һәм һирәк була торған астрономик күренеш - Юпитер менән Сатурндың "йөҙмә-йөҙ" осрашыуынан сығып дәлилләй. Тап ошо күренеш арҡаһында яңы йылдың тәүге айы ғинуар көсәргәнешле булырға оҡшай һәм уның иң ауыр көндәре 5-нән алып 18 ғинуарға тиклем көтөлә, ти улар. Был осорҙа дәүләттәр, сәйәси лидерҙар һәм монополист компаниялар-ара ҡапма-ҡаршылыҡтар көсәйер һәм был донъя иҡтисады хәлендә сағылыр. Кешеләргә был ваҡыт һаулыҡтарын һаҡлау мәсьәләләренә айырыуса иғтибарлы булырға, үҙҙәрен юл һәләкәттәренән ҡурсырға, сәфәр-сәйәхәттәрҙе сикләргә кәңәш бирелә. Астрологтар күҙаллауынса, 2021 йыл - донъя кимәлендә финанс көрсөгө йылы. Хәйер, был йәһәттән йондоҙнамә белгестәренең фараздары ҡапма-ҡаршылыҡлы һәм төрлөсә. Берәүҙәр, мәҫәлән, астропсихолог, биоэнергокорректор Тимофей Добродеев 2021 йыл бөтөн йондоҙлоҡ билдәләренә лә ыңғай үҙгәрештәр алып киләсәк, тип вәғәҙәләй. Йыл кешеләрҙе тормош мәғәнәһенә төшөнөргә, кешелеккә ебәрелгән бер генә һынауҙың да юҡҡа түгеллеген аңларға ярҙам итәсәк, ти ул. Сәйәсмәндәр иһә йылдың бынан алдағыһынан яҡшыраҡ булырына өмөтләнмәүен белдерә. Коронавирустың яңы штаммдары донъя кимәлендә иҡтисад көрсөгөн артабан киҫкенләштерәсәк.

2021 йыл аҡ төҫтәге металл Һыйыр йылының ындырышлылыҡ, бәрәкәт билдәһе тип нарыҡланыуы күнелгә йылы йүгертһә лә, халыҡ телендәге "Һыйыр тулаһа, аттан яман" тигәне хәүефләндерә. Ләкин күпселек астрологтар сәхифәләрендә, шул иҫәптән, Көнсығыш йондоҙнамәлә йыл хужаһы Үгеҙ булараҡ та ҡарала һәм был билдәнең көслө, һынауҙарға түҙем, ныҡышмал, ышаныслы һәм эшсәнлек сифаттары телгә алына. Рәсәйҙә ыңғай үҙгәрештәргә табан йүнәлеш аласаҡ яңы идара итеү системаһының нығыныуы бер нисә йылға һуҙыласаҡ, ләкин иң тәүге үҙгәрештәргә беҙ 2021 йылда уҡ шаһит буласаҡбыҙ, тип рухландыра оптимистар. Улар Рәсәй йәмғиәте йәҙәндә азатлыҡ, демократия, социаль ғәҙеллек, сифатлы медицина хеҙмәтләндереүе кеүек "социализм билдәләре"н күрергә теләй һәм быларҙың бойомға ашыу мөмкинлектәрен Һыуғояр билдәһендәге Юпитер-Сатурн планеталарының яңы циклы менән бәйләй. Хәйерлегә булһын, тип юрайыҡ әле беҙ ҙә!

**Фәүзиә ИШБИРҘИНА.**

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# ФӘҺЕМЛЕ ЯҘМЫШТАР

## Ғилем алыу

Фазыл бин Ғәним һөйләгәндәрҙән: Әбү Йософ ҡаты ауырып киткәс, Әбү Хәнифә уның хәлен белешергә килә һәм сирлене эргәһендәге кешеләр иштерлек итеп: "Үҙем үлгәндән һуң мосолмандар өсөн Әбү Йософ ҡалыр тип өмөтләнгәйнем... Әгәр ҙә халыҡ Әбү Йософто юғалтһа, уның менән ҡуша бик күп ғилемде лә юғалтасаҡ", - ти. Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте менән Әбү Йософ һауыға. Яҡындары уға Әбү Хәнифәнең һүҙҙәрен еткерә. Шундай юғары баһа ишетеп шат булған Әбү Йософ, инде Әбү Хәнифәгә ғилем эстәргә йөрөмәйенсә, үҙе генә хөкөм йыйылыштары үткәрергә булып китә. Имам Әбү Хәнифә иң яҡшы шәкертенең дәрескә йөрөмәгәненә аптырап, сәбәбен белешә. Имамдан алған белеменә таянып, Әбү Йософтоң хәҙер үҙе мәжлес үткәрә башлағанын әйтәләр. Шул саҡта Әбү Хәнифә бер шәкертен уға ебәрә һәм шундай һорау бирергә ҡуша: "Бер кеше тегенсегә күлдәген ҡыҫҡартырға бирә, бер нисә көндән алырға тип килһә, тегенсе, һин миңә бер нәмә лә ҡалдырманың, тип яуап бирә. Күлдәк эйәһе бик ҡаты асыуланып ҡайтып китә. Тағы ла бер нисә көндән йәнә тегенсегә китә. Был юлы оҫта уға әҙер күлдәк тоттора. Был осраҡта ниндәй шәриғәт хөкөмө сығарылырға тейеш? Әбү Йософтан: "Күлдәктең хужаһы тегенсегә аҡса түләргә тейешме, түгелме?"- тип һора. Әгәр ҙә Әбү Йософ: "Эйе, тейеш!" - тиһә, "Юҡ һин хаталандың!" тиң, әгәр ҙә: "Юҡ, тейеш түгел, тиһә, ул саҡта ла: "Һин хаталандың" тип әйт".

Шәкерт Әбү Йософ янына бара ла, имам ҡушҡан һорауҙы бирә. Әбү Йософ, тегенсегә барыбер аҡса түләргә кәрәк, тип яуап бирә. "Һин хаталандың", - ти уға шәкерт. Әбү Йософ бер аҙ уйланып тора һәм: "Ул түләргә тейеш түгел", - ти. Шәкерт йәнә: "Һин хаталандың", - тип имамдың һүҙен ҡабатлай.

Әбү Йософ бынан һуң уйлана, ахыр, мәжлесте ҡалдырып, имам янына барып килергә була. Әбү Хәнифә уны күреү менән шулай ти: "Аллаһ исеме менән ант итәм, һин тегенсегә ҡағылышлы хөкөмдә асыҡларға тип килдең, бүтән бер нәмә өсөн дә түгел!" Әбү Йософ шулай икәнен аңлатып, кеселекле баш эйә. Әбү Хәнифә һүҙен дауам итә: "Сөбхән Аллаһ! Нисек инде хөкөм йыйылыштары үткәреп, Аллаһ динен бүтәндәргә аңлатҡан кеше ошо ғына һорауға яуап бирә алмай?" Уңайһыҙланыуҙан нишләргә белмәгән Әбү Йософ имамдан ниндәй шәриғәт хөкөмө сығарылырға тейешлеген һорай. "Әгәр ҙә тегенсе күлдәк хужаһын кейемен ҡыҫҡартҡанға тиклем асыуландырған булһа, был осраҡта күлдәктең хужаһы хаҡын түләргә тейеш. Әгәр ҙә күлдәк ҡыҫҡартылғандан һуң уның хужаһы асыуланған булһа, ул саҡта түләү тейеш түгел." Ошо дәлилде тыңлағандан һуң Әбү Йософ: "Әгәр ҙә кеше алған ғилеме менән генә ҡәнәғәт ҡалып, артабан уҡырға кәрәкмәй тиһә, ул үҙенең ғалимлығы менән хушлашһын!" - тип әйтә.

**Фәрзәнә ФӘТИХОВА әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

УҠЫТЫУСЫ ҺҮҘЕ

**Республикала үткән 2020 йылды Башҡорт теле йылы тип нарыҡлау бик урынлы булды, күптән телебеҙгә иғтибар йәлеп итеү өсөн шулай эшләргә кәрәк булғандыр ҙа. Әйтергә кәрәк, ошоға бәйле республика, Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара кимәлдәрҙә ойошторолған төрлө белем биреү, мәҙәни саралар ярҙамында башҡорт телен һаҡлау, үҫтереү, даирәһен киңәйтеү йәһәтенән матур ғына эштәр атҡарылды.**

# ТЕЛЕН ҠӘҘЕРЛӘГӘН ХАЛЫҠ...

## үҙе лә ҡәҙерле булыр



Йылды йомғаҡлап, шуны әйтергә була: бөтә төр конкурстарҙа, конференцияларҙа әүҙем ҡатнаштыҡ. Уҡыусылар берәр-икешәрләп кенә түгел, ә класс менән интернет киңлектәрендә уҙған ярыштарҙа, "Бикбай уҡыуҙары" төбәк-ара ғилми-ғәмәли конференцияһында, Аҡмулла уҡыуҙарында, Мостай уҡыуҙарында, ижади конкурстарҙа үҙҙәрен һынап ҡараны һәм юғары һөҙөмтәләргә лә өлгәште.

14 декабрҙә билдәләнгән Башҡорт теле көнө айҡанлы гимназияла башҡорт теле һәм әҙәбиәте аҙналығын алдараҡ башлағайныҡ, уның сиктәрендә асыҡ дәрестәр, тел белгестәре менән осрашыуҙар ойоштороҙоҡ. Беҙ Фатима Мостафинаның тыуған төйәге Һамар өлкәһе белем усаҡтары менән бәйләнеш тотабыҙ һәм бик матур ғына хеҙмәттәшлек өлгөләребеҙ бар. Был аҙналыҡ барышында коллегабыҙ Эльвира Хәсәнова Ырғыҙ тулы булмаған мәктәбенең 5-8 класс уҡыусылары менән Zoom ярҙамында асыҡ дәрес үткәрҙе, туған телен өйрәнергә, белергә теләгән сит өлкәлә йәшәгән тиҫтерҙәре менән ихлас аралашты гимназистар.

Ғөмүмән, беҙҙең гимназияла "Башҡорт теле йылы" тип нарыҡламаған хәлдә лә һәр ваҡыт туған телебеҙҙе пропагандалауға, уны үҫтереүгә, йәш быуында уға ҡарата һөйөү тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бүленә килде һәм артабан да шулай дауам итер. Сөнки был эште бында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары ғына түгел, тотош коллективыбыҙ алып бара, уны һәр кем үҙенең бурысы тип иҫәпләй. Шуға күрә, бөтә кластан тыш саралар башҡортса үтә, балаларҙы туған телендә аралашырға күнектерәбеҙ, белем усағының социаль селтәрҙәрендәге биттәре лә башҡортса алып барыла һәм ундағы яңылыҡтарҙы уҡыусылар, атай-әсәйҙәр уҡый, тарата. Был да бөгөнгө заман талаптарын иҫәпкә алғанда бик әһәмиәтле эш.

Бына ошоларҙың барыһын да даими рәүештә атҡарылған көндәлек эшмәкәрлегебеҙ тип ҡарағас, Башҡорт теле йылы беҙҙең өсөн әллә ниндәй яңылыҡтар, ҙур үҙгәрештәр индерҙе, тип әйтә алмайбыҙ. Милли мәктәптәр өсөн ғәҙәти йыл һымаҡ үткәндер ул. Әлбиттә, республика буйынса балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә, дөйөм йәмғиәттә башҡорт теленә ныҡлай иғтибар йәлеп итеү өсөн күп эшләнде. "Интерактив башҡорт теле" кеүек бик ҡыҙыҡлы проекттар тормошҡа ашырылды, мобиль ҡушымталар, әсбаптар донъя күрҙе - былар барыһы ла телде башлап өйрәнгән кешеләр өсөн. Нимәләргә иғтибар бирәп еткерелмәне, тип әйтә алмайым, ә киләсәктә тағы ла ниҙәр эшләргә кәрәк, тигән саҡта мин М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты һәм Башҡорт дәүләт университеты кеүек уҡыу йорттарында башҡорт телен халыҡ-ара, донъя кимәленә сығарыу, танытыу йәһәтенән күберәк эштәр атҡарайыҡ, тип теләйем. Беҙҙең гимназия уҡыусылары кеүек, туған башҡорт телен яҡшы кимәлдә, хатта камил белгән һәләтле балалар күп республикабыҙҙа һәм бына улар юғары уҡыу йорттарының да ошо юҫыҡта тормошҡа ашырыласаҡ проекттарында ҡатнаша алыр ине, моғайын. Телде тәрәнәйтеп өйрәнә бит улар, шуға халыҡ-ара кимәлдә ойошторолған ниндәйҙер саралар, фәнни-ғәмәли конференциялар йә башҡа төр ҡыҙыҡлы проекттар уларҙың белемен камиллаштырыуға яңы мөмкинлектәр асһа, финанс ярҙамы күрһәтелһә, бер ҙә яҙыҡ булмаҫ.

Шулай уҡ башҡорт теле кабинеттарына йыһазландырыу йәһәтенән күберәк иғтибар һәм ярҙам булһын ине киләсәктә, тигән теләк тә бар. Бына мин бер нисә яңы мәктәптә барып күреп, хайран ҡалып ҡайттым: уҡытыусылар шул тиклем рәхәт, матур эшләйҙәр, ҡул аҫтында заман талаптарына яуап биргән бөтөн мультимедиа ҡорамалдары бар. Беҙгә лә, тиҫтә йылдар дауамында йәмғиәтебеҙгә кәрәкле милли кадрҙар әҙерләшкән белем усаҡтарына, шундай алдынғы уҡытыу алымдарын ҡулланырға барлыҡ уңайлы шарттар тыуҙырылған синиф бүлмәләре кәрәк. Әлбиттә, уҡытыусылар һәлдат шикелле: нимә ҡушһалар, шуны эшләргә, хатта арттырып үтәргә һәр ваҡыт әҙер торабыҙ. Ләкин талаптар артҡан һайын эшебеҙҙе еңеләйтер саралар ҙа күрелһен ине.

Башҡорт теле йылын йомғаҡланыҡ, әммә был өлкәләге эштәр ошо 12 ай менән генә сикләнеп, тамам булып ҡуймаһын. Республикала башҡорт теленә иғтибар кәмемәһен, һәр быуын вәкиле туған телен ҡәҙерләгән халыҡ ҡәҙерле булырын хәтерендә тотһон.

*Лилиә БИКБАЕВА,*
**Өфө ҡалаһы Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһының башҡорт теле уҡытыусыһы.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ДОНЪЯ МАЛЫНА АЛДАНМАЙЫҠ...

**Йәмғиәтебеҙ, ҡараштарыбыҙ, йәшәйешебеҙ тулыһынса фанилыҡҡа батып бара, яйлап ҡына, көндән-көн, ҡолдарға әйләнеп барабыҙ түгелме? Шулай тимәй булмай - аҡса, мал тип үҙебеҙҙең кеше икәнлегебеҙҙе онотабыҙ, туғантыумасаларыбыҙҙы, күрше-күләндәребеҙҙе, таныш-тоноштарыбыҙҙы рәнйетәбеҙ, алдарға, бурыстарҙы ҡайтармаҫҡа ла өйрәнеп алдыҡ.**

Ә балаларыбыҙ хаҡы? Бөйөк Ватан һуғышынан һуң да был тиклем етемдәр булмаған! Бөгөн дәүләтебеҙ халыҡ һаны кәмей, демографик афәт яҡынлаша, тип яр һалғанда, үҫмер генә ҡыҙҙарыбыҙ аборттар яһата. Был бит үҙ ғүмерендә бер тапҡыр ҙа әсәй булмаған кешенең һаулығы өсөн оло фажиғә. Өҫтәүенә, ундайҙарҙың киләсәктә бала таба алыуы икеле... Ярай, аңһыҙ бала белекһеҙлеге сәбәпле был аҙымға бара ти, ә бит аҡ халатлы табип барыһын да яҡшы белә! Ниңә ул ошо енәйәттән баш тартмай? Күрәһең, аҡса төҫө күҙҙәребеҙҙең нурын алып, тәңкә зыңы ҡолаҡтарыбыҙҙы тондороп, донъя малы зиһенебеҙҙе баҫып алғандыр...

Хәлҡыбыҙҙың быуаттар буйы һаҡлап килгән рухи ҡиммәттәре аҫты-өҫкә түңкәрелгәндә, әҙәм балаһы үҙенең хайуандарҙан нимә менән айырылғанын онотҡанда, бары, иманлы булайыҡ, тип өндәргә ҡалалыр. Сөнки, төптән уйлап ҡараһаң, Аллаһы Тәғәләнең барлығын, берлеген, Уның ғаләмдәге бөтә нәмә хаҡында ла белеүе һәм һәр ваҡыт беҙҙең ғәмәлдәребеҙҙе күҙәтеп барыуы хаҡында төшөнгәндәр, Раббыбыҙҙың беҙҙән Кеше булып ҡалыуыбыҙҙы һәм башҡаларға ҡарата ғәҙел мөғәмәләбеҙҙе талап итеүен аңлағандар йәмғиәтендә бөгөнгө заман ауырыуҙары урын тапмай. Хакимдар - ғәҙеллек, табиптар - һаулыҡ, ғалимдар белем һағында тора. Иманлы булайыҡ, дуҫтар! Киләсәгебеҙ һәм балаларыбыҙ хаҡына рухи яңырыу, рухи байыуы юлын һайлайыҡ.

**Ильяс САФИУЛЛИН.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# МАҠТАУҘЫҢ ДА ЗЫЯНЫ БАР

Маҡтағанды кем генә яратмай икән... Күптәр бер маҡтау һүҙе хаҡына аҡсаһын сарыф итергә, сәғәттәр буйы эшләргә, физик йәки тел менән рәнйетеүҙәренә түҙергә әҙер. Сираттағы "доза"ға мохтаж наркоман кеүек, маҡтау хаҡына теләһә ниндәй аҡтыҡ сиккә барыусылар ҙа осрай.

Маҡтау көсәү арҡаһында һинә даими рәүештә үҙ дәрәжәңде раҫларға тура килә. Хаталанған йәки кемдеңдер фекеренә ярашлы эш ҡылған һайын, һин үҙеңде башҡаларҙан "насарыраҡ" тояһың. Кәрәгенсә эшләмәнем бит, тип үкенәһең. Һәр ваҡыт үҙеңә: "Был яҡшымы икән?" - тигән һорау бирәһең. Ләкин барыһын да "иң яҡшы" итеп башҡарырға маташыусы кеше үҙендә башҡаларҙан "яҡшыраҡ булыу" ихтыяжын үҫтерә. Берене икенсеһенә өҫтәлә. Һәр өлкәлә башҡаларҙан уҙҙырырға тырышһаң да, һин үҙеңде кәм итеп тояһың, сөнки һәр ваҡыт, һинең фекеренсә, һинән яҡшыраҡтар табыла. Уларҙың аҡсаһы күберәк, абруйы ҙурыраҡ, матурыраҡ йорттарҙа йәшәй, физик яҡтан камилыраҡ, һәм башҡалар. Был һин бер нисек тә ота алмаған уйын.

Бала саҡта әлеңән-әле ата-әсәнең хуплауын яуларға күнегеп китәбеҙ. Шунан бойондороҡлоға әйләнәбеҙ. Ләкин ул саҡта маҡтау һәм шелтәләү контроль сараһы булған. Әгәр тыңлаусан һәм буйһоноусан булһаҡ, бүләк алғанбыҙ. Ҡаршылашһаҡ - шелтәләнгәндәр. Бүләкләү һәм яза биреү системаһы беҙҙең зиһенебеҙгә һәм үҙәк нервылар системаһына шул тиклем тәрән инеп ултырған - беҙ үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән һәр маҡтау йәки шелтәләүҙе яҡын ҡабул итәбеҙ. Бала саҡта һәм үҫмер саҡта ата-әсәбеҙҙе ҡыуандырырға тырышып, күпме ваҡыт сарыф итһәк, балиғ булғас та ғүмеребеҙҙең күп өлөшөндә башҡаларҙың күңелен күрергә маташабыҙ.

Һөҙөмтәлә шулай килеп сыға: әгәр ҡылығың "яҡшы" булһа, һин "яҡшы" булаһың һәм, әгәр хаталанһаң йәки "насар" эшләһәң, "насар" булаһың. Маҡтаған кешенең баһаһына тап килмәһән, һинә уны алдаған кеүек тойола. Һиндә ғәйеплелек тойғоһо барлыҡҡа килә. Шул рәүешле һине маҡтаусылар һинең менән идара итә. Уларҙың маҡсаттарына хеҙмәт иткәндә улар һинең талаптарыңды ҡәнәғәтләндерәсәк, ләкин улар һинең мөмкинлегеңдән артығыраҡты алырға теләһә, маҡтауҙан мәхрүм итеп, һинә баҫым яһай башлаясаҡтар. Сөнки улар, һинең үҙеңде ғәйепле тойоп, уларға ярар өсөн бөтә нәмәгә әҙер булыуыңды белә.

Тулыһынса азат һәм үҙ-үҙеңә ышанған кеше булырға теләһәң, был ҡапҡандан ҡасырға кәрәк. Маҡтауға мохтажлыҡ ғәҙәтенде емереү өсөн, башҡаларҙы үҙеңдән юғары итеп ҡуйыуҙан тукта. Үҙеңде уратып алыусыларға бер ваҡытта ла аҫтан өҫкә ҡарама. Шуны эшләй алһаң, һинә маҡтау артынан ҡыуырға тура килмәйәсәк; һине маҡтау менән аҙҙыра йәки ғәйеплелек тойғоһо һеңдереп, ҡурҡыта алмаясаҡтар.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



### 4 ЯНВАРЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Х/ф "Марья-искусница". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
6.25 Х/ф "Огонь, вода и... медные трубы". [0+]
8.00 Телеканал "Доброе утро".
10.05 Жизнь других. [12+]
11.05 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 Т/с "Султан моего сердца". [16+]
15.00 Премьера. "Угадай мелодию". Новогодний выпуск. [12+]
15.50 Ледниковый период. [0+]
19.30 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.20 Т/с Премьера. "Солнечный круг". [16+]
23.15 "Вечерний Ургант". Лучшее. [16+]
23.55 Х/ф "Роман с камнем". [16+]
1.45 Х/ф "Обезьяньи проделки". [12+]
3.20 Наедине со всеми. [16+]
4.05 Модный приговор. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00 Т/с "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". [12+]
7.45 Т/с "Сваты". [12+]
10.10, 14.50 "Сто к одному".
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.30 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.40 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
21.20 Т/с "Склифосовский. Реанимация". [12+]
0.40 Т/с "Ликвидация". [16+]
3.10 Т/с "Одесса-мама". [16+]

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.30 "Память сердца". [12+]**
**8.00 Х/ф "Последний король". [12+]**
**9.45 М/ф "Секретная служба Санта-Клауса". [6+]**
**10.15 Этно-краса. Дневник "Мисс International - Ufa-2020". [12+]**
**10.30 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.00 "Звездная гора новостей".**
**11.15 Х/ф "Карйондоҙ". [0+]**
**12.00 М/ф "Нурбостан". [0+]**
**12.15 "Ете егет". [12+]**
**13.00 "Дарю песню". [12+]**
**14.15 Байтус. [12+]**
**15.00 Большое путешествие большой семьи. [6+]**
**15.30 Ҡурай даны. [12+]**
**15.45 Колесо времени. [12+]**
**16.45 Посмотрим... [6+]**
**17.30 Юлдаш йыры-2020. [12+]**
**18.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Концерт группы "Каруанһарай" - 30 лет. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 "Яңы йыл-караоке". [12+]**
**23.15 Ҡурай-шоу. [12+]**
**1.15 Х/ф "Выжить в Арктике". [12+]**
**3.15 Спектакль "Эх, холостяки, холостяки". [12+]**
**4.45 Х/ф "Ургала". [12+]**

### 5 ЯНВАРЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.05, 6.10 Х/ф "Огонь, вода и... медные трубы". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
6.40 Х/ф "Золотые рога". [0+]
8.00 Телеканал "Доброе утро".
10.05 Жизнь других. [12+]
11.05 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 Т/с "Султан моего сердца". [16+]
15.00 Премьера. "Угадай мелодию". Новогодний выпуск. [12+]
15.50 Ледниковый период. [0+]
19.30 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.20 Т/с Премьера. "Солнечный круг". [16+]
23.15 "Вечерний Ургант". Лучшее. [16+]
23.55 Х/ф "Жемчужина Нила". [16+]
1.45 Х/ф "Река не течет вспять". [12+]
3.10 Наедине со всеми. [16+]
3.55 Модный приговор. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00 Т/с "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". [12+]
8.05 Т/с "Сваты". [12+]
10.10, 14.50 "Сто к одному".
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.30 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.40 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
0.40 Т/с "Ликвидация". [16+]
3.10 Т/с "Одесса-мама". [16+]

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.30 Ҡустәнәс. [12+]**
**8.00, 13.00, 19.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 Х/ф "Эмма и Санта-Клаус". [12+]**
**9.45 М/ф "Секретная служба Санта-Клауса". [6+]**
**10.15 Этно-краса. Дневник "Мисс International - Ufa-2020". [12+]**
**10.30 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.00 "Звездная гора новостей".**
**11.15 Х/ф "Радость сильнее". [0+]**
**12.00 М/ф "Нурбостан". [0+]**
**12.15 "Ете егет". [12+]**
**13.15 "Дарю песню". [12+]**
**14.15, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**15.00 Большое путешествие большой семьи. [6+]**
**15.15 "Весело живем!" [12+]**
**15.30 Ҡурай даны. [12+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омская область). КХЛ.**
**19.30 "Бал джигитов". Финал проекта. [12+]**
**22.45 "Яңы йыл-караоке". [12+]**
**23.15 "Башҡорт йыры-2020". [12+]**
**2.15 Х/ф "Скакун". [12+]**
**4.00 Новогодний огонек на БСТ-2017. [12+]**
**6.15 Д/ф "Сказка маленькой Гюлли". [12+]**

### 6 ЯНВАРЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.20, 6.10 Х/ф "Золотые рога". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
6.40 Х/ф "Моя мама - невеста". [12+]
8.00 Телеканал "Доброе утро".
10.05 Жизнь других. [12+]
11.05 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 Т/с "Султан моего сердца". [16+]
15.00 Премьера. "Угадай мелодию". Новогодний выпуск. [12+]
15.50 Ледниковый период. [0+]
19.30 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.20 Т/с Премьера. "Солнечный круг". [16+]
23.00 Х/ф "Бедная Саша". [12+]
1.00 Рождество Христово. Прямая трансляция из Храма Христа Спасителя.
3.15 Д/ф "Рождество в России. Традиции праздника". [0+]
4.05 Х/ф "Зимний роман". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00 Т/с "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". [12+]
6.00 Т/с "Доярка из Хацапетовки-3". [12+]
8.05 Т/с "Сваты". [12+]
10.10, 14.50 "Сто к одному".
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.30 Х/ф "Мама поневоле". [12+]
14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.40 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
21.00 Т/с "Склифосовский. Реанимация". [12+]
23.05 Т/с "Ликвидация". [16+]
1.00 Рождество Христово. Прямая трансляция торжественного Рождественского богослужения.
3.00 Т/с "Одесса-мама". [16+]

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.30 Ҡустәнәс. [12+]**
**8.00, 13.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 Х/ф "Самолетом, поездом, машиной". [12+]**
**9.45 М/ф "Секретная служба Санта-Клауса". [6+]**
**10.15 Этно-краса. Дневник "Мисс International - Ufa-2020". [12+]**
**10.30 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.00 "Звездная гора новостей".**
**11.15 Х/ф "Камыр батыр". [0+]**
**12.00 М/ф "Нурбостан". [0+]**
**12.15 "Ете егет". [12+]**
**13.15 "Дарю песню". [12+]**
**14.15, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**15.00 Большое путешествие большой семьи. [6+]**
**15.30 Ҡурай даны. [12+]**
**15.45 Полезные новости. [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Презентационный фильм БАШГАУ. [12+]**
**16.30 Министерство правды.**
**17.30 Юлдаш йыры-2020. [12+]**
**18.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**19.00 Тайм-аут. Спортивные итоги 2020 года. [12+]**
**20.00 "Путь к храму". [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.45 Рождественское богослужение из Кафедрального собора Рождества Пресвятой Богородицы г.Уфа.**
**1.00 Х/ф "Божественное рождение". [12+]**
**3.15 Спектакль "Таганок". [12+]**
**5.00 Новогодний огонек на БСТ-2018. [12+]**

### 7 ЯНВАРЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Француз". [12+]
8.00 Телеканал "Доброе утро".
10.05 Д/ф "Иисус. Земной путь". [0+]
11.05 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 Т/с "Султан моего сердца". [16+]
15.00 Премьера. "Угадай мелодию". Рождественский выпуск. [12+]
15.50 Ледниковый период. [0+]
19.30 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.20 Т/с Премьера. "Солнечный круг". [16+]
23.25 "Вечерний Ургант". Лучшее. [16+]
0.05 Х/ф "Под одной крышей". [16+]
1.45 Х/ф "Можешь не стучать". [16+]
3.00 Наедине со всеми. [16+]
3.45 Модный приговор. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00 Т/с "Доярка из Хацапетовки-3". [12+]
8.05 Т/с "Сваты". [12+]
10.10 "Сто к одному".
11.00, 20.00 Вести.
11.30 Рождественское интервью Святейшего Патриарха Кирилла.
11.55 Пласидо Доминго и звёзды мировой оперной сцены в Москве. Гала-концерт в Государственном академическом Большом театре.
13.25 Х/ф "Три желания". [12+]
15.40 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
20.35 Д/ф "Без права на ошибку. Рождественский визит в Дамаск".
21.20 Т/с "Склифосовский. Реанимация". [12+]
1.40 Х/ф "Дом малютки". [12+]

### БСТ

**7.00 "С Рождеством!" Концерт. [12+]**
**7.30 Ҡустәнәс. [12+]**
**8.00, 13.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 Х/ф "Божественное рождение". [12+]**
**10.15 Этно-краса. Дневник "Мисс International - Ufa-2020". [12+]**
**10.30 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.00 "Звездная гора новостей".**
**11.15 Х/ф "Умырзая". [0+]**
**12.00 М/ф "Нурбостан". [6+]**
**12.15 "Ете егет". [12+]**
**13.15 "Дарю песню". [12+]**
**14.15, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**15.00 Рождественское послание митрополита Уфимского и Стерлитамакского Никона. [0+]**
**15.15 Д/ф "Благовест". [12+]**
**15.45 Полезные новости. [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Спортивная история". [12+]**
**16.45 Посмотрим... [6+]**
**17.30 Юлдаш йыры-2020. [12+]**
**18.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**19.00 "Уфимская волна-2020". Финал музыкального конкурса радио "Спутник ФМ". [12+]**
**22.45 Йәшлек-шоу-2020. [12+]**
**0.15 "Йырҙарҙа йыллар". Лучшие исполнители башкирских народных песен. [12+]**
**2.00 Х/ф "Божественное рождение-2".**
**4.15 Спектакль "Кьоджинские перепалки". [12+]**

### 8 ЯНВАРЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

4.50, 6.10 Х/ф "Француз". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.40 Х/ф "Особенности национальной охоты в зимний период". [16+]
8.00 Телеканал "Доброе утро".
10.05 Жизнь других. [12+]
11.05 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 Т/с "Султан моего сердца". [16+]
15.15 Премьера. "Угадай мелодию". Новогодний выпуск. [12+]
16.05 Ледниковый период. [0+]
19.50 "Поле чудес". Праздничный выпуск. [16+]
21.00 Время.
21.20 Новогодняя ночь на Первом. [16+]
1.00 Х/ф "Ниагара". [16+]
2.25 Наедине со всеми. [16+]
3.10 Модный приговор. [6+]
4.00 Давай поженимся! [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Т/с "Доярка из Хацапетовки-3". [12+]
8.05 Т/с "Сваты". [12+]
10.10, 14.50 "Сто к одному".
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.30 Концерт Николая Баскова "Игра".
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.40 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
21.20 Т/с "Склифосовский. Реанимация". [12+]
1.40 Х/ф "Снег растает в сентябре". [12+]

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.30 Ҡустәнәс. [12+]**
**8.00, 13.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 Х/ф "Божественное рождение-2". [12+]**
**10.15 Этно-краса. Дневник "Мисс International - Ufa-2020". [12+]**
**10.30 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.00 "Звездная гора новостей". [6+]**
**11.15 Х/ф "Волшебный хвостик". [0+]**
**12.00 М/ф "Нурбостан". [0+]**
**12.15 "Ете егет". [12+]**
**13.15 "Дарю песню". [12+]**
**14.15, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**15.00 "Йома". [0+]**
**15.30 Ҡурай даны. [12+]**
**15.45 Полезные новости. [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Концерт Екатерины Ямщиковой. [12+]**
**17.30 Юлдаш йыры-2020. [12+]**
**18.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**19.00 Х/ф "Из Уфы с любовью". [12+]**
**20.45 "Яңы йыл-караоке". [12+]**
**22.45 Йәшлек-шоу-2020. [12+]**
**0.15 "Зимнее чудо". Концерт БГФ им. Х.Ахметова. [12+]**
**1.30 Х/ф "Ловец ветра". [12+]**
**3.00 Спектакль "Гайфи агай, женись, давай!" [12+]**
**5.00 "Декамерон". [12+]**

### 9 ЯНВАРЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.05, 6.10 Х/ф "Особенности национальной охоты в зимний период". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
6.25 Х/ф "Новогодний ремонт". [16+]
8.00 Телеканал "Доброе утро".
10.05 Жизнь других. [12+]
11.05 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 Т/с "Султан моего сердца". [16+]
15.15 Премьера. "Угадай мелодию". Новогодний выпуск. [12+]
16.05 Ледниковый период. [0+]
19.30, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
23.10 Х/ф "Испытание невиновностью". [16+]
0.50 Х/ф "Как выйти замуж за миллионера". [12+]
2.15 Наедине со всеми. [16+]
3.45 Модный приговор. [6+]
4.35 Давай поженимся! [16+]
5.15 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Т/с "Доярка из Хацапетовки-3". [12+]
8.05 Т/с "Сваты". [12+]
10.10 "Сто к одному".
11.00, 20.00 Вести.
11.15 "Смотреть до конца". [12+]
12.20 "Доктор Мясников". [12+]
13.20 Х/ф "Соседи". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Фермерша". [12+]
1.10 Х/ф "Любовь нежданная нагрянет". [12+]
4.17 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.30 Ҡустәнәс. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 Т/с "День, когда Земля замерзла". [12+]**
**9.45 М/ф "Секретная служба Санта-Клауса". [6+]**
**10.15 Этно-краса. Дневник "Мисс International - Ufa-2020". [12+]**
**10.30 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.00 "Звездная гора новостей". [6+]**
**11.15 Х/ф "Борон заман илендә". [0+]**
**12.00 М/ф "Нурбостан". [0+]**
**12.15 "Ете егет". [12+]**
**13.00 "Дарю песню". [12+]**
**14.15, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**15.00 Үткән гүмер. [12+]**
**15.30 Концерт НСО РБ. [12+]**
**17.30 Юлдаш йыры-2020. [12+]**
**18.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**19.00 Х/ф "Сестренка". [6+]**
**20.45 "Яңы йыл-караоке". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.45 Йәшлек-шоу-2020. [12+]**
**0.15 Концерт Элвин Грея. [12+]**
**1.45 Х/ф "Инвестиции в любовь". [16+]**
**3.15 Спектакль "Мулла". [12+]**
**5.15 "Путь к храму". [12+]**
**6.00 "Наука 102". [12+]**

### 10 ЯНВАРЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "За пять минут до января". [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.05 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 Т/с "Султан моего сердца". [16+]
15.15 Премьера. "Угадай мелодию". Новогодний выпуск. [12+]
16.05 Ледниковый период. [0+]
19.15 "Лучше всех!" Новогодний выпуск. [0+]
21.00 Время.
21.20 "Три аккорда". Концерт в Государственном Кремлевском дворце. [16+]
23.20 Х/ф "Испытание невиновностью". [16+]
1.00 Х/ф "Давай займемся любовью". [12+]
2.55 Наедине со всеми. [16+]
3.40 Модный приговор. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00 Т/с "Доярка из Хацапетовки-3". [12+]
8.05 Т/с "Сваты". [12+]
10.10 "Сто к одному".
11.00, 20.00 Вести.
11.15 "Парад юмора". [16+]
13.30 Х/ф "Соседи-2". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
22.00 Х/ф "Экипаж". [12+]
0.55 Х/ф "Охота на пиранью". [16+]
4.02 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.30 Ҡустәнәс. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 Т/с "День, когда Земля замерзла". [12+]**
**9.45 М/ф "Секретная служба Санта-Клауса". [6+]**
**10.15 Этно-краса. Дневник "Мисс International - Ufa-2020". [12+]**
**10.30 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.00 "Звездная гора новостей". [6+]**
**11.15 Х/ф "Тайна Амангуль". [0+]**
**12.00 М/ф "Нурбостан". [0+]**
**12.15 "Ете егет". [12+]**
**13.00 "Дарю песню". [12+]**
**14.15, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**15.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**15.45 "Дорога к храму". [0+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак барс" (Казань). КХЛ.**
**19.00 "Спортивная история". [12+]**
**19.30 К 80-летию ГАНТ им. Ф.Гаскарова. [12+]**
**21.30, 6.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.45 Йәшлек-шоу-2020. [12+]**
**0.15 "И звучит кубыз, и льется кумыс". Концерт Сибайского концертно-театрального объединения. [12+]**
**2.15 Х/ф "Рахмат". [12+]**
**4.00 Спектакль "Очень простая история". [12+]**
**6.00 "Яңы йыл-караоке". [12+]**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

## ДУҪ-ДОШМАНДЫ АЙЫРА БЕЛГӘН ҮЛМӘҪ ТОҠОМ - УРАЛ КҮРКЕ, ВАТАН КҮРКЕ МИНЕҢ ХАЛҠЫМ!




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА** төҙөнө.

**52-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Мисәт. Юнысова. Инйәр. Роман. Өрлөк. Абаға. Самауыр. Әрһеҙ. Альфа. Ыҙа. Ҡар. Ҡаҙна. Оҫта. Урам. Нөгәр. Атҡа. Сысҡан. Табан. Ғиләжев. Йәрәхәт.

**Вертикаль буйынса:** Сабынлыҡ. Рамазанов. Уҡытыусы. Юрға. Салғый. Нарат. Мцыри. Ҡамҡа. Нимәрә. Йәғәфәрова. Терпе. Театр. Өмә. Ҡанат. Рота. Етен. Көҙ. Айран.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Ғинуар (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 4 (20) дүшәмбе | 8:11 | 9:42 | 13:30 | 15:31 | 17:01 | 18:31 |
| 5 (21) шишәмбе | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:32 | 17:02 | 18:32 |
| 6 (22) шаршамбы | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:34 | 17:04 | 18:34 |
| 7 (23) кесе йома | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:35 | 17:05 | 18:35 |
| 8 (24) йома | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:37 | 17:07 | 18:37 |
| 9 (25) шәмбе | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:38 | 17:08 | 18:38 |
| 10 (26) йәкшәмбе | 8:07 | 9:37 | 13:30 | 15:40 | 17:10 | 18:40 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*АФАРИН!*

## АЛМАЗ ЕҢДЕ!



**Һарытауҙа "Рәсәйҙең Мисс һәм Мистер Студенты - 2020" Бөтә Рәсәй интеллект, ижад һәм спорт конкурсы булып үтте. Конкурсҡа Рәсәйҙең 42 төбәгенән 74 ғариза килгән. Унда илдең бөтә юғары уҡыу йорттары ҡатнашҡан.**

Башҡортостан Республикаһы исеменән конкурста Башҡорт дәүләт аграр университеты студенты Алмаз Ҡарағолов сығыш яһаған. Ул илдең иң яҡшы туғыҙ студенты иҫәбенә инде һәм "Волга буйы федераль округының мистер студенты 2020" исемен яуланы. Шулай уҡ уға "Мистер Дуҫлыҡ" номинацияһы тапшырылды. Алмаз Ҡарағоловҡа 22 йәш, буйы - 187 сантиметр, сығышы менән Бөрйән районынан. Энергетика факультетының беренсе курсында "агроинженерия" белгеслегенә уҡып йөрөй. Спорт менән мауыға, КВН командаһы лидеры. Конкурсты ойоштороусылар - Йәштәр эштәре буйынса федераль агентлыҡ, Рәсәй Йәштәр союзы һәм Һарытау дәүләт юридик академияһы.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**4 ғинуар "Итекле бесәй"** (Ш. Перро), әкиәт. 11.00, 13.00 0+

**"Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 12+

**5, 9 ғинуар "Алтын асҡын"-remake** (А. Толстой), музыкаль мажара. 11.00, 13.00 0+

**5 ғинуар Премьера! "Амеля"** (А. Балгазиза, Н. Крашененников). 18.00 12+

**6, 10 ғинуар "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. 11.00, 13.00 6+

**6 ғинуар "Һөйәһеңме - һөймәйһеңме..."** (Ф. Бүләков), трагикомедия. 12+

**7 ғинуар "Серле көршәк"** (З. Биишева, Д. Кәримова), хикәйәт. 11.00, 13.00 0+

**"Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия 18.00 12+

**8 ғинуар "Итекле бесәй"** (Ш. Перро), әкиәт. 11.00, 13.00 0+

**"Бомба"** (С. Әбүзәр), комедия-фарс. 18.00 16+

**9 ғинуар "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**4, 9 ғинуар "Волшебник Изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 10.00, 12.00 0+

**4, 5 ғинуар "Новый год наоборот"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00, 12.30, 14.00 0+

**4 ғинуар "Килә яуа, килә яуа"** (З. Хәким), комедия. **19.00** 16+

**5 ғинуар "Щелкунчик"** (Н. Соболева, Э.Т.А. Гофман), әкиәт. 10.00, 12.00 0+

**6 ғинуар "Новогодний переворот"** (О. Пичурин), әкиәт. 11.00, 12.30, 14.00 0+

**"Аладдин"** (И. Казакова), мажаралы әкиәт. 10.00, 12.00 6+

**7 ғинуар "Золушка"** (Г. Корнелиссон), әкиәт. 10.00, 12.00 0+

**7, 9 ғинуар "Новый год наоборот"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00, 12.30 0+

**"Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 12+

**8 ғинуар "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), әкиәт. 10.00, 12.00 0+

**"Новогодний переворот"** (О. Пичурин), әкиәт. 12.30 0+

**9 ғинуар "Уйҙарымдан ғына юғалма..."** (И.Ғиләжев, З.Бураҡаева) музыкаль драма. 12+

**10 ғинуар "Волшебник Изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 12.00, 15.00 0+

**"Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия. 12.00 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**4, 5, 6, 7, 8 ғинуарҙа** сәғәт 11.00, 14.00, 17.00 һәм **9, 10 ғинуарҙа** сәғәт 11.00, 14.00 **"Верные друзья"** (А. Хайт, А. Левенбук). 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**4, 6, 7, 8 ғинуар "Главный новогодний утренник Уфы"**, тамаша. 12.00 0+

**5 ғинуар "Новый год с классикой"**. 18.00

**"Күстәнәс - 3"** театрлаштырылған концерт. 6+

**6 ғинуар "Фимбо. Лаунж-концерт"** 18.00 6+

**7 ғинуар "Рождественский soundtrack-концерт"** Эстрада-джаз оркестры. 18.00 6+

**8 ғинуар "Рождественский орган"**. 18.00 6+

### БР Милли музейы

**4-31 ғинуар "Йәм-йәшел шыршы энәләрендә ялтыр мөғжизә..."** күргәҙмә.

**8-14 ғинуар "Ҡышҡы урманда Яңы йыл мажаралары"**.

**12 ғинуар** Инстаграм социаль селтәрендә **"Ҡыш бабай йомаҡтары"**.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# "БИРЕШМӘ!"



**"Бирешмә!" үҫмерҙәр өсөн башҡортса беренсе телевизион сериал ҙур популярлыҡ яулаған. Дүрт төп герой - Данир, Гәлсәр, Хәйҙәр һәм Гөлгөнә меңәрләгән йәш тамашасының һөйөүен яулаған. Сериалдың икенсе сезонын телевизор ҡараусылар 3 йыл көттө. Ниһайәт, Башҡортостан юлдаш телевидениеһында "Тамыр"ҙың ижади командаһы фильмды күрһәтә башланы.**

"Бирешмә!" сериалы үҫмерҙәрҙе борсоған мәсьәләләр, уларҙың тормошта үҙ урындарын табыуға, сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән балалар проблемаһына йәмәғәтселектең иғтибарын йәлеп итеп, социаль әһәмиәтле проектҡа әүерелгәйне. Ойоштороусылар 2018 йылда "Бирешмә!" мәрхәмәтлек концертын уҙғарҙы, 2019-2020 йылдарҙа "Бирешмә!" беренсе балалар премияһын тапшырҙы, ике йыл дауамында үҫмерҙәргә һөнәр һайларға ярҙам иткән "Бирешмә! Профи" тапшырыуын сығарып килә.

- Беҙ бик ауыр, әммә оло теләк менән ошо көнгә - "Бирешмә!" сериалының икенсе сезонына килеп еттек, - тине "Тамыр" телеканалы директоры Гөлназ Ҡолһарина. - Беренсе сезон сыҡҡандан һуң балаларҙа икенсе сезонды ла төшөрәсәкбеҙ тип вәғәҙә биргәйнек. Вәғәҙәне үтәргә кәрәк. Был ололарҙың балалар алдындағы бурысы. Фильмды төшөргән ваҡытта беҙгә көс-ҡеүәт өҫтәп торған йәш тамашасыларыбыҙға рәхмәт. Уларҙың ҡыҙыҡһыныуы, социаль селтәрҙәр аша ихлас мөнәсәбәттәрен белдереүҙәре, "Бирешмә!" ойошторған бөтә конкурстарҙа актив ҡатнашыуҙары беҙҙең өсөн йотом һыу кеүек. Беҙ уникаль, ҡәҙерле, үҙебеҙҙеке булғанды ижад итергә тейешбеҙ. Башҡорт телендә аралашыу даирәһен киңәйтергә тейешбеҙ. Һәм был эшкә оло яуаплылыҡ менән ҡарарға, күңел һалып, сифатлы эшләргә бурыслыбыҙ. "Тамыр" ошо маҡсаттарҙы алдына ҡуя һәм шуларға ирешә.

# БЕЙЕҮСЕЛӘРЕБЕҘ...




**Легендар Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле Башҡорт опера һәм балет театры сәхнәһендә Өфө тамашасыһына концерт күрһәтте. Концертҡа республика Башлығы Радий Хәбиров та килгәйне. Саранан һуң республика етәксеһе сәхнә артына үтеп, артистарға сығыштары өсөн рәхмәт белдерҙе.**

Өфө тамашасыһына тәҡдим ителгән "Донъя халыҡтары бейеүҙәре" программаһы Парижда "Биш континент" алтын миҙалына һәм ЮНЕСКО-ның "Донъя иһсеһе" исеменә лайыҡ булған. Артистар башҡорт хореографияһы классикаһын - Фәйзи Ғәскәров ҡуйған билдәле "Зарифа", "Өс туған", "Ете ҡыҙ" бейеүҙәрен күрһәтте. Тамашасылар Алексей Шишкиндың "Русь" хореография композицияһын да ҡараны. 2019 йылдың премьераһы бик күп ыңғай баһа алды һәм тамашасыларҙы битараф ҡалдырманы. Был кисттә Фәйзи Ғәскәров исемендәге ансамблдең 81-се ижад миҙгелена әҙерләнгән премьералары ла күрһәтелде. Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына ғәскәровсылар яңыртылған "Кыр ҡаҙҙары" бейеү композицияһын (1985 йылда Фәя Гәрәева ҡуйған) һәм Марат Кәримовтың "Һалдат сюитаһы"н тәҡдим иткәйне. Концертта ошо бейеүҙәр ҙә башҡарылды. Республика Башлығы Яңы йыл алдынан ансамблгә яңы костюмдар, ә пандемия бөткәс, сәфәрҙәр бүләк итергә вәғәҙә бирҙе.

# КИНОҒА ТӨШ!



**Киноға төшөргә теләгән Өфө балаларын кастинг үтергә саҡыралар. Унда 8 йәштән 13 йәшкә тиклемге малайҙар талап ителә.**

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповҡа арналған "Рәми. Шағир көндәлеге" тулы метражлы художество фильмын билдәле режиссер Булат Йосопов төшөрә.

Һайлап алыуҙың беренсе этабы онлайн форматта үтәсәк. Ғаризалар 10 ғинуарға тиклем ҡабул ителә. Теләүселәр башҡорт телендә шиғыр/проза әҫәре/мәҫәл ятлап видеоға төшөргә тейеш. Был видеоның атамаһына тулы исемен, йәшен, ҡала/ауылын күрһәтеп яҙырға кәрәк. Шунан эштәр ҡабул ителгән сайтҡа инеп һорауламаны тултырырға, видео һәм фотоны ҡушып һалырға. Йәш актерҙарға түбәндәге талаптар ҡуйыла: башҡорт телен белгән 8-13 йәшлек малай, спектакль һәм фильмдарҙа ҡатнашыу тәжрибәһе булыуы хуплана. Ебәрелгән эштәр ҡаралғас, кандидаттар Өфөгә һынау үтергә саҡырыласаҡ.

# ТӨҘӘЛӨШ ДАУАМ ИТӘ



**Сибай концерт-театр берекмәһе бинаһын яңыртыу һәм элекке хәленә ҡайтарыу эштәрен тамамлау 2021 йылға күсерелә, быға подрядсының насар эшләүе сәбәпсе. Был турала Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмә барышында төҙөлөш һәм архитектура министры Рәмзил Күсәрбаев хәбәр итте.**

"Равелин" Мәскәү компанияһы менән төҙөлгән килешеүгә ярашлы эштәр 2020 йылдың ноябрь айында, ҡаланың 65 йыллығына, тамамланырға тейеш булған. 2015 йылдың сентябрендә сыҡҡан янғын эҙемтәһендә зыян күргән икенсе, өсөнсө ҡаттарҙы һәм түбәнең бер өлөшөн яңыртыу эштәре 2019 йылдың февралендә башланған. Бина мәҙәни мирас объекты булғанға күрә, проект бик күп талаптарға яуап бирергә тейеш. Быға тиклем хәбәр ителеүенсә, яңыртыуға "Мәҙәниәт" милли проекты сиктәрендә 263 миллион һум аҡса алынған.

# "ҺЕҢЛЕКӘШ" ФИЛЬМЫ...



**"Һеңлекәш" фильмы Италияла Х "Витторио Венето" халыҡ-ара балалар фильмдары кинофестивалендә йәштәр фильмдары араһында иң яҡшыһы булды. Башҡортостан Республикаһының халыҡ шағиры Мостай Кәримдең "Беҙҙең өйҙөң йәме" повесы буйынса төшөрөлгән картинаның режиссеры - Александр Галибин.**

Фильм 2020 йылдың 16 ноябренән 12 декабренә тиклем онлайн форматта күрһәтелде. Конкурс программаһында Ҡытайҙан, Һиндостандан, Рәсәйҙән, Чехиянан, Германиянан һәм Италиянан 12 фильм ҡатнашты. Фестивалдең ойоштороусыһы булып 1995 йылда Италияла нигеҙ һалынған "400 Colpi" коммерцияға ҡарамаған ассоциацияһы сығыш яһаны. Маҡсаты - фестивалдәр, белем биреү курстары, кинематографик күҙәтеү аша аралашыу сараһы һәм мәҙәни үҫеш булараҡ йәш аудиторияны киноға йәлеп итеү. Фильм Мәскәү, Санкт-Петербург, Плесс, Ялта, Светлогорск, Выборг, Волоколамск, Смоленск, Түбәнге Новгород, Төмән, Владимир, Тамбов һәм Туапсе ҡалаларында уҙған фестивалдәрҙә, шулай уҡ Лондонда, Брюсселдә һәм Венала күрһәтелде.

# "БАШҠОРТ ЙЫРЫ"...




**Башҡортостанда БСТ каналында телешоу форматында уҙған ике популяр ижади конкурсҡа йомғаҡ яһалды.**

"Башҡорт йыры" телевизион конкурсының финалы 20 декабрҙә тура эфирҙа булды. Гран-призы Сибай концерт-театр берләшмәһе йырсыһы Әлфир Заманов яуланы. Артиска 30 йәш, сығышы менән Баймаҡ районынан.

Сибай концерт-театр берләшмәһенән "Сибай һыйылары" фольклор ансамбле "Байыҡ" республика телевизион конкурсының Гран-приһын алды (етәксеһе - Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы Эльвира Аҡназарова). "Кәкүк сәйе", "Шаян еңгәләр", "Тол ҡатындар" бейеүҙәрен ҡуйыусы - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Гөлназ Аҡназарова.

Сибай концерт-театр берләшмәһенең тағы бер яңы ижади коллективы - "Ынйыҡай" бейеү студияһы конкурс лауреаты булды.

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДУҪ ҮПКӘЛӘҺӘ...

## дошман кинәнер

Донъя киң тип таралма: таралған тарыны тауыҡ сүпләй.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡыҙ-ҡатынды яулау өсөн ирҙәр ғәжәйеп матур ялған уйлап сығара. Ҡыҙ-ҡатынды ташлау өсөн ирҙәр иң ахмаҡ һәм иң мәғәнәһеҙ ялған уйлап сығара.

**(Колетт).**

Ир-егеттең холҡо тураһында уның ҡатынының һаулыҡ торошо һөйләй.

**(Сирил Конноли).**

Кешеләр үҙҙәренең етешһеҙлектәренән арынырға яратмай һәм уларҙы ниндәйҙер дәрәжәгә күтәреүҙе өҫтөн күрә.

**(Тадеуш Котарбинский).**

Әгәр ҙә кеше сусҡаларса эш итһә, үҙен: "Кисерегеҙ, мин бары тик кеше генә бит!" - тип аҡлай, әгәр ҙә уның менән сусҡаларса ҡыланһалар: "Туҡтағыҙ, мин дә кеше бит!" - тип тауыш күтәрә.

**(Карл Краус).**

Бер нәмә лә эшләмәгәндәр генә яңылышмай. Бер нәмә эшләмәү ҙә яңылышлыҡ, әлбиттә..

**(Эмиль Кроткий).**

Ҡатын-ҡыҙҙың күҙ йәштәрендә йәш ҡына ирҙәрҙең көшөләгәндәгеләр ереп юҡҡа сыға.

**(Александр Кумор).**

Хатта сәнғәт әҫәренең камиллығы ла уның кимәлен билдәләмәй, сөнки һәр кимәлдең үҙ камиллығы..

**(Григорий Ландау).**

Был актрисаның карьераһы... режиссер тормошонда уйнаған роленән башланды.

**(Габриэль Гауб).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер билдәле шағир үҙ әҫәрендә шулай тип фекер йөрөтә: "Беҙҙең бар тормошобоҙ - оҙон бер коридор, ике яҡлап бик күп ишектәр урынлашҡан. Ул ишектәрҙең ҡайһы берҙәрендә "Беләм", икенселәрендә "Ышанам" тип яҙылған. Беҙ коридор буйлап киләбеҙ һәм ишектәрҙең ҡайһыһына инергә белмәйбеҙ. Ҡайһы ишек артында хәҡиҡәт, ҡайһыһында - ялған, тип баш ватабыҙ. Әммә... ишекте дөрөҫ һайламай, яңылышабыҙ. Ә аҙаҡ: "Ниңә былай килеп сыкты һуң әле?"- тип аптыранабыҙ. Мин бит "беләм" инем, тибеҙ. Эйе, мәңгелек йомаҡ был. Бында аҡыл ғына ярҙам итмәйәсәк. Ышанһаң - көслө булырһың, белдекле икәнһең - көсһөҙ... Шуға ла, һеҙҙең алда "Нисек йәшәргә?" тигән һорау торһа, йөрәгеңдән һора. Аҡыл - хәйләкәр ул, ә йөрәк һәр ваҡыт дөрөҫтө белә".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
30 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3400
Заказ - 1065/12